ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

11-17 июль (майай) 2020

№28 (914)

kiskeufa.ru • 2002 йылдан башлап сыға • һатыуҙа хаҡы ирекле

БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

Өйҙә эшләүгә күсеп, йәнле аралашыуҙан яҙайыҡмы? 3



Фатирлы булғың киләме? 6



Уларҙың күҙәтеү ғәмәлдәре... беҙҙең хоҡуҡтар һағында 8-9



Әхлаҡты, инсафлыҡты... рекламаларға кәрәк 13



ТВ-программа 14

*Матур китаптар - ғәжәйеп нәмәләр күренәсәк көҙгө, аулаҡтағы серҙәш, яңғыҙлыҡта иптәш, көсһеҙлектә ярҙамсы, хәсрәттәрҙә шатлыҡ килтереүсе, фекерҙәрҙе нурландырыусы, үткән замандарҙың хәлдәрен һөйләп тороусы, тарихты хикәйәт итеүсе, аҡыллы кешеләрҙең аҡылдарын күҙгә күрһәтеүсе, хаҡы арзан, файҙаһы күп нәмә.*

*Ризаитдин ФӘХРЕТДИН.*

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## Башҡортостандың баш ҡалаһы Өфөгә "Хеҙмәт ҡаһарманлығы ҡалаһы" исеме бирелде. Был яңылыҡ һеҙҙә ниндәй хәтирәләр һәм тәьҫораттар тыуҙырҙы?

***Азамат АҠЪЮЛОВ, тарих фәндәре кандидаты, БДУ доценты:***
Бөйөк Ватан һуғышы башланғас, Рәсәйҙең төп терәк төбәктәренең береһе булараҡ, шулай уҡ географик яҡтан уңайлылығы менән Башҡортостан илдең ышанычлы тылына әйләнә. Шуның өсөн дә республикаға Гитлер баҫҡынсыларына ҡаршы ике фронтта - яу ҡырында һәм тылда көрәш алып барырға тура килә. Баш ҡалабыҙ Өфө был йылдарҙа тотош Көньяҡ Уралда иң ҙур индустриаль үҙәккә әүерелә. Илдең көнбайыш тарафтарынан беҙгә көнө-төнө завод-фабрикалар ҡорамалдары, станоктар тейәлгән оҙон-оҙон составтар ағыла: оккупацияла ҡалыу хәүефе тыуған ҡалаларҙан, шулай уҡ Мәскәүҙән, Ленинградтан стратегик әһәмиәткә эйә завод-фабрикалар, ғилми учреждениелар, һуңыраҡ хәрби госпиталдәр эвакуациялана. Өфөлә ошоға тиклем булмаған химия, туҡыу, электр энергияһы кеүек йүнәлештәге сәнәғәт тармаҡтары барлыҡҡа килә. 1941-1942 йылдарҙа ғына ла 50-гә яҡын сәнәғәт предприятиеһын үҙ ҡанаты аҫтына һыйындыра баш ҡалабыҙ. Улар менән бергә үҙ предприятиеларын оҙатып килгән һәм ошонда эштәрен дауам итәсәк белгестәр, хеҙмәткәрҙәр, эшселәр һаны 100 меңдән ашып китә. Был заводтар һәр ҡайһыһы үҙ йүнәлеше буйынса Өфөлә электән эшләп килгән ошондай уҡ предприятиеларға берләшеп, ҡайһылары үҙаллы рәүештә эштәрен дауам итәләр. Мәҫәлән, Өфө паровоздар ремонтлау заводы Запорожье, Станиславский, Гомель ҡалаларынан килгән ошондай уҡ заводтар иҫәбенә киңәйтелә, ҡеүәте арта. Өфө моторҙар эшләү заводы иһә Рыбинскиҙан эвакуацияланған ҡорамалдар иҫәбенә ҙурайтыла. 1941 йылдың ноябрендә уҡ Өфөлә өр-яңы предприятие - "Уфимкабель" эш башлай, ул Одесса, Киев, Мәскәү заводтары нигеҙендә төҙөлә. Өфө кондитер фабрикаһы иһә витамин заводы тип үҙгәртелә. Һөҙөмтәлә сәнәғәт продукцияһы етештереү күләме биш тапҡырға арта һәм улар бөтәһе лә етештереү ҡеүәттәрен фронт ихтыяжын тәьмин итеүгә йүнәлтә. Мәҫәлән, туҡыу комбинаты хәрби кейем тегә башлай, паровоз ремонтлау заводы боеприпастар етештерә. Өфө нефть эшкәртеү заводы коллективы был йылдарҙа ысын мәғәнәһендә хеҙмәт ҡаһарманлығы күрһәтә: нефть быраулау һәм эшкәртеү буйынса "Икенсе Баку" өлгөһөнә өлгәшә. Өфө халҡы көнө-төнө хеҙмәт вахтаһында тороуға ҡарамаҫтан, хәрби техника өсөн 3 миллиондан ашыу үҙ аҡсаһын Оборона фондына йыйып тапшыра. Был аҡсаға "Башҡортостан истребителе", "Башҡортостан нефтсеһе" самолеттары, шулай уҡ "Башҡортостан пионеры", "Башҡортостан элемтәсеһе" тип исемләп танктар колоннаһы, "Салауат Юлаев", "Александр Невский", "Полководец Суворов" бронепоездары төҙөп, фронтҡа оҙатыла.

Өфө госпиталдәре лә тиҫтәләрсә меңләгән яралыларҙы аяҡҡа баҫтырып, дөйөм көрәшкә үҙ өлөштәрен индерә. Әйткәндәй, был эшкә иммунопрепараттар етештереүсе Өфө ғилми-тикшеренеү институты булышлыҡ итә. Унда яралыларҙы гангренанан ҡотҡарып алып ҡалыу әмәле табыла: институтта бының өсөн махсус сыворотка етештерелә башлай. Мәҙәниәт, сәнғәт эшмәкәрҙәре, яҙыусылар ҙа һуғышсыларҙың һәм тылдағы халыҡтың рухын күтәреүгә, уларҙа илһөйәрлек тәрбиәләүгә һәм еңеүгә ышаныс тыуҙырыуға ҙур көс һала. Ышанычлы тыл Еңеүҙе яҡынайта.

Фашист менән йөҙгә-йөҙ алышҡан, емереклектәрҙән Феникс ҡош кеүек ҡайтанан ҡалҡып сыҡҡан Герой ҡалаларыбыҙ булған кеүек, тиңһеҙ хеҙмәт ҡаһарманлығы күрһәткән ҡалалар ҙа юғары баһаға һәм ихтирам билдәһенә күптән лайыҡ ине, әлбиттә. Бик дөрөҫ ҡарар тип уйлайым һәм баш ҡалабыҙҙың ошо исем бирелгән ҡалалар иҫәбендә булыуына сикһеҙ шатмын, тик шуныһы ғына күңелде ҡыра: беҙгә Еңеү көнөн яулашҡан, һуғыштан һуң да нисәмә йылдар гөрләп эшләп торған завод-фабрикаларыбыҙ шауы ғына тынып ҡалды, күптәре көрсөккә төшөп, бөтөнләйгә ябылып бөттө, ә беҙ бөгөн Ҡытай продукцияһы менән мөрхәтһенергә мәжбүрбеҙ. Хеҙмәт ҡаһарманлығы тарихта ғына тороп ҡала күрмәһен, тип борсолам...

(Дауамы 2-се биттә).




12+

ӘЙТЕР ҺҮҘЕМ БАР!

# ИҠТИСАД МЕНӘН...

## мәктәптән үк ҡыҙыҡһынһын бала

**Беҙҙең башҡорт халҡы, ғөмүмән, ауыл халҡы, элек-электән ошо ерлектә булған тәбиғәт байлыҡтарын файҙаланып, шуны эшкәртеп, үҙен аҙыҡ-түлек менән тәьмин итеп йәшәгән. Әммә арабыҙҙа үҙе етештергәнде һата белгәндәр бик һирәк, ә баҙар иҡтисадында был төп талаптарҙың береһе. Шуның өсөн балаларға, йәш быуынға сифатлы аҙыҡ-түлек етештереп, һатыу итеү белемдәрен - иҡтисад нигеҙҙәрен өйрәтеү, уларҙы баҙар мөхитендә йәшәрлек итеп тормошҡа әҙерләү бик кәрәк.**

Ысынында, беҙ бит хатта баҙар төшөнсәһенең ысын мәғәнәһен дә белмәйбеҙ. Берәү аҙыҡ-түлек сығарып һатып ултыра, икенселәре шуны килеп һатып ала - бына шул баҙар икән тип уйлайбыҙ. Баҙар мөнәсәбәттәре тураһындағы ғилемде балаларға дөрөҫ өйрәтеү мөһим. Был йәһәттән Рәсәй кимәлендә финанс мәғлүмәтлелеге буйынса стратегия ҡабул ителеүе бик урынлы булды булыуға, тик финансты иҡтисадтан айырып өйрәтеүҙәре генә дөрөҫ түгел. Финанстың тамыры - ул иҡтисад белеме, һәм улар бер миҙалдың ике яғы.

Тағы шул да мөһим: иҡтисади белем процессуаль алым менән эшләгәндә генә һөҙөмтәле була, ә бының өсөн балаларға, исмаһам, мәктәптә дәрес ваҡытында бер-береһе менән һатыу итергә, аҡса менән эш итергә өйрәтергә, хаҡтар нисек формалаша икәнен аңлатырға кәрәк. Ғөмүмән, уҡытыу эшендә мәғлүмәт биреү менән генә сикләнеүҙе туҡтатып, уның тормошта кәрәк булыуын, тимәк, белем булып формалашыуын хәстәрләү мөһим. Сөнки кеше мәғлүмәтте түгел, ә белемде үҙ мәнфәғәтендә, эштә файҙалана һәм уның компетенцияһы - оҫталығы барлыҡҡа килә. Был маҡсатта балаларҙы ниндәй ҙә булһа хужалыҡ эшенә йәлеп итеү отошло булыр. Мәҫәлән, элек мәктәп уҡыусылары колхоздарҙа, малсылыҡ фермаларында эшләп, шундағы техника менән эш итеп ҡарай ине. Аҙаҡ улар үҙҙәре ҡыҙыҡһынып китә, кемдәрелер ниндәйҙер камил булмаған техниканы йүнәтеп, артабан белемен үҫтерә, яңы асыштар яһарға ынтылыш, теләк тыуа ине. Әле, ҡыҙғанысҡа күрә, бына ошо "танып белеүҙең процессуаль алымы" тигән төшөнсәнең кимәле шул тиклем түбән беҙҙә. Мәктәптә генә түгел, хатта юғары уҡыу йорттарында практик белем йүнләп бирелмәй. Ә аҡса эшләү, һатыу итеү өсөн бөтә нәмәне практика аша танып белеү мөһим.

Кемдең нимәһе ауырта, шуны һөйләй, тигәндәй, мине лә беҙҙең иҡтисади белемле булыуыбыҙ, аҡса эшләүебеҙ һәм балаларҙың ошо заман шарттарында донъя көтөргә өйрәнеүҙәре борсой. "Массалар аңын ялмап алған идея матди көскә әүерелә" тигән хәҡиҡәт үҙенең көсөн хәҙерге заманда ла аҡлар, моғайын. Күмәкләп тотоноп, киләсәк быуынға ошо иҡтисади белем биреү-алыу эшен яйға һалып алырға кәрәк.

**Вәҡифә ХӘЙРУЛЛИНА,**
**БДУ профессоры, БР-ҙың атҡаҙанған иҡтисадсыһы.**

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

# Башҡортостандың баш ҡалаһы Өфөгә "Хеҙмәт ҡаһарманлығы ҡалаһы" исеме бирелде. Был яңылыҡ һеҙҙә ниндәй хәтирәләр һәм тәьҫораттар тыуҙырҙы?

**(Башы 1-се биттә).**

***Рәшит ШӘКУР, телсе ғалим, Өфө ҡалаһының Почетлы гражданы:*** Был исем бигерәк тә Бөйөк Ватан һуғышы йылдарында Өфөнөң Еңеүгә индергән өлөшөн иҫәпкә алыу нигеҙендә бирелгәндер. Был йәһәттән Өфө ошо исемде алған ҡалалар араһында иң алдынғы урында тора. Сөнки баш ҡалабыҙ һуғыш ауырлыҡтарын күтәреү йәһәтенән ҙур өлгө күрһәткән. Башҡортостандан һуғышҡа 700 мең кеше киткән, уларҙың күбеһе Өфө ҡалаһынан юлға сыҡҡан. Ҡалабыҙҙың Дим тимер юл станцияһынан данлыҡлы 112-се Башҡорт кавалерия дивизияһы яуға юлланған. Дәһшәтле һуғыштан, ҡан ҡойоштан 100 меңдән ашыу эвакуацияланған кешене асыҡ йөҙ менән ҡаршы алған баш ҡалабыҙ халҡы. Күптәр телгә алғанса, бында Украинаның фәндәр академияһы, Рәсәйҙең төрлө завод-фабрикалары күсерелгән һәм тырыш яҡташтарыбыҙ ярҙамында металлургия, химия, производство яңы һулыш алып, ошонда нигеҙләнеп эшләп киткән. Уларҙың ҡайһы берҙәре бөгөн дә данлыҡлы хеҙмәт юлын дауам итә, алдынғылыҡты бирмәй. Ошоларҙы иҫәпкә алып, Өфө ҡалаһының Почетлы гражданы булараҡ та, мин дә уға "Хеҙмәт ҡаһарманлығы ҡалаһы" тигән исем бирелһен өсөн ҡултамғамды ҡуйҙым.

Өфө ҡалаһы тарихы менән дә данлыҡлы. Беренсенән, ул Рәсәйҙең иң боронғо ҡалаларының береһе. Әгәр ул датаны рәсми рәүештә байрам иткән булһаҡ, ҡалабыҙҙың 1500-1600 йыллығын билдәләр инек бөгөн. Башҡорт Өфөһөнөң йәше шулай иҫәпләнә. Урыҫ ҡәлғәһе булараҡ нигеҙ һалыныуына ла байтаҡ бит хәҙер, яңы Өфө тарихы ла борондан - 1586 йылдан башлана. Бөгөн бына шундай күпте күргән, күпте кисергән ҡалабыҙ ҙур мәҙәниәт, әҙәбиәт, фән үҙәге, көслө республиканың баш ҡалаһы булып танылған. Өфө тәбиғәте, халыҡтың уңайлыҡтарын күҙаллап заманса төҙөкләндерелә барыуы менән дә ошо исемгә лайыҡлы. Бында әле лә меңдәргә терәк-таяныс булған,



илдең тылын һаҡлаған кешеләрҙең вариҫтары, алсаҡ йөҙлө, эшсән, мәҙәниәтте яратҡан, тыныс тормошта оптимист халыҡ йәшәй. Улар бөгөнгө Өфөнөң йөҙөн билдәләй, минең күҙ алдымда ғына ла баш ҡалабыҙ нисек үҙгәрҙе, ысын башҡорт ҡалаһы булараҡ формалашты - әҙәбиәтебеҙ, сәнғәтебеҙ ижад ителә ошонда. Өфө милли булмышын йылдан-йыл юғарыраҡ күтәрә. Бынан бер нисә йыл элек СССР республикаларының етәкселәре баш ҡалабыҙға килгәндә Үзбәкстандың элекке президенты Ислам Кәримов әйткән һүҙҙәр иҫтә ҡалған: "Комфортлы температура бында", - тигәйне ул. "Хеҙмәт ҡаһарманлығы ҡалаһы" тигән маҡтаулы исемгә лайыҡ булған Өфөбөҙҙә артабан да халҡыбыҙ өсөн уңайлы ошо мөхит һаҡланһын.

***Нурия Ирсаева, РСФСР һәм БАССР-ҙың халыҡ артисы, Өфө ҡалаһының Почетлы гражданы:*** Өфөбөҙгә бирелгән шундай данлыҡлы ғорур атама бөтә ҡалаларға ла тәтемәй бит ул. Был хәбәрҙе ишетеү ҡыуанысымды генерал-майор Шаймуратовҡа Рәсәй Геройы исеме бирелгәндәгенә тиңләргә була, оҙаҡ көткән лайыҡлы баһалар икеһе лә. Ғорурландыра, сөнки Өфө менән бергә беҙҙе - уның халҡын да, күтәрҙеләр. Баш ҡалабыҙ Бөйөк Ватан һуғышы йылдарында афәттән күпме баланы йолоп алып ҡалған, барлыҡ эвакуацияланыусыларҙы һәр кем үҙ өйөнә индереп, үҙ ҡурсауына алған. Ә инде Еңеү өсөн хатта 10 йәшлек малай-ҡыҙҙары ла эшкә сыҡҡан.

Өфөлә урынлашҡан беҙҙең М. Ғафури исемендәге Башҡорт академия драма театры коллективы ла һуғыш йылдарында ҡаһарман хеҙмәт юлын үткән тип әйтергә була. Сөнки өлкән коллегаларыбыҙ ошо ауыр заманда илен яҡлап йәнен аямай алышҡандарға тыуған яҡтарынан сәләм еткереп, яңы еңеүҙәргә рухландырып, күңелдәрендә яҡты киләсәккә өмөт уятып, туптар шартлауынан, пуляларҙан ҡурҡмай, фронттың алғы һыҙығында концерттар ҡуйған. Театрыбыҙҙың фронт бригадаһында Зәйтүнә Бикбулатова, Рәғиҙә Янбулатова, Арыҫлан Мөбәрәков, Вәли Ғәлимовтар һәм башҡалар эшләгән ул йылдарҙа. Уларҙың сығыштарына шаһит булған ветерандар: "Эй бирелеп ҡараныҡ, актрисалар үҙҙәре лә илай-илай сығыш яһанылар, фронт яҡын булһа ла, һис ҡурҡыуҙарын һиҙҙермәйҙәр ине", - тип, шундай йылы һүҙҙәр менән иҫкә ала торғайнылар.

Күңелемә Өфөнөң һәр осоро ла ҡәҙерле, яҡын. Бында мин 10-сы синыфты тамамлауға театр факультеты асылды, унда уҡып бөтөүгә, өр-яңы театр төҙөлдө. Мин шундай матур осорға, театрҙың үҫеш мәленә тап килдем. Зәйтүнә Бикбулатова, Хөсәйен Ҡудашев, Риф Ғирфанов, Роза Кәримова, Илшат Йомағоловтар араһына кереп, шәп коллективта эш башланым. Өфөнөң мәҙәни донъяһына шулай инеп киттем, бөгөн мин яратҡан тамашасыларым өсөн һаман да ижад итеүемә ҡыуанып йәшәйем. Ҡайҙарҙа ғына гастролдәрҙә булманыҡ, әммә баш ҡала тамашасыһы күңелгә яҡыныраҡ, улар беҙҙе бөтөнләй башҡаса ҡабул итә төҫлө. Шуға ла ошо Өфөнән, бала саҡтан "Их, шунда эшләйһе ине!" тип хыялланған Башҡорт академия драма театрын ташлап, бер ҡайҙа ла китмәнем. Хеҙмәт ҡаһарманлығы ҡалаһының бөтә эшсәндәре лә тап бына шундайҙыр, үҙ эшенә, һөнәренә, ҡалаһына, иленә тоғро хеҙмәт иткән халыҡтыр, тип ышанам.

**Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА,**
**Сәриә ҒАРИПОВА**
**яҙып алды.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Башҡортостанда COVID-19 йоҡтороусылар һаны тәүлек эсендә 47-гә артҡан. Пандемия башланғандан алып республикала бөтәһе 5778 коронавирус инфекцияһы осрағы теркәлгән. Ошо ваҡытта 3 759 кеше һауыҡҡан, 19-ы вафат булған. Рәсәй буйынса 9 июлгә мәғлүмәттәр буйынса 707 301 сирле теркәлгән, уларҙың 6 509-ы һуңғы тәүлектә асыҡланған. Пандемия башланғандан алып 481 316 кеше һауыҡҡан, 10 843-ө яҡты донъя менән хушлашҡан.

✓Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров республика Хөкүмәтендәге оператив кәңәшмәлә йәнә Транспорт һәм юл хужалығы буйынса дәүләт комитеты һәм Дәүләт автоинспекцияһы етәкселегенә эскән водителдәр менән көрәште көсәйтергә ҡушты. Был июндә теркәлгән юл-транспорт ваҡиғалары менән бәйле.

✓Башҡортостанда күп фатирлы йорттар төҙөлөшөн тамамлауҙы координациялау буйынса республика штабы ойошторола. Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров тейешле бойороҡҡа ҡул ҡуйҙы. Уның рәйесе итеп Башҡортостан Республикаһы Хөкүмәте премьер-министрының беренсе урынбаҫары Андрей Назаров тәғәйенләнде. Тәү сиратта штаб "Эрмитаж. Горсовет", "Эрмитаж на Ленина", "Белая река", "Московский", "Миловский парк" һәм "Серебряный ручей" кеүек проблемалы объекттар өсөн яуаплы.

✓Башҡортостанда республикаға аҡса эшләргә килгән сит ил граждандарына талаптар үҙгәртелде. Республика Башлығы ҡул ҡуйған тейешле указ хоҡуҡи мәғлүмәт сайтында баҫылған. Хәҙер виза алыу талап ителмәгән тәртиптә килгән сит ил кешеһенә патент биргәндә ҡағыҙҙа уның һөнәре йәки хеҙмәт эшмәкәрлеге төрө күрһәтелә. Төҙәтмәләр федераль ҡануниәткә ярашлы сит ил эшсе көсөн иҫәпкә алыу маҡсатында индерелгән. Республика Башлығы указы ҡул ҡуйылған көндән - 2 июлдән ғәмәлгә инде.

✓"Янғантау" геопаркы Рәсәйҙә һәм Бойондороҡһоҙ Дәүләттәр Берләшмәһендә тәүгеләрҙән булып бөтә донъя ЮНЕСКО селтәренә инде. Геопарк - асыҡ һауалағы музей, уның төп экспонаттары - тауҙар, мәмерйәләр, геологик киҫелештәр, минералдар һәм файҙалы ҡаҙылмалар. Салауат районында геопарк 20-нән ашыу геологик объектты берләштерә, уларҙың өсәүһе (Мәсетле киҫелеше, Оло Лука киҫелеше, Янғантау тауы) - халыҡ-ара, 10-һы - милли, 21 объект белем арттырыу әһәмиәтенә эйә. Биләмәлә Ҡыҙыл китапҡа ингән бик күп үҫемлектәр үҫә, йәнлектәрҙең һирәк осрай торған төрҙәре йәшәй.

✓ *Өйҙә эшләү, тигәндән, ул хеҙмәткәр ни теләй, шуның менән көн үткәреүгә форсат тыуыу тигән һүҙ түгел. Дистанцион эш тураһында закон проектында өйҙә эшләүселәр өсөн эш ваҡыты һәм ял нормалары ҡарала.*



*ТУРАҺЫН ӘЙТКӘНДӘ...*

**Һуңғы осор Рәсәй Дәүләт Думаһында бер килке йәнләнеү, уяныу билдәләре барлыҡҡа килгәндәй. Дөрөҫ, ҡыбырлай башлауҙарҙың үҙ сәбәптәре булыуы ла ихтимал. Думаға сираттағы һайлауҙар яҡынлашыуы, мәҫәлән. Шуға ла фракцияларҙың халыҡ алдында күренеп ҡалыу теләге аңлашыла. Ошоға тиклем ҡайһы партияның ниндәй проекттар һәм тәҡдимдәр менән сығыш яһауына туҡталып тормайыҡ инде, бының менән уларҙың пиар акцияларына мәрәй өҫтәмәйек. Ни тиһәң дә, бында күберәк коронавирус һабаҡтары үҙен белдерәлер. Бер ямандың бер яҡшыһы тигәндәй, күп кенә һабаҡтар күндерҙе был сир тормош ағышына. Айырыуса ошо ябай халыҡ тормошонан шыпа алыҫлаша төшкән элиталы чиновник ҡатламдары ла хатта "түбәндәге"ләргә яҡыная, улар хәленә инә барғандай тойола башланы. Закондарға һәм кодекстарға йышайып киткән төҙәтеүҙәр ҙә, асылда, ана шул яңы шарттарҙы, йәғни коронавирус эҙемтәләренән сығып яһалған һығымталарҙы кәүҙәләндерә бит.**

# ӨЙҘӘ ЭШЛӘҮГӘ КҮСЕП,

## йәнле аралашыуҙан яҙайыҡмы?



Мәҫәлән, "Берҙәм Рәсәй" фирҡәһе депутаттары һәм сенаторҙары Дәүләт Думаһына сираттағы шундай төҙәтеүҙәрҙең береһен РФ Хеҙмәт кодексына индерергә тәҡдим итте, ул дистанцион һәм өйҙән эшләү нормаларын көйләү мәсьәләһен күтәрә. Мәғлүм булыуынса, бындай эш төрөнөң коронавирус арҡаһында үҙкурсаланыу маҡсатында аралыҡтан һәм өйҙә ултырып эшләү тәжрибәһе икәнен күптәребеҙ ғәмәлдә үҙ иңендә татып белде һәм мәшғүллектең был ысулы отошлораҡ тип иҫәпләүселәр ҙә барлыҡҡа килде. Беренсенән, эшкә барып-ҡайтыуҙың ҙур ҡалаларҙа йәшәүселәр өсөн бик күп ваҡытты алыуы бер кемгә лә сер түгел. Ҡала урамдарындағы ҙур-ҙур тығындар һәм эшкә алыҫлыҡ арҡаһында йәмәғәт транспортында ла, шәхси автомобилдә лә әллә күпме ваҡыт сарыф ителә бит. Ҡайһы бер мегаполистарҙа тығындар хатта саҡрымдарға һуҙыла. Икенсенән, юл сығымдары. Мәҫәлән, йәмәғәт транспортында иртәле-кисле 25-30-ар һумдан, өҫтәүенә бер автобустан икенсеһенә күсеп ултырыу, такси хеҙмәте менән файҙаланыу, эштә туҡланыу өсөн тотонолған айлыҡ сығымдарҙы ла иҫәпләһәң, 10 меңдән ашып китеүе лә бар. Был кем өсөндөр ҙур аҡса ла түгелдер, бәлки, ләкин ябай хеҙмәт кешеһенең хәләл көсөн түгеп тапҡан 100 тәңкәһе лә - аҡса. Дистанцион эш өлкәһендә ҡуҙаллана башлаған статистика мәғлүмәттәре лә ошо эш төрө файҙаһына һөйләй. Мәҫәлән, һорау алыуҙар үткәрелгән бер компания хеҙмәткәрҙәренең 70 проценты өйҙә эшләргә теләүе хаҡында белдерә. Ә инде был өлкәлә аҙмы-күпме эш тәжрибәһе булған респонденттар өйҙә эшләүҙең шундай өҫтөнлөгөн күрһәтә: иң тәүҙә эш ваҡытын үҙеңә уңайлы булғансы бүлеү (70 процент). Был, күрәһең, иртәнге 9-ҙан кискә 6-ға тиклем тигән сикләүҙән (йәғни "от и до" сигенән) азат булып, үҙеңә ҡасан уңайлы (таң менән тороп, төндә, кис һ.б.) - шул ваҡытта ултырып эшләй алыу мөмкинлеген күҙҙә тота. Ә һөҙөмтә барыбер буласаҡ, сөнки хеҙмәткәр бының өсөн яуаплылыҡ ала һәм унан эш көтәләр икәнен аңлай. Ысынлап та, "от и до" ситлегендә эшләүҙең күптәр өсөн яфаланыу икәне ҡайһы саҡ аңлап та етелмәй, күрәһең, шуға күрә лә эш ваҡыты көсөргәнешенән нисек кенә арынырға тырышмай хеҙмәткәрҙәр: эштән бүленеп кофе, сәй эсеүҙәр, тәмәке көйрәтеүҙәр, интернетта ултырыу йә телефондан шәхси аралашыу, дауахана йә магазинға сығып килеү, һ.б.

Өйҙә эшләү тәжрибәһе булған бер төркөмдән һорау алыуҙар күрһәтеүенсә, улар теләһә ниндәй ҡала йәки хатта башҡа илдән тороп эшләү мөмкинлеген ҙур өҫтөнлөк иҫәпләй. Ундайҙар 50 процент булһа, 48 процент кеше юлға сарыф ителгән ваҡыт һәм аҡса экономиялауҙы хуплай. Ҡайһы бер өлгөрҙәр иһә - улар 30 проценттан ашыу - бер юлы бер нисә урында эшләү мөмкинлеген күрә. Аулаҡлап эшләүгә форсат 22 процент хеҙмәткәрҙе ҡыуандырһа, 6-8 процент кеше дресс-код кәрәк булмауына һәм эште уҡыу менән бергә алып барыу мөмкинлегенә һөйөнә. Әлбиттә, дистанцион эш формаһының хеҙмәткәрҙәр өсөн генә түгел, эш биреүсе өсөн дә уңайлы яҡтары бар. Мәҫәлән, ҙур офис бинаһын ҡуртымға алыу кәрәклегенән ҡотолоу, хеҙмәткәрҙәргә төрлә төбәк һәм райондарҙан йөләп итә алыу мөмкинлеге, өйҙә эшләүселәргә социаль пакет ( юл хаҡын, медицина страховкаһын түләү, корпоративтар һ.б. өсөн түләүҙәр) пунктының төшөп ҡалыуы компанияға байтаҡ аҡсаны янда ҡалдырырға ярҙам итәсәк...

Ә шулай ҙа, һәр бер яның ыҡ кеүек үк, был эш рәүешенең дә етешһеҙлектәре бар. Шуларҙың иң тәүгеһе - кешенең йәнле аралашыуҙан мәхрүм булыуы, хеҙмәттәштәренән айырылып, коллектив тормоштан "төшөп" ҡалыуы. Әлбиттә, бөгөн элекке кеүек берҙәм, бер-береһенә иғтибарлы, ярҙамсыл коллектив тураһында һүҙ алып барыуы ауыр, был айырыуса совет осоро йылдарында эш тәжрибәһе булғандарға бик асыҡ күренә. Шулай ҙа бергә эшләгән хеҙмәттәштәрҙе уртаҡ маҡсат, ынтылыштар, яҡшы һөҙөмтә өсөн дөйөм тырышлыҡ, үҙ-ара сәм, көнәркәшлек тойғолары, һис шикһеҙ, берләштереп тора барыбер. Йәш хеҙмәткәрҙәр өйҙә эшләүҙе аралашыуҙан мәхрүм булыу тип тә ҡабул итмәүе бар, сөнки улар былай ҙа көнө-төнө гаджеттары, смартфондары донъяһына сумып, виртуаль аралашыуҙы үҙ итте бит инде күптән.

Әшулай ҙа коллектив - бөгөнгө көндә лә үҙенең тәрбиәүи әһәмиәтен юғалтмай һәм юғалтмаясаҡ мөһим фактор ул. Өйҙә ултырыуҙан баҫылып, үҙеңде донъянан артта ҡалғандай хис итеп, аралашыу нескәлектәрен юғалтып, "мүкләнеп" китеүең дә бар, әлбиттә. Йәнле аралашып, күҙмә-күҙ ҡарашып аңлашып эшләүгә етәме! Бына һинә өйҙә ултырып эшләү... Тәүҙә генә шулай сей елкегә тейер эш тәртиптәренән, сикләүҙәр һәм даими рәүештә йөндә иҙгән контроль аҫтында булыуҙан азатлыҡ тойғоһо тантана итһә лә, аҙаҡҡа табан яҡшымы-яманмы - коллективына тартылыу, эш урыныңды юҡһыныу барлыҡҡа килә башлағандай. Унан һуң бит эш барышында килеп тыуған теге йәки был мәсьәлә, аңлашылмаған һорауҙар буйынса етәксең, хеҙмәттәштәрең менән кәңәшләшеп алыу, эш һөҙөмтәләрең буйынса уларҙың фекерен ишетеү, етәксе күрһәтмәләренә ярашлы эшеңә төҙәтмәләр индереү, етешһеҙлектәрен ваҡытында күреп алыу мөмкинлегенән яҙыу - ҡыҫҡаһы, коллективлыҡ тойғоһон юғалтыу, унан алыҫлашыу кеүек факторҙы өйҙә эшләүҙең минусы итеп күрһәтеүселәр 52 процент тәшкил итә. Тейешле контролдең булмауы сәбәпле, хеҙмәт дисциплинаһының боҙолоуы 49 процент респондентты борсой. Бер яҡтан, бында бәхәс тыуҙырған моменттар ҙа юҡ түгел. Мәҫәлән, әгәр өйҙә ултырып эшләүсе үҙ бурысы, эш урыны өсөн борсола, уны юғалтыу мөмкинлегенән хәүефләнә икән, йә булмаһа, ул үҙ тәртибе өсөн яуап тота белерҙәй намыҫлы, эшсән кеше икән, ул күрәләтә үҙ-үҙен батырырға тырышмаҫ та һуң? Бында иң мөһиме - һөҙөмтә. Ҡасан, нисек, ҡайҙа эшләйһең - уныһы икенсел, ә иң тәүҙә эш һөҙөмтәһенең сифатлы булыуы, ваҡытында башҡарылыуы.

Өйҙә эшләү, тигәндән, ул хеҙмәткәр ниндәйҙер үҙ иреклек, ни теләй, шуның менән көн үткәреүгә форсат тыуыу тигән һүҙ түгел. Дистанцион эш тураһында закон проектында өйҙә эшләүселәр өсөн эш ваҡыты һәм ял нормалары ҡарала. Был эш рәүеше әлегә өс төргә бүленә: даими дистанцион эш - эш биреүсе менән эшсе йә хеҙмәткәр араһында хеҙмәт килешеүе нигеҙендә; ваҡытлы дистанцион эш - килеп тыуған ниндәйҙер хәл-ваҡиға (әлеге пандемия, тәбиғи йә техноген фажиғә, производство һәләкәте һ.б.) арҡаһында өйҙә эшләүгә күсеү; ҡатнаш эш төрө - эшсе йә хеҙмәткәргә өйҙә лә, эш тәртибе менән бәйле хеҙмәт урынына ла килеп эшләү мөмкинлеге.

Шул уңайҙан күптәрҙең дистанцион эште фрилансер менән бутауын әйтеп китергә кәрәктер. Әгәр даими эш биреүсең булмаһа, был эш төрөн үҙ итеүсе ирекле хеҙмәткәр, йәғни ул фрилансер тип атала һәм бындай төшөнсә закон нигеҙендә юҡ. Хеҙмәт кодексына төҙәтеүҙәрҙә шуныһы ла айырымасыҡ әйтелә: хеҙмәткәр йә эшсе дистанцион эшкә уның ризалығы менән генә ебәрелергә мөмкин. Ғәмәлдән күренеүенсә, элек был эш рәүеше менән һирәгерәк шөғөлләнгән булһалар ҙа, коронавирус башланғас, уға йәмғиәттә ҡараш үҙгәрҙе: миллионлаған кеше дистанцион эшкә күсте һәм эшен һин дә мин дауам итә алды. Уның киләсәгенә бынан алдараҡ та өмөт бағлай ине хөкүмәт: "Берҙәм Рәсәй " етәксеһе буларaҡ та элекке премьер Д.Медведев заман технологиялары үҫешен иҫәпкә алып, мәшғүллек өлкәһенә яңыса ҡараш булдырыу идеяһын ҡуҙғата биреп киткәйне. Һөҙөмтәлә РФ Хеҙмәт кодексына төҙәтеүҙәр проекты эшләнде. Уны әҙерләүҙә Дәүләт Думаһы рәйесе В.Володин, депутаттар С.Неверов, А.Исаев, М.Тарасенко, федерация Советы етәксеһе В.Матвиенко һәм бер нисә сенатор ҡатнашты. Рәсәй Сәнәғәтселәр һәм эшҡыуарҙар берлеге бындай эш алымын прогрессив аҙым тип атаны. Уныһын киләсәк күрһәтер, бары тик был рәүешкә күсеү сәбәптәре генә әлеге ҡырғын йә һәләкәт була күрмәһен. Эш кешеһе өсөн уңайлы шарттар булдырыу, ҙур ҡалаларҙа эшкә йөрөү ауырлыҡтарынан арыныу кеүек мәсьәләләр генә төп маҡсат булып ҡалһын ине. Тағы ла: аралыҡта эшләүгә күсеү кешеләрҙе ҡайтанан өйҙәренә ултыртып, араларҙы алыҫайтмаһын, бөгәрҙәрҙе тутландырып, күңелдәрҙе һыуындырмаһын берүк - аралашыу әмәлдәренән яҙмайыҡ, йәмәғәт.

**Фәүзиә ИҘЕЛБАЕВА.**

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓31 июлдә Ҡорбан байрамы уңайынан Башҡортостанда йәшәүселәргә өҫтәмә ял көнө көтә. Быйыл Ҡорбан байрамы йомаға тура килә. Шуға өс көн рәттән - 31 июлдә, 1 һәм 2 августа ял итергә мөмкин. 30 июлдә эш көнө бер сәғәткә ҡыҫҡара. Башҡортостанда эшләмәгән байрам көндәре Рәсәйгә ҡарағанда күберәк. Рәсәй Федерацияһында билдәләнгән байрамдарға өҫтәп Башҡортостанда тағы өс байрам көнө бар: 11 октябрҙә билдәләнгән Республика көнө, шулай уҡ Ураҙа һәм Ҡорбан байрамдары эшләмәгән көндәр булып иҫәпләнә.

✓Башҡортостан аграрийҙары мал аҙығы әҙерләүҙе тамамлай. Республиканың Ауыл хужалығы министрлығы мәғлүмәттәре буйынса, 7 июлгә 367 мең гектар күп йыллыҡ үлән сабылған, был бөтә майҙандарҙың 82 проценты. Сабыуҙа Хәйбулла, Дүртөйлә, Ҡыйғы, Борай райондары аграрийҙары алдынғылыҡты бирмәй, унда 10-16 мең гектарҙан ашыу күп йыллыҡ үлән сабылған. Мал аҙығы әҙерләү ҙә әүҙем бара. Бөгөнгә республикала 472 мең тонна бесән һәм 858 мең тонна сенаж әҙерләнгән.

✓2020 йылдың 17 июлендә Рәсәй Федерацияһында "Берҙәм фольклор көнө" акцияһы ойоштоpола. Артабан уны йыл һайын уҙғарыу планлаштырыла. Башҡортостандың Республика халыҡ ижады үҙәге акцияға ҡушылырға һәм социаль селтәрҙәргә, рәсми сайттарға #УфаРЦНТ РБ; #МКРБ; #ДеньФольклораРБ2020 хештегы менән тематик фотолар, видеоматериалдар, ҡотлауҙар һалырға саҡыра.

✓Рәсәй Гидрометүҙәге белгестәре көндәрҙең эҫе тороуына бәйле ҡайһы бер төбәктәрҙә юғары янғын хәүефе тураһында иҫкәртә. Әйтәйек, Һамар, Ырымбур өлкәләрендә, Башҡортостанда юғары, урыны менән ғәҙәттән тыш янғын хәүефе фаразлана, тиелә Гидрометүҙәк мәғлүмәтендә. Республика метеохеҙмәте белдереүенсә, алдағы көндәрҙә Башҡортостанда һауа температураһының +33 градусҡа тиклем күтәрелеүе көтөлә. Урыны менән йәшенле ҡыҫҡа ваҡытлы ямғыр яуыуы ихтимал, ел талғын, йәшен ваҡытында ҡиҫкен.

✓Ҡарасай-Черкес Республикаһы башлығы Рәшит Темрезовтың Рәсәйҙең һаулыҡ һаҡлау министрына мөрәжәғәте буйынса Башҡортостандан үҙ эшенең оҫтаһы булған 17 табип Ҡарасай-Черкес Республикаһына ебәрелгәйне. Беҙҙең табиптар өс аҙна буйына коллегаларына коронавирус инфекциялы пациенттарҙы дауалауҙа ярҙам күрһәтте. Руслан Ғүмәров, Салауат Өмөтбаев, Евгений Кустов, Константин Золотухин Ҡарасай-Черкес Республикаһы башлығы ҡулынан юғары дәүләт наградалары алды.

ҠЫҪҠАСА

# ТӨРКИӘ ВӘКИЛЛЕГЕ...

✓ **Төрөк Республикаһында Башҡортостан вәкиллеген рәсми асыу тантанаһы авгусҡа билдәләнгән, тип хәбәр иттеләр Хөкүмәттәге оператив кәңәшмәлә.** Ошо ваҡытҡа тиклем "сикте асыу менән эшләй башларға мөмкин булһын өсөн" Төркиәлә вәкиллек асыуға бәйле "бөтә ҡағыҙ эштәрен тамамларға кәрәк", тип белдерҙе Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров. Уның билдәләүенсә, төрөк бизнесмендары Башҡортостан менән бик ҡыҙыҡһына. Төркиәлә Башҡортостан вәкиллеген асыу ике республика араһында ныҡлы иҡтисади бәйләнештәр яйға һалыуға булышлыҡ итергә тейеш. Бынан тыш, Радий Хәбиров Башҡортостан Республикаһының Тышҡы иҡтисади бәйләнештәр буйынса дәүләт комитетына Башҡортостандың Австрияла асылған рәсми вәкиллеге эшен тикшерергә ҡушты.

✓ **Өфөнөң тарихи үҙәгендә һәм йәйәүлеләр зоналарында Өфө ҡунаҡтарына театрҙарға, музейҙарға, парктарға һәм башҡа иҫтәлекле урындарға уңайлы маршрут табырға ярҙам иткән заманса күрһәткестәр ҡуя башланылар.** Күрһәткестәрҙең береһе Коммунистик урамында барлыҡҡа килгән: бағанала Ҡунаҡһарай, Х.Әхмәтов исемендәге Башҡорт дәүләт филармонияһы, Археология һәм этнография музейы яғына йүнәлештәр менән табличкалар урынлаштырылған. Уларҙа объектҡа тиклем ара ла күрһәтелгән. Өфө хакимиәте башлығы урынбаҫары Николай Фадеев һүҙҙәренсә, Өфөлә туристик навигация үҫешә, ә уның киләсәге Туризм буйынса дәүләт комитеты рәйесе Салауат Нафиҡов менән тикшерелде.

✓ **Башҡортостан Республикаһының Ғаилә, хеҙмәт һәм халыҡты социаль яҡлау министрлығы "Мәктәпкә йыйынырға ярҙам ит" шәфҡәтлелек акцияһының башланыуы тураһында иғлан итте.** Йолаға әүерелгән изгелек акцияһы 1 июлдән 31 авгусҡа тиклем дауам итә. Маҡсаты - ауыр тормош хәлендә ҡалған ғаиләләргә балаларҙы яңы уҡыу йылына әҙерләүҙә ярҙам күрһәтеү. Мәктәп кәрәк-яраҡтары "Ғаилә" район-ара үҙәктәрендә һәм уларҙың ҡала-райондарҙағы бүлексәләрендә ойошторола. Канцелярия тауарҙары, яҙыу-һүрәт төшөрөү кәрәк-яраҡтары, дәфтәрҙәр, балалар ижады өсөн йыйылмалар хәйриә акцияһында ҡатнашыусыларҙан яңы килеш кенә ҡабул ителә. Портфелдәр, мәктәп формаһы, дәреслектәр, нәфис әҙәбиәт - яңы йәки һәйбәт торошта. Ярҙам Хеҙмәт министрлығы ҡарамағындағы халыҡҡа социаль ярҙам күрһәтеү учреждениеларында иҫәптә торған ғаиләләргә йүнәлтелә. Министрлыҡта белдереүҙәренсә, былтыр акция барышында аҙ тәьмин ителгән, ишле, тулы һәм һаулыҡ мөмкинлектәре сикле бала тәрбиәләгән ғаиләләргә яҡынса 10 миллион һумлыҡ ярҙам күрһәтелгән.

✓ **Өфөлә социаль такси эшләй башланы, тип хәбәр иттеләр республика Хеҙмәт министрлығынан.** Беренсе төркөм инвалидтары, һаулыҡ мөмкинлектәре сикле балалар һәм уларҙы оҙатып йөрөүселәр айына биш тапҡыр "Deafмобиль" социаль такси хеҙмәте менән файҙаланыу хоҡуғына эйә. "Deafмобиль" водителдәре көн һайын иртәнге 7-нән киске 10-ға тиклем йөрөй. Ултырғанда пассажирға инвалидлыҡ тураһында белешмә һәм шәхесте раҫлаған документ күрһәтергә кәрәк", - тип өҫтәнеләр ведомствоның матбуғат хеҙмәтендә. Такси хеҙмәтләндереүенә ғаризалар дүшәмбенән йомаға хәтлем иртәнге 9-ҙан киске 6-ға тиклем 8 (347) 284-55-22 һәм 8-963-894-14-31 телефондары буйынса ҡабул ителә. Һуңғы мәғлүмәттәр буйынса, Өфөлә 9 меңдән ашыу беренсе төркөм инвалиды һәм инвалид бала йәшәй. Социаль проект һаулыҡ мөмкинлектәре сикле кешеләргә социаль объекттарға транспорт менән барыу мөмкинлеген арттырыуға йүнәлтелгән.

ТӨРЛӨҺӨНӘН

# СИР КИТМӘГӘН ӘЛЕ

**Башҡортостан Республикаһы Башлығы Хакимиәтендә һәм республика Хөкүмәтендә коронавирус менән сирләүселәр байтаҡ. Был хаҡта Башҡортостан Республикаһы Башлығы Радий Хәбиров белдерҙе.**

"Коллегалар, муниципалитет башлыҡтары, уянығыҙ, зинһар. Буш ваҡытығыҙҙа донъя яңылыҡтарын уҡығыҙ - Ҡаҙағстан ике аҙналыҡ карантинға ябылды. Израилдә барлыҡ сикләү саралары тулыһынса әйләнеп ҡайта. АҠШ-та көн һайын бер нисә тиҫтә мең кеше сир йоҡтора. Бөтә ерҙә лә хәл бик көсөргәнешле. Шуға күрә беҙгә ауырыуҙар арта тип иларға тура килмәһен, тимәк, беҙ ҡайҙалыр эшләп еткермәйбеҙ", - тине Башҡортостан Республикаһы Башлығы.

Радий Хәбиров республикала коронавирусҡа бәйле хәлде анализларға ҡушты. "Беҙ эре предприятиеларыбыҙҙа ҙур булмаған сир сығанаҡтары барлыҡҡа килеүен теркәй башланыҡ. Улар бының менән әүҙем шөғөлләнә. Бөтәһе лә өйрәнде шикелле - осраҡтар булһа, шунда уҡ ябабыҙ. Коллегалар, Айҙа йәшәмәйһегеҙ бит, былар барыһы ла беҙҙең тирәлә йөрөй. Башҡортостан Республикаһы Башлығы Хакимиәтендә, бында, Хөкүмәттә, сирләр күп кенә. Аңлағыҙ, сир беҙҙең янда йөрөй, бер-беребеҙҙе һаҡларға кәрәк", - тип хәбәр итте республика Башлығы. Башҡортостанда битлек режимы, социаль дистанция һәм өлкән йәштәгеләр өсөн "комендант" сәғәте ғәмәлдә.

Башҡортостанда әлегә мәктәп һәм балалар лагерҙарын, шулай уҡ балалар баҡсаларын асырға нигеҙ юҡ. Бөгөн республика хөкүмәтендәге оператив кәңәшмәлә Радий Хәбиров ошо хаҡта белдерҙе. "Бына 23-сө көн хәл тоторҡло, ләкин артабан яҡшы яҡҡа үҙгәрмәй. Был һандар хәлде тотороҡландырыуыбыҙ тураһында һөйләй, әммә беҙҙең эшмәкәрлек сирлеләр һанын кәметеүгә килтермәй. Хәл бик шәптән түгел, - тип билдәләне Радий Хәбиров. - Шуға беҙ мәктәп һәм балалар лагерҙарын асыу хаҡында ҡарар ҡабул итмәйбеҙ. Был балалар баҡсаһына ла ҡағыла. Киләһе датаны 15 июлгә билдәләйбеҙ, әлегә күҙәтеп барабыҙ". Республика Башлығы бөтә ерҙә лә битлек режимын үтәргә саҡырҙы.

# ҒАФУРИҘА-ОҪТАХАНА



**Ғафури районының Уҡлыҡая итәгендә тиҙҙән "Башҡортостан йөрәге" халыҡ кәсептәре оҫтаханаһы барлыҡҡа киләсәк. Майҙанда ҡурай сәскәһе тажы рәүешендә һигеҙ тирмә ҡорола. Йыл һайын бында халыҡ-ара, Бөтә Рәсәй, республика һәм район фестивалдәре ойошторола. Тирмәләрҙә милли биҙәүестәр, халыҡ уйын ҡоралдары, башҡорт аш-һыуын әҙерләү буйынса оҫтаханалар асыла. Муниципалитет йәнә бер нисә проект өсөн грант ярҙамына ғаризалар әҙерләй, тип һөйләне Ғафури районы башлығы Фәнзил Сыңғыҙов районға эш сәфәре менән килгән Башҡортостан етәксеһе Радий Хәбировҡа.**

Сәйетбаба ауылында Радий Хәбиров Башҡортостан Республикаһының Халыҡтар дуҫлығы йорто филиалы - урындағы тарихи-мәҙәни үҙәктең эшмәкәрлеге менән танышты. Ул башҡорт халҡының рухи мираҫын һаҡлауға һәм үҫтереүгә, тарихты өйрәнеүгә - боронғо ғөрөф-ғәҙәттәрҙе, йолаларҙы, фольклорҙы, традицион кәсептәрҙе һәм һөнәрҙәрҙе тергеҙеүгә йүнәлтелгән. "Сәйетбаба" тарихи-мәҙәни үҙәк ҡарамағында "Асанай" халыҡ фольклор ансамбле, балалар һәм өлкәндәр өсөн бейеү төркөмдәре, "Аҡбейек" драма театры, ағинәйҙәр клубы уңышлы эшләп килә. Балаҫ һуғыу, бәйләү һәм кейеҙ баҫыу, ағасты һырлап әйберҙәр яһау, ҡурай, думбыра, ҡумыҙ эшләү түңәрәктәренә халыҡ күпләп йөрөй.

Урындағы халыҡ менән аралашыу барышында Башҡортостан Башлығынан ауылда инженерлыҡ селтәрҙәрен төҙөү эштәренә булышлыҡ итеүен һоранылар. "Беҙ мотлаҡ ярҙам күрһәтербеҙ. Бөгөн муниципалитет башлығы менән газ, һыу тәьминәте мәсьәләләрен тикшербеҙ һәм тейешле ҡарарҙар ҡабул итербеҙ", - тине Радий Хәбиров. Республика етәксеһе бында 3454 кешене хеҙмәтләндергән ауыл табип амбулаторияһын ҡарап сыҡты. Амбулатория ҡарамағында Ҡолҡан, Ҡаранйылға, Усман, Йөҙимән, Иҫке Тайыш, Имәндәш, Юрмаш һәм Ҡарағай ауылдарында һигеҙ фельдшер-акушерлыҡ пункттары эшләй. Республика Башлығы ҡоламалдар, дарыуҙар менән ҡыҙыҡһынды. Табиптар һүҙҙәренсә, учреждениела барыһы ла етерлек, ләкин бинаға ремонт талап ителә. Радий Хәбиров 2021 йылда объектҡа комплекслы ремонт яһауҙы планлаштырырға ҡушты.

# ӨФӨ УҢАЙЛЫҠТАРЫ

**Республика Йортонда уҙған "Йәмәғәт киңлектәре һәм торлаҡ-коммуналь хужалыҡ сәғәте" онлайн-кәңәшмәһендә ҡала парктарын һәм Ағиҙел йылғаһының яр буйын төҙөкләндереү этаптары тикшерелде.**

Башҡортостан Республикаһы Башлығының матбуғат хеҙмәте мәғлүмәттәре буйынса, Ҡала мәҙәниәт һарайы алдында барған эштәр быйыл көҙ тамамлана, ә 1 августа Ағиҙел йылғаһының яр буйы ҡала халҡы һәм ҡунаҡтары өсөн тулыһынса асылырға тейеш. "Минә һәм өфөләрҙең күбеһенә яңыраҡ "Бейеүсе торналар" фонтаны янында асылған сквер бик оҡшаны, - тип билдәләне Радий Хәбиров. - Хәҙер унда тематик саралар ойошторорға һәм рәхсәтһеҙ урам сауҙаһын асыуға юл ҡуймаҫҡа кәрәк".

Быйыл Сипайлово биҫтәһендә "Кашҡаҙан" паркы эшләй башлай, ә 1 сентябрҙә күптән көтөлгән балалар баҡсаһы асыла. Радий Хәбиров 2021 йылға биҫтәлә яңы поликлиника төҙөлөшөн төп медицина звеноһын комплексы үҫтереүҙең республика программаһына индерергә ҡушты. Алдағы ике йылда Дим районында Үҙәк, Баланов парктарын, Инорста Йылыкүлде тәртипкә килтереү планлаштырыла. "Шулай уҡ ҡала властары менән берлектә ихаталарҙы һәм подъездарҙы төҙөкләндерергә, Яр буйы урамында транспорт хәрәкәте логистикаһы һәм парковкаларҙы уйларға кәрәк", - тине республика Башлығы. Һуңынан онлайн-кәңәшмәлә ҡатнашыусылар Өфөлә Октябрь Революцияһы урамын реконструкциялау варианттарын тикшерҙе.

## БАШ ҠАЛА ХӘБӘРҘӘРЕ

✓ Республикала йәшәүселәр 13 июлдән 31 октябргә тиклем хайуандарҙы һәм велосипедтарҙы электричкала 1 һумға йөрөтә ала. Әле йорт хайуанын үҙең менән йөрөтөү 15 һум тора. Башҡортостан ҡала яңы пассажирҙар компанияһы мәғлүмәте буйынса, компания транспорттың экологик төрөн туктатмау һәм дүрт аяҡлы дуҫтар тураһында хәстәрлек күреү өсөн ошондай акция иғлан иткән.

✓ Өфөнөң "Салауат Юлаев" хоккей клубы легионерҙары һәм тренерҙар штабының бер өлөшө миҙгел алды күнекмәһен уҙғарыу өсөн 8 июлдә Өфөгә килде. Башҡортостан коллективы, Магнитогорскиҙың "Металлург", Түбәнге Камаһың "Нефтехимик" һәм Екатеринбургтың "Автомобилист" командалары менән берләшеп, уҙҙаренең хеҙмәткәрҙәре өсөн Рәсәйгә трансфер ойошторҙо. Башҡортостандың баш ҡалаһына "Салауат"тың яңы легионеры Маркус Гранлунд килеүе тураһында ла хәбәр бар. Өфө хоккей клубының тәүге күнекмәһе 13 июлгә билдәләнгән.

✓ Өлөшсөләрҙең хоҡуҡтарын яҡлау фонды Өфө үҙәгендәге "Регионстройкомплекс" девелоперы тамамламаған ике йортто төҙөп бөтөрөү өсөн 668 миллион һум бүлде. Улар - М.Кәрим урамындағы литер 378-се һәм Дорофеев, Чернышевский, Минһажев, Коммунистик урамдары кварталындағы литер 3-сө йорттар. Өфөнөң 110 алданған өлөшсөһөнөң проблемаһы хәл ителергә тейеш. Өлөшләтә төҙөлөштән тамамланмаған объекттарын файҙаланыуға тапшырыу мәсьәләһе Республика Йортонда уҙған "Төҙөлөш сәғәте"ндә тикшерелде.

✓ Өфө трамвай-троллейбус заводында йылына 200 троллейбус эшләп сығарырға ниәтләйҙәр. Әлеге ваҡытта предприятие цехтары яңыртыла, ә завод конструкторҙары электр транспорты өсөн кузов моделдәрен әҙерләгән. Әле Өфө троллейбус заводының етештереү ҡеүәте йылына 100 троллейбус тәшкил итә. Предприятиеның продукцияһы Әлмәт, Иваново, Чебоксар, Новокузнецк һәм Дондағы Ростов ҡалаларына оҙатыла.

✓ Өфө хакимиәтендә яңы кадр тәғәйенләү тураһында белдерҙеләр. Опека һәм попечителлек идарахы етәксеһе вазифаһына Лариса Ольте тәҡдим ителде. Белгес ете йыл инде баш ҡала хакимиәтендә етем балаларҙы ғаиләләргә урынлаштырыу бүлеген етәкләй, тип хәбәр итте Өфөнөң вице-мэры Салауат Хөсәйенов. Бер аҙна элек Татьяна Квасникова опека һәм попечителлек идарахы етәксеһе вазифаһын ҡалдырҙы. Сәбәбе - Мәскәүгә күсеп китеү.

✓ *Өфө - илебеҙгә еңеү тәьмин иткән бик күп ҡалаларҙың береһе. Тәү сиратта ул - ҡаланың ҡаҙаныштарын таныу һәм оло быуынға ихтирам билдәһе. Ул ауыр йылдарҙа һәр кем Бөйөк тыуған илебеҙ һәм Бөйөк Еңеү хаҡына хеҙмәт итә.*



*УРА!*

# ГЕРОЙ ҠАЛАҒА...

## тиңләштек



**Баш ҡалабыҙ Өфөгә "Хеҙмәт ҡаһарманлығы ҡалаһы" тигән абруйлы халыҡ-ара исем бирелде. Дәүләт-ара герой-ҡалалар союзы президиумы шундай ҡарар ҡабул итте.**

"Хеҙмәт ҡаһарманлығы ҡалаһы" исеме үҙҙәренең хеҙмәт ҡаһарманлығы һәм ҡаҙаныштары менән фашизмды еңеүгә ҙур өлөш индергән ҡалаларға бирелә. Өфө - илебеҙгә еңеү тәьмин иткән бик күп ҡалаларҙың береһе. Тәү сиратта ул - ҡаланың ҡаҙаныштарын таныу һәм оло быуынға ихтирам билдәһе. Ул ауыр йылдарҙа һәр кем Бөйөк тыуған илебеҙ һәм Бөйөк Еңеү хаҡына хеҙмәт итә. Һуғыштың беренсе көндәренән үк Өфө лә хәрби тормошҡа көйләнә. Беҙҙең ҡалала эвакуацияланған сәнәғәт предпериятиелары урынлаша. Өфө фронт өсөн ҡоралдар, боеприпастар, кейем-һалым ебәрә, бында хәрби техника өсөн двигателдәр йыйыла, армия ихтыяжы өсөн автомобилдәр ремонтлана, беҙҙән фронтҡа билдәле "Салауат Юлаев", "Александр Невский", "Полководец Суворов", "Өфө" бронепоездары эшләп оҙатыла. Тап батырлыҡ, ныҡышмаллыҡ һәм ҡаһарманлыҡ Өфө халҡына һуғыштың барлыҡ ауырлыҡтарын еңеп сығырға ярҙам итә. Башҡортостандың баш ҡалаһының барлыҡ халҡы исеменән һәм шәхсән үҙемдең исемдән ветерандарға һәм тыл хеҙмәтсәндәренә тәрән һәм ихлас ихтирамымды белдерәм", - тип ҡотлау һүҙҙәрен еткерҙе Өфө ҡала хакимиәте башлығы Өлфәт Мостафин.

Был маҡтаулы исем 1941-1945 йылғы Бөйөк Ватан һуғышында Еңеүгә 75 йыл тулыуға арнап, Рәсәйҙең 20 ҡалаһына тапшырылды. Өфөнән тыш улар араһында Боровичи, Екатеринбург, Иваново, Ижевск, Иркутск, Ҡаҙан, Магнитогорск, Түбәнге Новгород, Түбәнге Тагил, Новокузнецк, Новосибирск, Омск, Пермь, Һамар, Һарытау, Томск, Ульяновск, Силәбе һәм Ярославль ҡалалары бар.

- Бөйөк Ватан һуғышында армияның ҡеүәтен арттырған ата-бабаларыбыҙға хөрмәт белдереү был. Шулай уҡ ҡалаң менән ғорурланыу тойғоһо ла. Мин һәр ваҡыт Башҡортостанда, Өфөлә йәшәүебеҙ менән ғорурланайыҡ, тигәнде алға һөрәм. Беҙҙең йәштәр ҡалабыҙ ил өсөн нимә эшләүен белергә тейеш, - тине республика Башлығы Радий Хәбиров һәм был ваҡиға айҡанлы оло шатлыҡ кисереүен белдерҙе. - Владимир Владимирович ошо ҡарарын иғлан иткәс тә Өлфәт Мансур улы менән был статусты хәтерҙә ҡалдырыу өсөн нимә эшләйәсәгебеҙ тураһында уйлай башланыҡ - матур объекттар төҙөлөргә, ҡала артабан үҫешергә тейеш. Был беҙҙең уртаҡ еңеү һәм мин тауыш биреүҙә ҡатнашҡан республика халҡына рәхмәтемде белдерәм.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Бөйөк Ватан һуғышы осоронда Өфөгә 36 предприятие күсерелә, 104 мендән ашыу кеше эвакуациялана. Һуғыш йылдарында баш ҡала хеҙмәтсәндәренең фиҙаҡәрлеге арҡаһында 51 мең авиация моторҙары етештерелә, бында тонналап яһалған бензин танкыларға яғыулыҡ итеп ебәрелә, 29 хәрби госпиталь асыла һәм уларҙа 150 мең яралы яугир дауалана. Бына ошо хаҡта киләсәк быуындар онотмаҫҡа һәм хаҡлы рәүештә ғорурланырға тейеш.**

*ҠАЛА ХАКИМИӘТЕНДӘ*

# ТӨҘӨЛӨШТӘР



**Коронавирус инфекцияһы таралыуы һаман да ҡатмарлы һәм хәүефле хәл булыуҙан туктамай. Ниндәйҙер тотороҡлолоҡ күҙәтелһә лә, бер ай инде һыҡай үҙгәрештәр һиҙелмәй. Республикала битлек режимы дауам итә, әммә күптәр хатта йәмәғәт урындарында ла битлек киймәй йөрөй. Шуға ла был тема Өфө ҡала округы хакимиәтенең сираттағы оператив кәңәшмәһендә тағы ла күтәрелде.**

Ә инде ағымдағы эштәргә килгәндә, уларҙың туҡтағаны юҡ. Мәҫәлән, урамдарҙа соҡорҙар ямала, юлдар ремонтлана, ҡышҡы йылытыу миҙгеленә әҙерлек бара, төҙөкләндереү эштәре дауам итә. "Өфө ҡалаһының йәмәғәт хәүефһеҙлеге" МКУ-һы директоры Александр Овчинников белдереүенсә, төҙөкләндереү өлкәһендәге хоҡуҡ боҙоуҙарҙы асыҡлау һәм уларҙы иҫкәртеү - ойошма эшмәкәрлеге йүнәлештәренең береһе. Ҡала территорияһында 18 майҙан алып ҡоҙоҡтар, люктар торошо даими тикшерелә. Ошо ваҡытта барлығы 9800 ҡоҙоҡ тикшерелгән, уларҙың 258-ендә ҡуйылған талаптарҙың боҙолоуы асыҡланған, хеҙмәтләндереүсе ойошмаларға етешһеҙлектәрҙе бөтөрөү саралары күрергә ҡушылған, 86 административ протокол төҙөлгән.

Башҡортостан Республикаһы Башлығы Радий Хәбиров алдағы биш йылда төбәктә 50 индустриаль, агросәнәғәт һәм технопарктар ойоштороу бурысын ҡуйғайны. Сираттағы оператив кәңәшмәлә Өфө ҡалаһында индустриаль һәм технопарктарҙы үҫтереү мәсьәләһе буйынса Сәнәғәт һәм эшҡыуарлыҡ бүлеге начальнигы Ришат Шәрәфиев сығыш яһаны. Билдәләнеүенсә, әлеге ваҡытта иң уңышлыһы булып "ПромЦентр" индустриаль паркы тора. Дим районы һәм Романовка ауылы араһындағы 46 гектар майҙан яңы "Башинком" заводын төҙөү өсөн һайланған. Шаҡшала элекке Өфө протезортопедия предприятиеһы территорияһында яңы технопарк булдырыу маҡсатынан геомембрана етештереү буйынса "Полимак" яуаплылығы сикләнгән йәмғиәт эш башлаған. Калинин районының Лихачев промзонаһында агросәнәғәт кластеры төҙөү күҙаллана. Яңы индустриаль парктар һәм технопарктар булдырыу буйынса ҡала хакимиәте ҡаланың сәнәғәт зоналары территориялары буйынса анализ эшләй һәм яңы буш майҙандар эҙләй. Барлыҡ мәғлүмәт invest.ufacity.info порталында ҡуйылып бара.

Оператив кәңәшмә һуңында Өфө ҡала округы хакимиәте башлығының беренсе урынбаҫары Салауат Хөсәйенов мөһим мәлдәргә: күп фатирлы йорттарҙың дөйөм милкен капиталь ремонтлау төбәк программаһын тормошҡа ашырыуға һәм ихата территорияларын комплекслы төҙөкләндереүгә лә иғтибар йүнәлтте. "Быйыл Өфөлә 665 күп фатирлы йортта 846 төр ремонт башҡарыу планлаштырылған. 7 июлгә ҡарата 14 йортта 21 төр ремонт тулыһынса тамамланған, 312 төр ремонт дауам итә", - тине ул.

**Зәйтүнә ӘЙЛЕ.**

*ӘЙТКӘНДӘЙ...*



# ТӘҠДИМЕМ БАР...

**Баш ҡалала үткән Беренсе Халыҡ-ара урбанистика форумы йомғаҡтары буйынса Өфө егете Эрик Королев үҙенең тәҡдимдәрен белдергән. Инициативаһын ул "Ҡурайҙың ете тажы - Өфөнө үҫтереүҙең ете тәҡдиме" тип атаған.**

Тәүге тәҡдим кикшерингҡа һәм велошерингҡа ҡағыла. "Халыҡ шәхси транспорттан самокаттарға һәм велосипедтарға күсеп ултырһын өсөн Өфөнө үҙгәртеп ҡора башлау кәрәк. Исмаһам, Боронғо үҙәктән булһа ла башларға, - ти ул. - Автомобиль юлдарын тарайтырға, Боронғо үҙәккә шәхси транспортты индереүҙе туҡтатырға. Киләсәктә иһә уны шәхси транспорт өсөн бөтөнләй ябырға һәм йәмәғәт транспорты хәрәкәтен генә ҡалдырырға". Октябрь Революцияһы урамындағы "Өфө Арбаты" урынына Эрик Королев Мостай Кәрим урамына тиклем арауыҡта йәйәүлеләр зонаһы эшләүҙе тәҡдим итә. "Хәҙер Боронғо үҙәк йөрәге - Арт-квадрат. Иң яҡшы йәйәүлеләр урамы Мостай Кәрим урамында - Каруанһарайҙан алып Арт-квадрат аша, Мостай Кәрим скверынан Уралсиб бинаһы һәм Якутов паркы аша буласаҡ", - ти ул. Уның өсөнсө тәҡдиме Телеүҙәктән алып Ағиҙел ярына тиклем канат юлы төҙөү. Дүртенсе тәҡдиме - Конгресс-холды ҡала халҡының әүҙемлеге өсөн асырға - унда кафелар, рестарандар, күргәҙмәләр, сувенирҙар һатыу ойоштороло рға тейеш. Бишенсе тәҡдим Өфөлә тарихи биналарҙы мөмкин тиклем һаҡлап ҡалыуға йүнәлтелә. Алтынсыһы - баш ҡаланың һәр районында скейт-парк асыу. Етенсеһе - йәмәғәт транспортын таҙалығы, тәртибе, персоналының бөхтәлеге һәм иғландар булмауы менән айырылып торған "Башавтотранс"ҡа тапшырырға.

"Бына минең фантастик тәҡдимдәрем. Бының ҡасан да булһа тормошҡа ашырына бик ышанмайым, әммә мин хыялланырға яратам. Шуға күрә был тәҡдимдәрҙе махсус рәүештә ойошмаларға һәм ҡала, республика, ил ҡанундарына тәҡдим итмәйем, сөнки мин ҡаланың ябай кешеһе, ә ҡанундарҙа баш ватыу - чиновниктар эше", - тип белдерә Өфө егете.

## Х А Л Ы Ҡ   Д А У А Һ Ы



**Был рубрикала баҫылған кәңәштәрҙе ҡулланыр алдынан мотлаҡ табип менән һөйләшергә, анығ диагноз ҡуйырға, үләндәргә аллергия юҡлығын тикшерергә кәрәклекте онотмағыҙ.**

### Бронхит

❖ Ҡурай еләге һабаҡтарын 3-4 см оҙонлоҡта итеп өҙөп, ике ус итеп эмалле һауытҡа һалырға. Өҫтөнә бер литр һыуыҡ һыу ҡойорға, ҡайнап сыҡҡас, 10-15 минут талғын утта торорға һәм 1 сәғәт төнәтергә. Ҡайнатманы 7-10 көн дауамында көнөнә 3 тапҡыр яртышар стаканлап бал ҡушып эсергә. Ҡаты йүтәлләгәндә ике аҙна шулай дауаланырға. Был ҡайнатма балаларға ла ярҙам итә, әммә миҡдары стакандың өстән бер өлөшөн тәшкил итергә тейеш.

### Топинамбур

❖ Топинамбурҙың 2 уртаса тамырын йыуып таҙартырға һәм ваҡлап турарға. Топинамбурҙы һауытҡа һалып, өҫтөнә 1 стакан ҡайнар һыу ҡойорға, талғын ғына утҡа ҡуйып 20 минут быҡтырырға, һөҙөргә. Уңайлыраҡ булһа, ҡайнаған һыу парына шулай уҡ 20 минут тотоп та әҙерләргә була дауаны. Был рәүешле әҙерләнгән топинамбур ҡайнатмаһы - бер тәүлеккә еткәндәй миҡдар, уны матдәләр алышыуын яйға һалыр өсөн әҙләп кенә уртлап эсергә. Ҡайнатманы ике көнгә бер әҙерләп эсергә кәрәк (тәүлек аша). Был дауа матдәләр алышыуын яйға һалыуҙан тыш, ябығырға ла ярҙам итә.

### Сәс ҡауағынан

❖ Һуғанды таҙартып, ит турағыс аша үткәрергә һәм һутын һығып алырға. Сәсте өлтөктәргә айырып, һуған һутын һөртергә. 25-30 минуттан һыу менән яҡшылап йыуып төшөрөргә. Был рәүешле аҙнаһына 1-2 тапҡыр дауаланырға.

❖ бал һәм һуған һутын 1:3 нисбәтендә ҡушырға һәм баш тиреһенә ыуырға, таҫтамал ябынырға һәм 40 минут тотҡас, башты йыуырға. Сәстәр ҡабарынҡы һәм ялтырап торһон өсөн сөгөлдөр бешерелгән һыу менән сайҡарға кәрәк.

❖ 10 төп редис япрағын йыуып ит турағыста ваҡларға. 1-әр балғалаҡ бал һәм көнбағыш майын ҡушып болғарға. Сәс төптәренә ыуырға, 35-40 минут тоторға. Шул арала йәйен кесерткәнгә ҡайнар һыу ҡойоп бешерергә һәм шуның менән баш йыуырға.

**Ғәлиә ШӘМСИЕВА әҙерләне.**

✓ *Льготалы кредитты 2020 йылдың 1 ноябренә тиклем алырға мөмкин. Уның күләме 500 мең һумдан өс миллион һумға тиклем. Яҡын арала максималь күләм 6 миллион һумға тиклем күтәреләсәк.*



*ЙОЛАҢДАН ЙӨН ТАП!*



# БАШҠОРТ НАҒЫШЫ

Шул уҡ осорҙа был территорияның биҙәү сәнғәтендә малсы төрки халыҡтарға хас комплекстан стилистик үҙенсәлектәре буйынса айырылып торған мәҙәни ҡатлам да урын ала. Был тәү сығанаҡта киндерҙән һуғылған туҡымаларҙы нағышлауға бәйле булған геометрик орнаментлы хисаплы ҡайыу. XIX быуатта һәм унан алдараҡ та был ҡайыу ярҙамында боронғо баш кейемдәре - таҫтар, һарауыстарҙы биҙәгәндәр, һауыт-һаба япыуҙары, тоҡсайҙар (зиннәтле сумкалар), туй йолаһын үтәгәндә кәрәкле сөлгөләр (таҫтамал) кеүек ҙур булмаған көнкүреш әйберҙәрен нағышлағандар.



*Боронғо хисаплы шыма ҡайыу үрнәге*

Ҡайыу алымдары бер нисә төрлө булған һәм улар "нағыш" тип йөрөтөлгән. Хисаплы шыма ҡайыу һәм ҡыя сәнсем төп алым булһа, уларҙы "биҙәк" һәм сатрашлап сигеү тулыландырған. XIX быуатта был биҙәү йөйҙәре күбеһенсә көнсығыш Урал арьяғында таралған (Троицк, Силәбе өйәҙҙәре). Хисаплы шыма нағыш һәм сатрашлап сигеү һирәкләп Башҡортостандың Урал арьяғы һәм таулы төбәктәрендә (Верхнеурал, Орск өйәҙҙәре) туй яңсыҡтары, көрәгә ябыуы, йыртыштарҙың ҡусҡарлы (тамбурлы) орнамент композицияларында ҡулланылған.

Көнсығыш башҡорттарында һарауыстар таҫтар менән бергә маңлай бәйләмесе итеп ҡулланылған. Уларҙы ҡыя сәнсем, "биҙәк" ярҙамында, ә ҡаймаһын сатрашлап ҡайығандар.



*Хисаплы шыма нағышлы таҫтамал (Силәбе өлкәһе). ВЭМ. XX б. башы.*

**Светлана ШИТОВА.**

**"Халыҡ сәнғәте: көньяҡ башҡорттарында кейеҙ, балаҫ һәм туҡымалар. Этнографик очерктар" китабынан.**

*БЕЛМӘҺӘҢ - БЕЛ!*

# ФАТИРЛЫ БУЛҒЫҢ КИЛӘМЕ?

**"Башинформ" мәғлүмәт агентлығы фатир йәки шәхси йорт алырға теләүселәр өсөн кәрәкле барлыҡ мәғлүмәттәрҙе, Башҡортостанда льготалы ипотека, төрлө компенсациялар алыу шарттарын бер урынға туплап, файҙалы белешмә эшләне. Был программалар үҙ-ара бәйләнгән, мәҫәлән, тәүге иғәнә өсөн "Жилстройсбережения" аша 216 мең, 3 процентлы ауыл ипотекаһы, ә инде ғаиләлә өсөнсө бала тыуғанда кредитты ҡаплау өсөн 450 мең һум алыу мөмкинлегегеҙ бар.**



## "Коронавирусҡа ҡаршы ипотека" - йылына 6,5 процент

**Кемдәргә тейеш:** Барлыҡ теләүселәргә лә. Ҡарар банк кимәлендә ҡабул ителә - ул килемде, кредит тарихын ҡарай. Әгәр бер банк баш тартһа, икенсе банкка ғариза бирергә мөмкин.

**Шарттары:** Льготалы кредитты 2020 йылдың 1 ноябренә тиклем алырға мөмкин. Уның күләме 500 мең һумдан өс миллион һумға тиклем. Яҡын арала РФ Президенты В. Путиндың ҡарары менән максималь күләм 6 миллион һумға тиклем күтәреләсәк. Кредит ваҡыты сикләнмәгән. Фатирҙы йәки йортто төҙөүсенән төҙөлөштә өлөшсө булараҡ ҡатнашыу йәки әҙер объекттан килешеү буйынса һатып алырға мөмкин. Был программа буйынса алынған ипотека кредиты рефинансланмай. Күп осраҡта өҫтәмә рәүештә үҙенде һәм милегенде страховкаларға кәрәк була, шунһыҙ банк кредит страховкаһын 1 процентҡа күтәрергә мөмкин. Тәүге иғәнә - фатир хаҡының минимум 20 проценты. Һаҡлыҡ банкында (Сбербанк) һәм ВТБ-ла - 15 проценттан башлана.

**Ҡайҙа мөрәжәғәт итергә:** Программа барлыҡ ҙур банктарҙа - Сбербанк, Дом.РФ, ВТБ, "Альфа-банк", "Промсвязь-банк" - эшләй.

**Нимә белеү мөһим:** Күп банктар, мәҫәлән, Сбербанк һәм Дом.РФ, ставканы 6,1 процентҡаса төшөрөргә ҡарар иткән.

## Йылына 0,1-3 процентлы "Ауыл" ипотекаһы

**Кемгә бирелә:** Ғаилә хәленә, теркәлеү урынына һәм социаль статусҡа талаптар юҡ. Программала барлыҡ теләүселәр ҡатнаша ала, иң мөһиме - банктың шарттарына һәм талаптарына тап килһәңдәр (йәше, килеме, кредит тарихы).

**Шарттары:** Торлаҡты ауыл ерендә һатып алырға тейешһегеҙ. Ул йыл йорт та, шулай уҡ иҫке йорт та булыуы мөмкин. Хатта үҙенә төҙөргә лә була. Әммә һатыу-һатып алыу йәки өлөшсө булараҡ ҡатнашыу килешеүе буйынса. Кредиттың максималь күләме - 3 миллион һум, килешеү мөҙҙәте - 25 йыл. Әсәлек капиталын да файҙаланырға мөмкин. Торлаҡ даими йәшәрлек булырға, ут, һыу, канализация үткән, газ тоташтырылған булырға, ә майҙаны социаль нормана кәм булмаҫҡа тейеш (яңғыҙаҡтарға - 33 квадрат метр, ике кешелек ғаиләгә - 42 квадрат метр, өс һәм унан күберәк кеше булғанда - һәр кешегә 18 квадрат метр).

**Ҡайҙа мөрәжәғәт итергә:** Ошо көндәрҙә РФ Ауыл хужалығы министрлығы ҡатнашыусылар исемлеген киңәйтте һәм хәҙер программала туғыҙ банк ҡатнаша, Башҡортостанда уларҙың дүртеһе: Сбербанк, "Россельхозбанк", Дом.РФ, "Ак Барс" эшләй.

**Нимә белергә кәрәк:** Ваҡытығыҙҙы әрәм итеп, участка һытып алдығыҙ, ә осһоҙло йорт өсөн кредит бирмәйҙәр икән, алдан уҡ ерҙең банкка ҡараймы, юҡмы икәнен асыҡлағыҙ. Әгәр йорт төҙөргә кредит алһағыҙ, алдан уҡ участкағыҙ булырға тейеш. Әгәр участкалы йорт алаһығыҙ икән, төҙөлөш ике йылда тамамланырға, ә төҙөүсе менән рәсми килешеү төҙөлөргә тейеш.

## Йылына 6 процентлы "Ғаилә" ипотекаһы

**Кемгә бирелә:** 2018 йылдың 1 ғинуарынан 2022 йылдың 31 декабренә тиклем икенсе, өсөнсө йәки сираттағы, шулай уҡ инвалид бала тыуған ғаиләләр.

**Шарттары:** Программа бары тик төҙөүсе ойошманың яңы төҙөгән йортонан йәки әҙер йорттан торлаҡ һатып алыуға ғына ҡағыла. Кредиттың иң ҙур күләме - 6 миллион һум. Быға тиклем булған ипотека кредиттарын да рефинансларға мөмкин.

**Ҡайҙа мөрәжәғәт итергә:** Программала барлыҡ банктар ҙа тиерлек ҡатнаша. Бының өсөн офисҡа мөрәжәғәт итергә, ғариза яҙырға һәм талап ителгән документтар пакетын тапшырырға кәрәк.

**Нимә белеү мөһим:** Күп банктар балалы ғаиләләргә ипотека күләмен йылына 5 проценттан түбәнерәк билдәләне.

## Ипотеканы ҡаплауға 450 мең

**Кемдәргә бирелә:** 2019 йылдың 1 ғинуарынан 2022 йылдың 31 декабренә тиклем өсөнсө йәки сираттағы балаһы тыуған күп балалы ғаиләләргә.

**Шарттары:** Дәүләт ярҙамы бары тик бер кредитҡа ғына бирелә. Программа буйынса яңы төҙөлгән йорттан да, иҫке йорттарҙан да фатир, шулай уҡ участка йәки йорт алырға була. Был сумманан һалым түләргә кәрәкмәй.

**Ҡайҙа мөрәжәғәт итергә:** Ипотека алған банкка.

**Нимәне белергә кәрәк:** Әгәр бурысығыҙ 450 мең һумдан кәмерәк ҡалған икән, бары тик шул сумма ғына ҡапланасаҡ. Дәүләт ярҙамының ҡалған өлөшө һеҙгә бирелмәй.

## Ипотеканы ҡаплауға 100 мең һум

**Кемдәргә бирелә:** Күп балалы ғаиләләргә, инвалид балалар тәрбиәләгән ғаиләләргә, яңғыҙ әсәләргә, 2020 йылдың 15 мартынан 1 июнгә тиклем арауыҡта эшен юғалтҡан Башҡортостан халҡына.

**Шарттары:** Был - бурыстың төп күләмен түгел, ә банк процентгарын ҡаплауға йүнәлтелә. Улар 2018 йылдың 1 ғинуарынан 2020 йылдың 1 апреленә тиклем кредит алыусыларға бирелә. Субсидияның иң ҙур күләме - 100 мең һум.

**Ҡайҙа мөрәжәғәт итергә:** Ипотека алған банкка. Әлегә программала дүрт ҡатнашыусы: "Уралсиб", ВТБ, "Банк Россия" һәм "Россельхозбанк".

**Нимә белеү мөһим:** Был осраҡта 18 йәшкә тиклемге граждандар бала тип һанала, әгәр инде көндөҙгө бүлектә уҡыһалар - 23 йәшкә тиклем.

## Беренсе иғәнәгә 216 мең һумға тиклем

**Кемгә бирелә:** Сикләүҙәр юҡ, теләүселәрҙең барыһына ла ҡағыла.

**Шарттары:** Программа "Жилстройсбережения" тип атала. Банкта махсус иҫәп асаһығыҙ һәм ай һайын унда 3 мендән 10 мең һумға тиклем аҡса һалып бараһығыҙ. Республика иғәнәгеҙҙең өстән бер өлөшөн өҫтәй, әммә өс мендән күп түгел. 3-6 йыл аҡса тупларға кәрәк. Йәғни, программаның һәр ҡатнашыусыһына йылына 36 мендән дә күп түләнмәй, ә туплау ваҡыты осоронда иң күбе 216 мең һум өҫтәлә (индерелгән суммаға ҡарап). Бынан тыш, вкладҡа йылына 1-2 процент артып бара. Һуңынан һеҙ республика территорияһында фатир, йорт, ер участкаһы алырға йәки алдан булған ипотекағыҙҙы ҡапларға тейеш булаһығыҙ.

**Ҡайҙа мөрәжәғәт итергә:** Программала ҡатнашыусы банкка. Әлегә улар Һаҡлыҡ банкыһы һәм "Уралсиб".

**Нимә белергә кәрәк:** Кредитлау мөҙҙәте тупланманың бер ярым мөҙҙәтенә тиң. Йәғни һеҙ алты йыл аҡса йыйһағыҙ, ипотеканың иң ҙур срогы - 9 йыл. Программала ҡатнашыусылар өсөн банктар үҙ шарттарын булдырған - йылына 5,5 проценттан алып 7 процентҡа тиклем кредит бирелә. Әгәр етерлек күләмдә аҡса туплаһағыҙ, ипотека алмаһағыҙ ҙа була, был һеҙҙең хоҡуғығыҙ, әммә бурысығыҙ түгел. Программа ярҙамында 2400 кеше фатирлы булған, 7 мендән ашыуы - әлегә аҡса туплай.

**Станислав ШАХОВ.**

ЫРЫУЫҢ КЕМ?

# ЫРЫУЫБЫҘ - ЙӘНӘЙ,

## асылыбыҙ - көнбайыш башҡорттары



Йәнәй ырыуының боронғо ерҙәре Ыҡ һәм Ағиҙел йылғаларының түбәнге ағымында, Иж һәм Чулман (Кама) йылғаларының ике яҡ яры буйлап байтаҡ майҙанды биләгән. Административ бүленеш буйынса ул территория Вятка губернаһының Сарапул өйәҙенә ҡарай, ә Ағиҙел йылғаһының Камаға ҡойған урынына яҡын ерҙәр Өфө губернаһының Минзәлә һәм Бөрө өйәҙҙәре сиктәрендә була.

Тарихи Башҡортостан территорияһында кантондар идаралығы системаһы индерелгәс, йәнәй башҡорттары 11-се (1847 йылдан 12-се) кантондың 24-се һәм 25-се йорттары составында була. 1855-1863 йылдарҙа Башҡорт ғәскәренә типтәрҙәрҙе ҡушыу айҡанлы элекке 12-се кантон урынына яңы 4 кантон ойошторола: Алабуға (Елабуга) өйәҙендә, Сарапул өйәҙе ауылдарын да эсенә алып, үҙәге Салауыш ауылында булған 17-се кантон, ә Минзәлә өйәҙендә штаб-квартиралары Мәстей һәм Нурҡай ауылдарында булған 18-се һәм 19-сы кантондар булдырыла. Был кантондарҙа начальник вазифаһын хорунжий, сотник, есаул званиеларындағы Солтановтар башҡара. 20-се кантон Бәләбәй өйәҙендә булып, үҙәге Иҫке Дөмәй ауылында була (хәҙерге Илеш районы ауылы).

Рәсәйҙә крепостной право бөтөрөлгәндән һуң 4 йыл ваҡыт үтеүгә - 1865 йылдан кантондар идаралығы ла юҡҡа сығарыла. Уның урынына административ-территориаль граждандар идаралығы төҙөлә. Элекке башҡорт олоҫтарының исемдәре - Байлар, Бүләр, Гәрәй, Йәнәй, Ҡырғыҙ, Саралы Мең, Юрмый һымаҡ олоҫтар торлаҡ пунктар исемдәре (Семиостровский, Актаныш, Байсар, Нурҡай һ.б.) менән алмаштырыла.

Хәҙерге Татарстан территорияһында йәшәгән халыҡтарҙың ул ваҡытта ниндәй территорияларҙы биләүе хаҡында Рәсәй тикшеренеүселәре төҙөгән географик карталарҙан белеп була. Мәҫәлән, П.И. Кеппендың "Европа Рәсәйенең этнографик картаһы" (1834 йылдағы VIII ревизия нигеҙендә), А.Ф. Риттихтың (1875 йыл) "Европа Рәсәйенең этнографик картаһы". Шулай уҡ Ф.А. Фиельструпа, С.И. Руденко, К.В. Лаврентьев карталарынан да Минзәлә, Ыҡ, Кама йылғалары үҙәндәрендә башҡорттар йәшәгәнен белеп була. К.В. Лаврентьевтың "Вятка губернаһы географияһы" (тау тапҡыр 1890 йылда нәшер ителгән) китабында бирелгән картала төсле буяуҙар менән крайҙың ерле халыҡтары - вотяктар (удмурттар), черемистар (мариҙар), татарҙар, башҡорттар, пермяктар, бесермәндәр, типтәрҙәр йәшәгән урындар күрһәтелгән, уларҙың ауылдарының һәм станцияларҙың исемдәре яҙылған. Башҡорттар тураһында ул былай тип яҙа: "Башҡорттар тик ике өйәҙҙә генә йәшәй - Сарапул һәм Алабуға өйәҙендә, барлығы 12 мең кеше. Башҡорттар ҡиәфәттәре һәм кейемдәре менән татарҙарға оҡшаған һәм шулай уҡ Мөхәммәт динен тоталар".

Алабуға өйәҙендә байлар һәм йәнәй ырыуы башҡорттары йәшәһә, Сарапулдағы башҡорт ауылдарына тик йәнәйҙәр генә нигеҙ һалған. К.В. Лаврентьев Сарапул өйәҙендә (хәҙерге Татарстандың Агрыз районы) йәшәгән халыҡтар тураһында ентекле мәғлүмәт ҡалдырған: "Сарапул өйәҙендә 350 мең кеше иҫәпләнә. Өйәҙ халҡы үҙенең төрлө ҡәүемле составы менән айырылып тора: рустарҙан башҡа (250 мең) , өйәҙҙә вотяктар (82 мең), татарҙар (6 мең), башҡорттар (5 мең), типтәрҙәр (4 мең), черемистар (1 мең), зыряндар, еврейҙар, немецтар, поляктар, сигандар йәшәй".

Билдәле бер сәбәптәр арҡаһында XIX быуатта башҡорттарҙың бер өлөшөнөң типтәр этносословиеһына күскәнлеген дә иҫәпкә алырға кәрәк. Улар, типтәр тип теркәлгән хәлдә лә, үҙҙәренең башҡорт сығышлы икәнен онотмай. 1842 йылға ҡараған бер документта Девятерня һәм Сосново (Нарат) ауылдарында йәшәүсе типтәрҙәрҙең ышаныслы кешеләре (доверителдәре) үҙҙәренең башҡорттарҙан булып, уларҙы типтәр сословиеһына яҙыуҙарын яңылыш булған, тип раҫлаһа, Ҡасай ауылында йәшәүселәр ҙә башҡорт сығышлы икәнлектәрен һәм әле биләгән ерҙәрендә күп ваҡыттарҙан бирле йәшәп, ергә хоҡуҡтары буйынса Йәнәй олоҫо башҡорт аҫабалары менән бер тигеҙ ер биләүсе булыуҙарын белдереп, ошоларҙы раҫлау маҡсатында 1710 йылда уларға батша Петр Алексеевич указы буйынса тапшырылған һаҡлау ҡағыҙын (память) һәм 1747 йылда типтәр сословиеһына яңылыш теркәүҙәре хаҡында үҙҙәренән бирелгән иғландың күсермәһен күрһәтәләр.

Бынан башҡа, Вятка губернаһы Алабуға өйәҙенең өс ауылында - Аҡкүҙҙа (1902 йылда 313 йән теркәлгән), Битсимәстә, йәғни бүленеп сыҡкан Яңы Аҡкүҙҙа (1859 йылда 154 йән була) һәм Тузимала йәнәй ырыуы башҡорттары йәшәгәнлеге билдәле.

Шулай итеп, VIII ревизия материалдарына ярашлы, 1834 йылда Вятка губернаһының Сарапул һәм Алабуға өйәҙҙәрендә (хәҙер Татарстандың Агрыз районы) 1 200 йәнәй ырыуы башҡорто теркәлә. XIX-XX быуат сиктәрендә уларҙың дөйөм һаны 5 тапҡырға тиерлек артып, 6 000 кешегә тиклем етә.

Ә бына Минзәлә өйәҙендә 1834 йылда тик йәнәй ырыуы башҡорттары ғына ла 6 173 кеше була (хәҙерге Аҡтаныш районы ауылдарында - 5 368 кеше, Минзәлә районы ауылдарында - 805 кеше). Бынан тыш, Бәләбәй һәм Бөрө өйәҙҙәрендә, йәғни хәҙерге Башҡортостандың Краснокама, Илеш, Дәүләкән (Чапай ауылы), Дүртөйлө (Иванай ауылы) райондарында, йәнәйҙәрҙең һаны ул саҡта 1 100 тирәһе кеше була. Тимәк, 1834 йылда йәнәйҙәрҙең дөйөм һаны иң кәмендә 8 400 тирәһе кеше була. Артабанғы иҫәп алыу материалдарына ентекләп анализ эшләһәң, XIX быуаттың икенсе яртыһында - XX быуат башында йәнәй ырыуы башҡорттарының ғына түгел, ғөмүмән, башҡорт халҡының әүҙем демографик үсеш юлына күсеүенә ныҡлап ышанырға була. Тимәк, башҡорттар хаҡында ошо заманда нәшер ителгән китаптарҙа һәм публицистик мәҡәләләрҙә халҡыбыҙ йәшәйешенә объектив анализ бирелгән, тип әйтеп булмайҙыр.

Бөгөн Йәнәй ырыуы башҡорттары вариҫтары Башҡортостандың Краснокама районы Сауз һәм Саузбаш, Илеш районы Йәйләү (Зяйлево), Ҡыпсаҡ, Турачи, Дәүләкән районы Чапай, Бүздәк районы Шланлыкүл, Иҫке Шығай, Иҫке Боғаҙы, Туймазы районы Кәкребаш, Түбәнге Бишенде ауылдарында йәшәй.

Татарстандың Агрыз һәм Аҡтаныш райондарының бер нисә ауылында ла, хәҙер инде татар этник берҙәйлегенә күскән йәнәй ырыуы башҡорттары тоҡомдары көн итә. Агрыз районында: Исенбай, Девятерня, Үтегән, Ҡадыбаш, Иҫке һәм Яңы Сләк, Нарат, Ҡасай, Гәли ауылдары. Аҡтаныш районында: Боғаҙы, Яңы Боғаҙы, Буазкүл, Ҡалмаш, Суукҫы, Түбәнге һәм Үрге Үрйәҙе, Чалманарат, Шабыҙ һәм башҡа ауылдар.

2012-2013 йылдарҙа төрлө башҡорт ырыуҙары вәкилдәренән генетик материалдар йыйып алынып, башҡорт халҡының генофонды буйынса байтаҡ ҡына һығымталар эшләү мөмкинлеге тыуҙы. Генетик анализ һөҙөмтәһендә һәр кемдең ниндәй гаплотөркөмгә ҡарағаны асыҡланды. Илеш һәм Краснокама райондарында йәшәгән йәнәй ырыуы башҡорттарының (барлығы 35 кеше) төп ике гаплотөркөмгә ҡарағаны билдәләнде. Тикшереүҙә ҡатнашҡан йәнәйҙәрҙең 2/3 өлөшө N1c-M178 гаплотөркөмөнән икән. N1c1-M178 гаплотөркөмө кешеләре иң күп табылған урындар - төньяҡ-көнсығыш Европа һәм Себер тайғаһы райондары. Шулай уҡ был гаплотөркөмдөң Саян-Алтайҙа һәм Уралда таралған айырым тармаҡтары асыҡланды. Был ошо гаплотөркөмгә ингән кешеләрҙең ата-бабаларының үтә боронғо замандарҙа (этностар формалаша башлауҙан бик күпкә элегерәк) көнсығыштан көнбайышҡа табан миграция процестарын анығыраҡ билдәләргә ярҙам итәсәк.

Йәнәйҙәрҙең составындағы тағы ла бер гаплотөркөм - R1a1-M198 (хМ458) барлығы 18% тәшкил итә. Башҡорт генетик популяциялары сиктәрендә был төркөм түнгәүер һәм табындарҙың шул уҡ гаплотөркөмө менән бер кластерға инә. Был гаплотөркөмгә ҡараған мең һәм ҡыҙай ырыуы башҡорттары араһында ла байтаҡ ҡына. Күрәһең, бында Көнбайыш Себер киңлектәренән Көньяҡ Урал, Мәсәғүт урманлы далалары аша барған боронғо миграция эҙемтәләре сағыла. Был гаплотөркөм башҡорттары Башҡортостандың төньяҡ-көнсығышында, Ағиҙелдең түбәнге ағымының төньяғындағы ерҙәрҙә күберәк таралған.

R1a1-M198 (хМ458) гаплотөркөмө, башлыса, Евразия киңлектәрендә өҫтөнлөклө, тип иҫәпләнә. Был төркөм кешеләре Көнсығыш Европала, Төньяҡ Һиндостанда, Алтайҙа (алтайҙар, шорҙар, теленгуттар), Памир - Тянь-Шанда (ҡырғыҙҙар), шулай уҡ Көньяҡ һәм Көнбайыш Себерҙә, Урал һәм Волга буйында йәшәүсе халыҡтар араһында йыш осрай.

**Арыҫлан ТАЙМАСОВ әҙерләне.**

**(Аҙағы. Башы 24-27-се һандарҙа).**

---

БӨЙӨК ЕҢЕҮГӘ - 75



# ҠАҺАРМАНЛЫҠ ТАРИХЫ

## Башҡорттар артҡа сигенмәй

Башҡорт атлы дивизияһы яңы оборона һыҙығына күсеү менән тиерлек, фашистар менән тиңһеҙ алыштар дауам итте. Козинка, Голосновка ауылдары янында дошман танкылары һәм мотопехота тупланған була, улар ошо рубеждан һөжүм итеп, Елец ҡалаһын баҫып алырға йыйына. 1942 йылдың 9 июлендә 8-се кавкорпус командованиеһы беҙҙең дивизияға яңы бурыс ҡуя: Лобановка, Озерки ауылдары янындағы дошман төркөмөн юҡ итеп, артабан Голосновка, Никольское ауылдарына табан һөжүмде дауам итергә, яңы биләгән рубежда ныҡ тороп, башҡа уҡсы частар килеп еткәнсе ҡулда тоторға.

М.М. Шайморатов майор Г.А. Нафиҡовтың 294-се полкына Лобановка һәм Никольское йүнәлешендә, Т.Т. Кусимовтың 275-се полкына Озерки һәм Голосновкаға табан һөжүм башларға бойора, Ғ.Д. Макаевтың 313-сө полкы резервта Бурдино ауылында ҡала.

Майор Гәрәй Нафиҡов ике эскадронды алға ебәреп, Никон Колесниктың яугирҙарын икенсе эшелонға ҡуя. Капитан Шаһикамал Әлибаевтың һалдаттары урман ҡырына етеү менән, уларға бер рота немец автоматчиктары ябырыла. Атыш һәм ҡул һуғышы башлана. Колесник, атыш тауыштарын ишетеп, тиҙ арала үҙ эскадронын яуға индерә. Ике эскадрон ҡыҫымынан баҙап ҡалған немецтар тәртипһеҙ рәүештә сигенә башлай, уларҙы беҙҙең кавалеристар эҙәрлекләп бара. Шунан файҙаланып, өлкән лейтенант Шәйхи Сиреголовтың һәм лейтенант Хөсәйен Мирсаяповтың эскадрондары, ағаслы ҡалҡыулыҡты һул яҡтанырак урап уҙып, төньяҡтан Лобановкаға яҡынлаша. Улар менән бергә полк командиры Гәрәй Нафиҡов та була. Ул Әлибаев һәм Колесник эскадрондары ла тиҙҙән Лобановкаға килеп етер, тип ышана.

Әммә һуғыш - һуғыш инде, барыһы ла алдан уйланғанса бармай. Әлибаев һәм Колесниктың атакаға күтәрелгән яугирҙарын ауылдан арыраҡ бер ҡалҡыулыҡта ныҡытылған позицияларынан немецтар көслө пулемет һәм мылтыҡ-автомат уты менән ҡаршылай. Беҙҙең яугирҙарыбыҙ туҡтап ҡалырға мәжбүр була. Элемтә лә булмағас, полк командиры был хаҡта бер ни ҙә белмәй.

Алыш дауам итә. Лобановканан төньяҡтараҡ, урман ситендә, дошмандың артиллерия расчеттары урынлашҡан була. Майор Нафиҡов уларҙы юҡ итергә бойора. Эңер төшөп килгән мәлдә беҙҙең яугирҙар, дошман позицияларына үтеп инеп, уларҙың ике артиллерия һәм өс миномет батареяһын юҡ итә. Ҡараңғы төшә. Немецтар төнгө һуғышты яратмай, ә Нафиҡовтың яугирҙары төнөн Лобановканы дошмандан таҙартырға була. Ә был саҡта Нафиҡов полкының һул флангыһында Таһир Кусимовтың кавалеристары ла үҙҙәренең йүнәлешендә дошмандың көслө оборонаһына юлығып, артиллерия һәм пулемет утынан юғалтыуҙарға дусар булып, һөжүмде туҡтатырға мәжбүр була.

**Вәли ИҘРИСОВ әҙерләне.**

**(Дауамы бар).**

✓ *Беҙ дәүләт һәм муниципаль хеҙмәткәрҙәрҙең килемдәре буйынса белешмәләрҙе тикшереп торабыҙ. Әгәр ниндәйҙер хеҙмәткәрҙең килемсығым балансы нығ айырыла икән, унан аңлатма талап итәбеҙ.*



# УЛАРҘЫҢ КҮҘӘТЕҮ ҒӘМӘЛДӘРЕ...

## беҙҙең хоҡуҡтар һағында

**Сираттағы әңгәмәбеҙ Өфө ҡалаһының Ленин районы прокуроры урынбаҫары, юстиция советнигы Тимур Тимербай улы ҠӘЮМОВ менән.**

**▸ Рәсәй ҡануниәтенең дөрөҫ үтәлешен күҙәтеү - прокуратура органдарының төп функцияларының береһе. Әлбиттә, йәшәйешебеҙҙең төрлө өлкәләрендә ҡануниәт нормалары боҙолған осраҡтар етерлек. Һеҙ, Тимур Тимербай улы, федераль ҡануниәт үтәлеше буйынса Өфө ҡалаһының Ленин районында күҙәтеү (надзор) ғәмәлдәрен башҡараһығыҙ. Ленин районы прокуратураһының ошо йүнәлештә алып барған эштәре хаҡында ниҙәр һөйләр инегеҙ?**

- Ғөмүмән, прокуратура йәшәйешебеҙҙең барса өлкәләрендә лә федераль ҡануниәттең үтәлешен күҙәтеү ғәмәлдәрен башҡара. Граждандарҙың социаль хоҡуҡтары буйынса күҙәтеү эштәрен алып барыу - ул прокуратураның хоҡуҡ һаҡлау эшмәкәрлегендә иң мөһим функцияларҙың береһе. Бында һүҙ социаль яҡтан айырыуса яҡлауға мохтаж булғандарҙың хоҡуҡтары күҙ уңында тотолоуы тураһында. Беҙ хеҙмәт һәм һуғыш ветерандарының, инвалидтарҙың, күп балалы ғаиләләрҙең, етем балаларҙың һәм ҡарауһыҙ ҡалған кешеләрҙең, ғөмүмән, дәүләт законы тарафынан социаль ярҙам сараларына хоҡуҡтары булған граждандарҙың мәнфәғәттәрен яҡлайбыҙ.

Ҡоро һүҙ булмаһын өсөн Өфө ҡалаһының Ленин районы буйынса бер ни тиклем статистика мәғлүмәттәрен килтерәйек. Ошо йылдың 5 айында ғына Ленин районы прокуратураһы тарафынан социаль өлкәлә 500-ҙән ашыу хоҡуҡ боҙоу ғәмәлдәре, мәҫәлән, 260-тан ашыу граждандың хеҙмәт хоҡуҡтарын боҙоу фактлары асыҡланған. Айырым ойошмаларҙың хеҙмәтте ойоштороу өлкәһендәге юридик документтарын - локаль акттарын федераль ҡануниәт менән тап килтертеү маҡсатында прокуратура 6 тапҡыр протест белдерҙе. Прокуратураның ошондай иҫкәртеү сараһы граждандарҙың хеҙмәт хоҡуҡтарын боҙҙортмау маҡсатында ҡулланыла.

Шулай уҡ хеҙмәткәрҙәргә эш хаҡын ваҡытында түләмәгән өсөн суд бойороҡтарын сығартыу маҡсатында Ленин районы прокуратураһы 280 мәртәбә судҡа дәғүә ғаризалары (иск) бирҙе. Шулай уҡ хеҙмәт хоҡуҡтарын боҙоу фактары буйынса айырым ойошмалар һәм предприятиелар етәкселәренә ошо боҙоуҙарҙы бөтөртөү өсөн 15 күрһәтмә (представление) бирелде. Бындай осраҡтарҙа ойошма етәксеһе 1 ай ваҡыт эсендә күрһәтмәлә һанап үтелгән етешһеҙлектәрҙе, хеҙмәт хоҡуҡтарын боҙоу фактарын бөтөрөргә, шуға сәбәп булған шарттарҙы үҙгәртеп, төҙәтеп, прокуратураға күрелгән саралар буйынса мәғлүмәт бирергә бурыслы. Әйтергә кәрәк, ҡануниәттә граждандарҙың хеҙмәт хоҡуҡтарын боҙған өсөн административ яуаплылыҡ менән бер рәттән, енәйәти яуаплылыҡ та ҡаралған. Мәҫәлән, хеҙмәткәрҙәргә эш хаҡы ваҡытында түләнмәй икән, "Рәсәй Федерацияһының административ хоҡуҡ боҙоуҙар тураһындағы кодексы"ның (КоАП РФ) 5.27 статьяһының 6-сы өлөшөнә ярашлы, эш биреүсе административ яуаплылыҡҡа тарттырылып, уға ҡарата тейешле яза биреү саралары ҡаралған. Әгәр эш биреүсе 2 айҙан да артыҡ ваҡыт эсендә эшселәргә эш хаҡын түләмәй икән, ул РФ Енәйәт кодексының 145.1 статьяһында ҡаралған енәйәт яуаплылығына тарттырыла.

**▸ Өфө ҡалаһының Ленин районы ойошмаларында асыҡланған ошондай хоҡуҡ боҙоуҙар буйынса прокуратура тарафынан башҡарылған аныҡ эштәрҙе барлап китһәгеҙ ине.**

- Эйе, уларҙың ҡайһы берҙәре хаҡында уҡыусыларға аныҡ мәғлүмәт биреү урынлы булыр. Өфө ҡалаһының Ленин районы прокуратураһы "Башҡортостан фанера-плита комплексы"нда хеҙмәт ҡануниәте үтәлешен тикшергәйне. Ошо предприятие етәкселегенең 2020 йылдың ғинуар-февраль айҙары өсөн 304 хеҙмәткәргә 12 миллион һумдан ашыу күләмдә эш хаҡы түләмәгәне асыҡланды. Ошо факт буйынса прокуратура ойошманың вазифалы кешеһенә ҡарата административ эш ҡуҙғатып, уны судта тикшереү һөҙөмтәһендә был вазифалы кешегә 12 мең һум күләмендә штраф һалынды. Ойошма етәксеһенә эш хаҡы буйынса бурысты тулыһынса ҡаплау тураһында күрһәтмә сығарылды. Прокуратураның йоғонтоло эшмәкәрлеге һөҙөмтәһендә ойошма хеҙмәткәрҙәренең хоҡуҡтары яҡланды, уларға эш хаҡы тулы күләмендә түләтелде. Ошондай уҡ хоҡуҡ боҙоу осраҡтары "Торлаҡ хужалығы тресы" яуаплылығы сикләнгән йәмғиәттә, "Уныш" яуаплылығы сикләнгән йәмғиәттә, башҡа ойошма-предприятиеларҙа ла асыҡланды һәм беҙҙең тикшереүҙәр һөҙөмтәһендә хеҙмәткәрҙәрҙең хеҙмәт хоҡуҡтары тергеҙелде.

Беҙгә айырым граждандарҙың хеҙмәт хоҡуҡтарын яҡлау эшендә лә ҡатнашырға тура килә. 2017 йылдың октябрь айында "Компания Потенциал" йәмғиәте электросварщигы үҙенә тейешле эштәрен башҡарған саҡта өҫтөнә бетон тоташтырма төшә. Ул ауыр травмалар алып, 5 айҙан һуң вафат була. Ошо трагедия эш биреүсенең производствола хеҙмәт шарттарының хәүефһеҙ булыуын тәьмин итмәүе арҡаһында килеп сыға. Уның туғандары мораль зыян өсөн ойошманан компенсация талап итеп, судҡа дәғүә ғаризаһы бирә. Прокуратура, ошо хәлдә ентекләп тикшергәндән һуң, судта зыян күреүселәрҙең талаптары законлы, тип яҡлап сыға. Һөҙөмтәлә суд зыян күреүселәр файҙаһына 1,6 млн. һум күләмендә компенсация түләтеү хаҡында ҡарар сығара.

**▸ Әңгәмәбеҙҙең башында социаль яҡтан дәүләт ярҙамына мохтаж булған граждандарҙың хоҡуҡтарын яҡлау зарурлығын билдәләп киткәйнек. Ошо юҫыҡта Ленин районында прокуратура тарафынан күрелгән саралар хаҡында һөйләп үтһәгеҙ ине.**

- Прокуратура был мәсьәләне даими контролдә тота. Беҙ бигерәк тә һаулыҡ һаҡлау өлкәһендә медицина ярҙамына мохтаж булғандарҙың ҡануниәттә ҡаралған льготаларға хоҡуҡтарының тейешле кимәлдә ғәмәлгә ашырылыуына иғтибар итәбеҙ. Был өлкәлә лә, мәҫәлән, шул уҡ инвалидтарҙың хоҡуҡтары боҙолған осраҡтар асыҡланды. Ҡайһы бер сирле граждандар билдәле бер дарыуҙарҙы даими ҡулланған хәлдә генә иҫән-һау йәшәй ала, ә ул дарыуҙар уларға бушлай бирелеп торорға тейеш. Әммә төрлө сәбәптәр арҡаһында ошондай дарыуҙар менән граждандарҙы тәьмин итеүҙә өҙөклөктәр булып тора. Беҙ бындай ситуациялар килеп сыҡҡанда яуаплы органдарға күрһәтмәләр ебәрәбеҙ, судҡа дәғүә ғаризалары бирәбеҙ. Мәҫәлән, быйыл 2 инвалид баланың тейешле дарыуҙар менән ваҡытында тәьмин ителмәүе хаҡында балалар больницаһының баш врачына күрһәтмәләр ебәрелде. Тикшереү барышында ауыр сиргә дусар булған был балаларға 2018-2019 йылдарҙа уларҙың йәшәүе өсөн мөһим булған дарыуҙар, ҡандарындағы шәкәр миҡдарын билдәләүсе тест-полоскалар тулы күләмдә бирелмәгән, сөнки улар дауаханалар селтәрендә булмаған. Бер инвалид баланың әсәһе урындағы хәйриә фонды аша ғына кәрәкле дарыуҙар тапҡан. Шулай уҡ прокурор күрһәтмәһе йоғонтоло булды: хәҙер ошо инвалид балалар кәрәкле дарыуҙар менән ваҡытында һәм тулыһынса тәьмин ителә.

41 йәшлек ауыр сирле ир кеше менән дә шундай уҡ хәл була: ул да үҙенә тейешле дарыуҙарҙы бушҡа ала алмай. 2020 йылдың ғинуарынан март айына тиклем дауаханаларға уға кәрәкле дарыуҙар алдырылмай. Район прокуратураһы инвалидтарҙың хоҡуҡтарын тергеҙеү маҡсатында республиканың Һаулыҡ һаҡлау министрлығына асыҡланған етешһеҙлектәрҙе һәм хоҡуҡ боҙоуҙарҙы бөтөрөү хаҡында күрһәтмә ебәрҙе. Күҙәтеү ведомствоһының талаптары ҡәнәғәтләндерелде, хәҙерге ваҡытта инвалидтар тейешле препараттар һәм дарыуҙар менән тәьмин ителеп тора.

Быны тағы ла бер факт. Ленин районы прокуратураһына "Регион Өфө" ойошмаһында баш бухгалтер вазифаһында эшләп, йөклө булыу һәм өсөнсө балаһын табыу сәбәпле ошо йылдың май айында отпускыға сыҡҡан ҡатын-ҡыҙҙан шикәйәт килде. Ҡануниәткә ярашлы, эш биреүсе уға отпускыға сығыу айҡанлы тейешле пособие һәм әсәлекте яҡлау буйынса ҡаралған финанс түләүҙәре менән тәьмин итергә тейеш ине. Әммә ул был талаптарҙы инҡар итеп, күп балалы әсәгә барлығы 90 мең һум күләмендә аҡса түләмәгән. Ошо ҡатын-ҡыҙҙың хеҙмәт һәм әсәлек хоҡуҡтарын тергеҙеү маҡсатында прокуратура судҡа мөрәжәғәт итеп, уға эш биреүсенән тейешле түләүҙәрҙе тулыһынса ҡайтарыуҙы талап итте. Суд прокуратура талаптарын тулыһынса ҡәнәғәтләндерҙе. Күҙәтеү ведомствоһы әлеге ваҡытта шикәйәт биреүсенең хоҡуҡтарының ғәмәлгә ашырылыуын контролдә тота.



*Беҙ бигерәк тә һаулыҡ һаҡлау өлкәһендә медицина ярҙамына мохтаж булғандарҙың ҡануниәттә ҡаралған льготаларға хоҡуҡтарының тейешле кимәлдә ғәмәлгә ашырылыуына иғтибар итәбеҙ. Был өлкәлә лә, мәҫәлән, шул уҡ инвалидтарҙың хоҡуҡтары боҙолған осраҡтар асыҡланды. Ҡайһы бер сирле граждандар билдәле бер дарыуҙарҙы даими ҡулланған хәлдә генә иҫән-һау йәшәй ала, ә ул дарыуҙар уларға бушлай бирелеп торорға тейеш. Әммә төрлө сәбәптәр арҡаһында ошондай дарыуҙар менән граждандарҙы тәьмин итеүҙә өҙөклөктәр булып тора. Беҙ бындай ситуациялар килеп сыҡҡанда яуаплы органдарға күрһәтмәләр ебәрәбеҙ, судҡа дәғүә ғаризалары бирәбеҙ.*

**▸ Һуңғы осорҙа коррупцияға ҡаршы көрәшкә ҙур иғтибар бирелә. Әммә коррупцияға ҡаршы ҡануниәт нормаларын тупаҫ боҙоусы вазифалы кешеләр аҙайҙы, тип әйтеп булмай әле. Ошо юҫыҡта Ленин районында ниндәй эштәр башҡарыла?**

- Коррупция - беҙҙең заман сире. Ленин районы прокуратураһы ла ошо юҫыҡта даими мониторинг алып бара, тикшереүҙәр үткәреп, коррупцияға ҡаршы ҡануниәте боҙоусыларҙы асыҡлай. Ябай кеше коррупцияға ҡаршы көрәште ришүәт алыусы вазифалы кешене фашлау, ҡулға алыу, хөкөм итеү рәүешендә күҙ алдына килтерә. Әммә ошондай аяныслы хәлдәр булмаһын өсөн был йүнәлештә профилактика эштәрен әүҙемләштереү зарур. Ҡануниәттә коррупцияны профилактикалау өсөн билдәле бер юридик механизм булдырылған, тик уны үтәүгә өлгәшергә кәрәк. Прокуратура тап ошо механизмдың аныҡ эшләүен даими күҙәтеп, тикшереп, законда ҡаралған саралар күрә. Мәҫәлән, беҙ дәүләт һәм муниципаль хеҙмәткәрҙәр-

***✓ Бер селтәрле маркетинг ағзаһы булып киттем шулай. Үҙем 3 мең, ҡыҙым 3 мең индереп, артыбыҙҙан хеҙмәттәш ҡыҙҙарҙы шулай уҡ 3-әр меңдән маркетингҡа "теҙҙем". Шуның менән вәссәләм - аҡса ла юҡ, килем дә.***

ҙең килемдәре буйынса белешмәләрҙе тикшереп торабыҙ, уларҙың сығымдарына ла мониторинг эшләнә. Әгәр ниндәйҙер хеҙмәткәрҙең килем-сығым балансы ныҡ айырыла икән, унан аңлатма талап итәбеҙ. Был инде коррупцияны профилактикалауҙа тәүге аҙым. Йәнә, әйтәйек, ниндәйҙер чиновник, дәүләт хеҙмәткәре, әлеге эшенән киткәс, икенсе бер эшкә, мәҫәлән, коммерция ойошмаһына урынлаша. Бында мәнфәғәттәр конфликтына, ҡоҙа-ҡоҙағыйлыҡҡа урын булырға тейеш түгел. Шуның өсөн элекке дәүләт хеҙмәткәре эшкә урынлашҡан ойошманың етәксеһе 10 көн эсендә ошо кешенең элекке эшләгән дәүләт хеҙмәтенә тейешле мәғлүмәт ебәрә, ә унда махсус комиссия был осраҡта мәнфәғәттәр конфликтының булыу-булмауын асыҡлап, элекке хеҙмәткәренә әлеге ойошмаға эшкә инергә рөхсәт бирә йә иһә ризалыҡ бирмәй. Ғәмәлдә, был талаптар йыш ҡына үтәлмәй, шуға күрә беҙгә тейешле мониторинг уҙғарырға тура килә. Ленин районы прокуратураһы ошондай бер нисә фактты асыҡланы.

Мәҫәлән, былтырғы йылдың август айында Өфө ҡалаһы ҡала округының Ленин районы хакимиәте башлығының беренсе урынбаҫары вазифаһын башҡарыусы элекке муниципаль хеҙмәткәр "Структуралы эштәр үҙәге"нә баш инженер вазифаһына эшкә алына. Был осраҡта Федераль закон талабы үтәлмәй - 10 көн эсендә уның элекке эшләгән урынына ошо хаҡта белдереү ҡағыҙы ебәрелмәй. Тикшереү һөҙөмтәһендә фирма директорына административ эш ҡуҙғатылып, уға мировой суд тарафынан 20 мең һум күләмендә штраф һалынды.

Ә бына "Метлом" фирмаһына коррупцияға ҡаршы федераль законды боҙған өсөн бюджетҡа 1 миллион һум күләмендә штраф түләргә тура килде. Эш былай була. Ошо фирма бинаһының фасадына ҡара һәм төҫлө металл һыныҡтарын ҡабул итеү һәм эшкәртеү хаҡында реклама баннерын законһыҙ рәүештә урынлаштыра. Фирма вәкиле, яуаплылыҡтан ҡотолоу маҡсатында, ошо хоҡуҡ боҙоу факты буйынса протокол төҙөү өсөн килгән муниципалитеттың административ комиссияһы хеҙмәткәренә аҡса тәҡдим итә. Тикшереүсе был тәҡдимде кире ҡаға. Был факт буйынса район прокуроры, РФ АХБтК-ның 19.28 статьяһының 1-се өлөшөнә ярашлы (юридик шәхес исеменән законһыҙ түләү), административ хоҡуҡ боҙоу хаҡында эш ҡуҙғата, уны ҡарау һөҙөмтәһендә фирма 1 миллион һумлыҡ штраф рәүешендә язаға тарттырыла.

**Әңгәмәбеҙҙең аҙағында, Тимур Тимербай улы, граждандарыбыҙҙың социаль яҡтан яҡланғанлығына булышлыҡ итеүсе саралар хаҡында ла үҙ фекерегеҙҙе әйтеп китһәгеҙ ине.**

- Беҙҙең ҡулыбыҙҙа иң элек районыбыҙҙа йәшәүсе халыҡтың социаль хәле хаҡында аныҡ мәғлүмәттәр булырға тейеш. Район кимәлендә социаль өлкәлә законлылыҡты нисек билдәләп була? Быны тик даими мониторинг аша ғына эшләп була. Граждандарҙың социаль хоҡуҡтарын яҡлау маҡсатында прокуратура мөмкин булған барса күҙәтеү сараларын ҡуллана. Быуна миҫал өсөн шул уҡ эш хаҡын ваҡытында түләүҙе алайыҡ. Районда хеҙмәт процестарының торошон муниципаль идара итеү органдары, социаль хеҙмәттәр, мәшғүллек хеҙмәте, хеҙмәт буйынса инспекция, статистика идаралығы, һалым хеҙмәте һәм граждандарҙың хеҙмәтен ғәмәлгә ашырыу буйынса бөтә ведомстволар менән тығыҙ бәйләнештә булғанда ғына аныҡ белеп була. Беҙҙә системалы нигеҙҙә бөтә кәрәкле мәғлүмәт туплана. Пенсия фонды ай һайын барса ойошмаларҙан хеҙмәткәрҙәргә түләнгән эш хаҡынан күпме аҡса күсерелеүен, мәшғүллек хеҙмәте эшһеҙҙәр һанының артыуын йәиһә кәмеүен, ниндәй предприятиеларҙа ҡыҫҡартыуҙар булыуын, статистика идаралығы эш хаҡы буйынса ниндәй ойошмаларҙа бурыс барлыҡҡа килеүен беҙгә еткереп тора. Хеҙмәт буйынса район хакимиәте бүлектәренең мониторингын да ҡулланабыҙ. Беҙ ошо мәғлүмәттәр нигеҙендә, прокуратураға бирелгән вәкәләттәрҙе файҙаланып, законда ҡаралған сараларҙы ғәмәлгә ашырабыҙ. Прокуратура граждандарҙың хеҙмәтен ойоштороуҙа тулы законлылыҡты талап итә. Беҙ ошо мәсьәләләрҙе хәл итеү буйынса район кимәлендә үҙенә күрә бер координация органы булып торабыҙ. Беҙҙә тупланған барса мәғлүмәт анализлана, етешһеҙлектәр, граждандарҙың хеҙмәт хоҡуҡтарын боҙоу осраҡтары тикшерелә һәм ҡарарҙар ҡабул ителә.

Әйткәндәй, прокуратура эргәһендә хеҙмәт хоҡуҡтарын яҡлау буйынса ведомство-ара эшсе төркөм дә эшләй, ул бик йоғонтоло көскә эйә. Уның ултырыштарында предприятиеларында финанс проблемалары, хеҙмәткәрҙәренә эш хаҡын түләүҙә өҙөклөктәр барлыҡҡа килгән эш биреүселәр тыңлана, уларға көрсөктән сығыу юлдары буйынса кәңәштәр бирелә, ниндәйҙер ярҙам алыу мөмкинлектәре ҡарала. Һуңғы сиктә генә, әгәр эш биреүсе бер нисек тә үҙенең проблемаларын хәл итергә теләмәһә, уларға законда ҡаралған административ һәм енәйәт эштәре ҡуҙғатыла. Беҙҙең төп маҡсат та шул бит - хеҙмәт процестарында законһыҙлыҡҡа юл ҡуйылырға тейеш түгел.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Беҙ, ябай граждандар, прокуратура хаҡында һүҙ сыҡһа, уны енәйәтселәрҙе фашлаусы, уларҙы законлы яуаплылыҡҡа тарттырыусы орган итеп күҙ алдына килтерергә күнеккәнбеҙ. Өфө ҡалаһының Ленин районы прокуроры урынбаҫары Тимур Тимербай улы менән әңгәмә барышында ул прокуратураның граждандарҙың социаль хоҡуҡтарын яҡлаусы төп орган икәнлегенә баҫым яһаны. Тап шуның өсөн хоҡуҡи проблемалары барлыҡҡа килгән һәр кем прокуратура органдарына мөрәжәғәт итеп, яҡлау табыуға өмөт итә алалыр, тип ышанайыҡ.**

**Бәҙри ӘХМӘТОВ**
**әңгәмәләште.**

*КИЛЕШМӘЙЕМ!*

# НӘФСЕ ПИРАМИДАЛАРЫ...

## күҙҙе быуа, алдаштыра



**Кешегә күп төрлө хис-тойғолар менән бергә нәфсе тигән нәмә лә һалынған. Ошо нәфсе беҙҙе байыуға, күберәк табыш алыуға, артыҡ көс һалмай ғына килем табыуға этәрә. Һәм тап ошо ысулды финанс пирамидалары тәҡдим итә лә инде.**

"Ниндәйҙер бер сумма индер ҙә... артынан 3-5 кеше ҡуй ҙа... һиңә сумма күсеп бара... аҡсаң йыйылып бара... һин беҙҙең команда ағзаһы... һин - лидер... матур киләсәк көтә... уңыш... муллыҡ... байлыҡ", тиҙәр улар. Һәм, әлбиттә, беҙ ышанабыҙ. Ышанғы килә лә инде! Шундайға аҙ ғына булһа ла әүрәмәгәндәр бик һирәктер. Танышым үлтереп өгөтләгәс, кемдәрҙер шунсама килем ала, мин дә әллә күпме аҡса индерҙем, был - донъялағы иң ысын һәм алдаҡһыҙ компания, тигәс, мин дә, ҡаҙаҡтың шунгит һабынын һата торғанмы, бер селтәрле маркетинг ағзаһы булып киттем шулай. Үҙем 3 мең, ҡыҙым 3 мең индереп, артыбыҙҙан хеҙмәттәш ҡыҙҙарҙы шулай уҡ 3-әр меңдән маркетингҡа "теҙҙем". Шуның менән вәссәләм - аҡса ла юҡ, килем дә. Ҡулда бер тоҡ һабын тороп ҡалды бит инде шулай ҙа, быларҙы уға-быға тәҡдим итәм хәҙер. Редакцияға бер үзбәк ҡатыны өрөк-емеш һатырға килеп йөрөй, ныҡ шәп һабын, йөҙ сирҙән дауа, тип уға тәҡдим иткәйнем, ул: "Был һабын беҙҙә үҫкән мамыҡтың төш һөйәгенән яһала, ҡаҙаҡтар мамыҡтың иң түбән сортын осһоҙға алып сыға ла, шул сеймалдан ошо һабынды ҡайнатып, Рәсәйгә сығара. Беҙҙә бындай һабынды һәр ғаилә хужалыҡ кәрәк-ярағында тотоноуға үҙе ҡайната, мин уны бушлай ҙа алмайым", - тип көлдө...

...Икенсе танышым тағы бер селтәрле маркетингҡа саҡырҙы. Уныһына мин ризалашманым, әммә ул Өфөнө белмәгәс (икенсе ҡаланан ине), оҙатышып барҙым. Сауҙа үҙәге артындағы ҙур офиста йыйылғайны халыҡ. Килеп инһәм, спикер булып республикабыҙҙа билдәле йырсы ханым телмәр тота. Таҡтаға һыҙып тороп аңлата. Мине танып, ихлас ҡаршыланы, күрештек, сәй ҙә эсерҙе, хатта йырлап та күңелде асты. Уның сығышынан билдәле булыуынса, күпмегә тиҙерәк байырға теләйһең - шул тиклем, мәҫәлән, 60, 120, 320 мең һум сумма индерергә кәрәк ине был компанияла ағза булыр өсөн. Йырсы ханым миллионға яҡын индергән (дөрөҫ булһа инде), айына йөҙ меңгә яҡын килем алып тора, имеш. Ҡыҫҡаһы, минең менән барған танышым "аҡса эшләргә" өйрәнергә ҡалды, мин ҡайтып киттем. Был эштең аҙағы шулай: танышым 600 меңдән ашыу кредит алып, селтәрле маркетингҡа һалған, икеөс ай килем алған һәм... әпәт вәссәләм. Лекцияны тыңлап ҡайтҡас та мин уға: "Әгәр улайтып ҡына аҡса эшләп йәшәп ятып булһа, халыҡ эшләмәҫ, байҙар эш урындарына түләп тормаҫ, банктар тик шул системаны ҡулланыр ине",- тип аңлатып ҡараным, әммә танышым аңларлыҡ хәлдә түгел ине. Бөгөн ул инде йылдан ашыу айына 16 мең кредитын түләй. "Башҡортостандың атҡаҙанған артисына мөрәжәғәт ит, ул нисек аңлата һине алдарға ярҙам итеүен", - тип ҡарайым, "Ул үҙе лә шул хәлдәмен, ти" - тип илаулай ғына. Быныһы шулай...

...Бөгөн Башҡортостан менән Ҡаҙағстан халҡы круиз клубына мөкиббән киткән. Ҡарап торһаң, барса халыҡтың бөтөн йәшәү маҡсаты ана шул лайнерҙа йөҙөүгә генә ҡайтып ҡалған һымаҡ. Урамда осраған таныштар ҙа, шылтыратҡандары ла, махсус күрешеү тәҡдим итеп килгәндәре лә, ә инде интернет аша өндәшеүселәрҙе әйтеп тә тормайым, шул круизға ҡушылырға өгөтләй. Уҡытыусылар, артистар, яҙыусылар, тәрбиәселәр, эшлеләр, эшһеҙҙәр... барыһы ла ҡапыл ғына "аҡса эшләргә" һәм һиңә "ярҙам итергә" теләй. Барыһы ла круиз компанияһының уңышлы булыуына һәм киләсәктә... донъя бөткәнгә тиклем... әлеге лайнерҙарҙың океандарҙы, диңгеҙҙәрҙе айҡап йөҙөп йөрөрөнә гарантия бирә. Ә ысынында улар үҙҙәренән алда был селтәрле маркетингҡа инеүселәрҙең һөйләгәнен генә тәкрарлай, компания хаҡында ла, был пирамида системаһы тураһында ла мәғлүмәтле түгелдәр. Яуыз уй менән түгел, ә үҙҙәре лә аңламаҫтан, нәфсе ҡотҡоһона бирелеп, бар таныштарын шул уҡ ышаныслыҙ юлға этәрә...

Лайнерҙар ысынлап та бар, уларҙа бер ниндәй селтәрле маркетингҡа аҡса һалмайынса ла ял итергә, сәйәхәт ҡылырға була. Унан һуң, был компанияның Рәсәйҙә вәкиллеге юҡ икәнен дә күптәр белмәйҙер әле. Әгәр һеҙгә ниндәйҙер закон нигеҙендәге эштәр менән турфирмағыҙға мөрәжәғәт итергә кәрәк булһа, бының өсөн АҠШ-ҡа йә Андорраға барырға тура киләсәк. Ә унда бөтөнләй икенсе ҡағыҙәләр һәм ҡанундар. Һеҙҙең менән төҙөлгән килешеүҙә компанияның адресы - бер, ә Халыҡ-ара круиз линиялары ассоциацияһында бөтөнләй икенсе адрес күрһәтелә. Круиз лайнерҙары круиз компанияларына ҡарай, ә круиз компаниялары пирамида эсендәге йөҙәрләгән-меңәрләгән аралашсы кешеләр аша эшләмәй, ә йүнәлтмәләрен туранан-тура үҙе һата ала. Һеҙ индергән беренсе сумма долларға түгел, ә круиз валютаһына әүерелә. Әммә был валюта бер ерҙә лә "валюта" булараҡ теркәлмәгән. Уның бер ниндәй ҙә ҡиммәте юҡ, инвестиция булып иҫәпләнмәй. Был уйлап сығарылған аҡса ҡиммәте. Артабан айлыҡ түләүҙе ай һайын индереп барырға кәрәк, әгәр һуңлатһаң, был клубта ағзалығың юғала. Ә инде үҙ иркең менән ағзалыҡтан сығып китәм тиһәң - ана бара юлың, тик инде бер тинһеҙ китәсәкһең. Индерелгән суммалар кире ҡайтарылмай. Ысынында улар шунда уҡ пирамида ойоштороусыларҙың кеҫәһенә инеп китә лә инде. Ә һин был уйында алдаҡ валюталар менән генә уйнап йөрөнөң. Рәсәй журналистары, эҙәрмәндәре, алданған кешеләр күптән был пирамиданың асылын тикшереп һалды инде, әммә беҙҙең яҡтарға (беҙҙең республика) аныҡ мәғлүмәт килеп етмәй әле. Шулай уҡ ҡаҙаҡтарға ла. Улар ҙа әлеге пирамидаға күпләп тығылған...

Мин был круиз фирмаһы ойошторған форумға ла, аңлайым, тыңлап ултырайым әле, тип барҙым, таныштарым үҙҙәре түләп өгөтләп саҡырғайны. Фойела оҙаҡ ҡына килеүселәрҙе күҙәтеп ултырҙым. Күптәре йөҙгә таныш. Ябай хеҙмәтсән, эшсән халыҡ. Береһе лә бизнесмен да, шәхси эшҡыуар ҙа түгел. Саҡ ҡына йылдамыраҡ һәм йышылғаныраҡтары бәләкәй пирамида "башлығы" икәне күренеп тора. Улар үҙ "өйөрҙәре" өсөн йүгереп йөрөп урынын табыша, урынлаштыра, һыуын-кәрәген алып килеп хәстәрләп йөрөгән була. Шулайтмай һуң, ул бит быларҙың һәр береһенән процент ала! Унан сәхнәгә сығып һөйләүселәр үҙҙәренең круиздағы тәьҫораттары менән бүлеште. Бер үк һүҙҙәр, фразалар ҡабатланды: мөһабәт лайнер, шәп номерҙар, бассейндар, музыка, йомшаҡ түшәктәр, иртәнге аш, төшкә табын, киске банкет... Хор менән ҡысҡыртыуҙар, хор менән яуаплатыуҙар, эйфорияға индерелгән халыҡтан дәлилләүсе һүҙҙәр әйттереүҙәр, ураған һайын "һеҙгә оҡшаясаҡ", "һеҙ бәхетле буласаҡһығыҙ" тигән һымаҡ фразалар ташлау, ҡыҙыҡһындырыу - былар барыһы ла ныҡышмай ғына өгөтләү алымдары. Һине аҡса эшләргә, байырға һәм шул уҡ ваҡытта "бушлай" ял итеп йөрөргә өгөтләп торалармы һуң? Кем әйтмешләй, бушлай сыр шул сысҡан тотҡоста ғына инде...

Компания әле дүрт йыллап ҡына эшләй һәм уның тағы ла күпме "йөҙөп йөрөрө" билдәһеҙ. Йылғырҙар аҡса эшләп тә өлгөрөр, алданыусылар ҙа, урталыҡта ҡалыусылар ҙа булыр. Шулай ҙа халыҡтың ҙур өлөшө бында өҫтәгеләргә аҡса йыйыусы ғына булып сығасаҡ. Бөтә пирамидаларҙағы кеүек үк. Ә ябай халыҡты өгөтләп, ҡыҙыҡтырып әүрәтеүселәр йән тәсмән булып был эштең иң тапҡыр һәм уңышлы юл икәнен иҫбатлар. Бында ла эшләп, тир түгеп табыла мал, тиер. Ысын, ҡарап торһаң, улар шул тиклем айбарланып яҡлай ҙа ул пирамидалар данын, әйтерһең, ата-бабаһының намыҫын һаҡлай. Ә нәфсе тигән нәмә үҙенекен итә - әҙәм балаһын ул арбай, күҙен быуа...

**Миләүшә ҠАҺАРМАНОВА.**

✓ *Бына беҙҙе айырған ара ун аҙымлап ҡына ҡалды. "Урман докторының" үҙенсә матур ғына сыбар ҡаурыйҙары, сем ҡыҙыл күркәм "түбәтәйе", хатта аптырау тулы төймәсек ҡара күҙҙәре хәҙер ап-асыҡ күренә.*



*Иҙрис НОҒОМАНОВ*

# ҺУНАРСЫ ЯҘМАЛАРЫ



## ИЛГӘҘӘК ҠОШСОҠТАР

Яҙ йылы яҡтарҙан ҡайтҡан ҡоштар араһында иң көтөп алғаны - йылғыр ҡарлуғастар. Хәйер, ҡарлуғастарҙы һағыныусы бер мин генә түгелдер. Ни өсөн тигәндә, ҡарлуғас менән ысын йәй килә, ләйсән ямғырҙар яуа. Йылы ел иҫеп, шифалы ямғыр һибәләп үттеме - бар донъя күҙ алдында танымаҫлыҡ булып үҙгәрә лә китә. Унда-бында ышыҡ урындарҙа, тәрән үҙәктәрҙә күренгеләгән ҡар ҡалдыҡтары бөтөнләй юҡҡа сыға, йәш үлән йылдам күтәрелеп ер өҫтө йәшәрә, йоҡоларынан арына алмай торған ағастар ихласлап япраҡ яра башлай, сәселгән иген тиҙерәк шытып сыға. Игенсегә ҡыуаныс өҫтәлә. Шулай булғас, ҡарлуғастар бар мөхитте үҙгәртә түгелме? Үҙгәртә шул. Һәр хәлдә, миңә шулай тойола.

Ҡарлуғас - ауылда һәр кем өсөн ҡәҙерле, көтөп алынған ҡошсоҡ. Уның үҙ ҡураһына, ҡыйығының аҫтына йоморо ғына, йәтеш кенә итеп оя ҡорғанын кем теләмәй икән? Юҡ ундайҙар. Беҙҙең дә үҙ ҡарлуғастарыбыҙ бар. Эйе-эйе, үҙ ҡарлуғастарыбыҙ, тип һис ҡурҡмайынса әйтә алам. Сөнки меңәр саҡрым арауыҡта ятҡан илдәрҙән, ете диңгеҙ аша үтеп, һис юл яҙлыҡтырмайынса йылдың-йылы һағындырып ҡына нәҡ беҙҙең ҡураға килеп етәләр. Мин уларҙың нисек итеп юлды табыуҙарына, нисек аҙашып китмәүҙәренә хайран ҡалам. Миңә ҡалһа, беҙҙең ҡарлуғастар ише илгәҙәктәре, наҙлылары һәм яғымлылары башҡаса юҡтыр. Беҙ уларҙы хатта тауыштарынан, ҡылыҡтарынан танып беләбеҙ. Беҙҙең өй ҡарлуғастары үҙҙәре бер төрлө.

Көндәр тотороҡло йылынып, һауала һәр төрлө бөжәктәр оса башлау менән килеп етәләр ҙә улар, лапаҫ аҫтына һыуҙа сыланған балсыҡтан, йә мәтенән оя йүнләргә тотоналар. Сыйырсыҡ кеүек, уларҙы әҙер өй ҡаршы алмай. Шуныһы ғәжәп, ҡарлуғастар бер ваҡытта ла иҫке ояларын файҙаланмай, йыл да яңыһын төҙөйҙәр. Үәт егәрлеләр! Ояларҙың һанына ҡарап, ҡошсоҡтар һинең ҡурала нисә йыл йәшәгәндәрен дә белергә була.

Мин ҡарлуғастарҙың арыу-талыу белмәй осҡандарын ҡарап торорға яратам. Бына, исмаһам, осоу оҫталары! Асстар! Көнөҙөнө ял итмәйенсә осоп йөрөргә һәләтлеләр. Белгегеҙ килһә, мәтене лә осоп барған килеш эләктереп алалар, осоп барған килеш кенә һыуҙа сылаталар. Ҡарлуғасты башҡа бер ҡош та ҡыуып етә лә, тота ла алмай. Хатта йәшен тиҙлеге менән осҡан ягалбай ҙа уның янынан битараф ҡиәфәттә үтеп китә. Сөнки белә: барыбер эләктерә алмаясаҡ, ниһәнә ваҡыт әрәм итергә.

Әйтелгәндәргә өҫтәп, ҡарлуғастар сикһеҙ ҡыйыуҙар һәм иҫ китмәле батырҙар. Бер ҡош та ояларына яҡынлашырға баҙнат итмәй. Ҡош нимә, ауыҙ бесәйҙәр ҙә уларҙан шөрләй. Һауала ҡарлуғас сырҡылдауы ишетелеп ҡалдымы, бесәйең тиҙерәк шылыу яғын ҡайыра. Шулай, балаларын ҡурсалап, үҙҙәренән күпкә ҙур, күпкә көслө дошмандарына ла йән аямай ташланалар. Ҡарлуғас булған ҡураға һайыҫҡан, ала ҡарға ише ҡараҡтар яҡынларға ҡыймай. Тимәк, улар ҡураны ла һаҡлай булып сыға. Ғәжәп ҡошсоҡтар ифрат файҙалылар ҙа.

Ауыл ере өсөн ҡарлуғас - үҙе бер айырым ҡош. Илгәҙәклек, яғымлылыҡ, ҡыйыулыҡ һәм эшһөйәрлек буйынса уға еткәне башҡаса юҡ. Ҡарлуғас - изге ҡош - наҙ, һөйкөмлөлөк, тоғролоҡ өлгөһө. Улар парҙарына бер ваҡытта ла хыянат итмәй. Матур, иркә ҡыҙҙарын әсәйҙәр юҡҡа ғына: "Ҡарлуғасым минең", - тип һөймәйҙер. Бер ҙә сыйырсығым, йә турғайым тимәйҙәр. Ни өсөн тигәндә, сыйырсыҡ матур һайраһа ла - ҡырыҫыраҡ, ә турғай тартымһаҡ булһа ла - күрер күҙгә күрекһеҙ генә.

Тағы ла ҡарлуғастарҙың үҙҙәре кеүек үк тиктормаҫ балалары йыш ҡына ояларынан ҡолап төшөүсән. Шуға күрә уларҙы ҡарап ҡына торорға, йығылғандарын, йыртҡыс тырнағына эләкмәҫ борон, күтәреп һалырға кәрәк. Миңә был изге эште йыш ҡына башҡарырға тура килгәне бар. Ана шул изгелекте лә аңлай улар. Дөрөҫ, өлкән, тәжрибәле ҡарлуғас бәләкәстәрен тәпәйҙәренән ат ҡылы менән ояһына бәйләп ҡуя. Үҙем күргәнем бар. Шулай ҙа ҡайсаҡ, ҡыл сиселеп, сыпсыҡтар йығылып төшкөләй. Ҡай берҙәре һәләк була. Ләкин бындай осраҡтар һирәк, әммә булғылай.

Ә ҡарлуғастың төнгө йырын ишеткәнегеҙ бармы? Күптәрҙең юҡтыр. Эйе, эйе, балалары әле сыҡмаҫ элек ул төндәрен дә йырлай. Һандуғас һымаҡ. Һандуғастан айырмалы рәүештә ул осоп барғанда ла һайрай ала. Ҡарлуғастың төнгө йыры айырата моңло һәм серле. Мин шуныһына аптырайым: май, июнь айҙарының күҙгә төртһәң күренмәҫ дөм-ҡараңғы төндәрендә ҡунып һайрар тимер сымдарҙы нисек итеп таба ул? Күҙҙәренең үткерлеге шул тиклемме?

Ҡарлуғастар менән хушлашыуы бигерәк ауыр. Көҙ миҙгеле етеп, һуңғы йәшен менән бергә йылҡылдап торған сөм-ҡара һыртлы, селт-аҡ сикәле, алһыу күкрәкле, асалы ҡыл ҡойроҡ шаян ҡарлуғастар ҙа йылы яҡтарға китеп бөтһә, ауыл ҡапыл ғына етемһерәп ҡалғандай була. Ауыл кешеһе ҡарлуғасһыҙ буш һауаға ҡарап, күңелһеҙ генә көрһөнә, аҙаҡ, йылы хәтирәләргә бирелеүҙән йылмайып ҡуя.

## ИПЛЕ ТУМЫРТҠА

Бөгөн мин көтөүсе. Тейешле сират буйынса ауылдың кәзә-һарығын көтөргә сығам. Сират буйынса, тиһәм дә, был эш минең өсөн мәжбүри түгел, ошо көндө йөрәкһенеү ҡатыш түҙемһеҙлек менән үҙем көтөп алам. Шуғалырмы, бәғзе берәүҙәрҙең көтөүҙән ҡасыу өсөн ҡырҡ сәбәп эҙләүен, үҙ малын һис көтәһе килмәгәнлеген аңлай алмайым. Малды ҡарарға теләге булмағас, ниһәнә торорға?

Минең өсөн был көн мал-тыуарға ҡарасы ғына булыу түгел, йәй миҙгелендә эләккән бәләкәй генә ял да. Эйе, эйе, ысын мәғәнәһендә ял. Сөнки утыҙ йылдан ашыу эшләп тә бер ваҡытта ла йәй көнө отпуск алғаным булманы. Бирмәйҙәр. Мин, тимәк, алыштырғыһыҙ кеше.

Тирә-яҡ тәбиғәт, тыуған ерең менән яҡындан аралашыу өсөн мал көтөүҙән дә уңайлыраҡ ысул юҡтыр ул. Кемгә нисектер, әммә миңә шулай һымаҡ. Кәзә-һарыҡ артынан эйәреп йөрөү генә түгел, замана ығы-зығыһынан, бөтмәҫ-төкәнмәҫ донъя ваҡлыҡтарынан, ниһайәт, йәшәйеш мәшәҡәттәренән бер аҙға ғына булһа ла тынсып ҡалаһың бит ул көтөүҙә. Үҙенең бер ауырлығы ла юҡ кеүек. Шулай, ваҡ малды көтөүе анһат. Хайуанҡайҙар ауылды сығып, саңдауға еткәнсе байтаҡ ер һәрмәнеп бара һәм шул етә: буйтым туя ла ҡуя. Тамағы туйҙымы, кәзәң дә, һарығың да, бәйләнсек күгәүен менән себендән, эҫе көндәрҙә ҡайнар ҡояштан һаҡланыу яғын ҡайыра башлай. Бының иң уңай ысулы ағас күләгәһенә инеп, саңы әйләнеп бөткән ергә ятыу. Ә бер ятып алдылармы, уларҙы урындарынан тиҙ генә ҡуҙғатырмын тимә. Бөгөн дә шулай булды.

Бына мин азаттарҙың да азаты! Бер кем бимазаламай, тегеһен-тегеләйт, быныһын-былай ит, тип, бер кем ҡолаҡ төбөндә безелдәп тормай (ошондай мәғәнәһеҙ мыжыҡ холоҡлолар минең иң яратмаған бәндәләрем. Үҙҙәре лә эшләмәй, кешегә лә эшләргә ҡамасаулап, ирек бирмәй. Бәхетһеҙлеккә күрәме, ундайҙар тормошомда йыш осраны). Унда-бында аушанлап ауа башлаған туҡ малҡайҙар хәҙер инде өс сәғәттән дә кәм ял итмәйәсәк.

Тоҡсайымды яртылаш сереп тарҡала башлаған йыуан ҡайын төпһәһе янына уңайлап урынлаштырҙым да, ҡулымды түш кеҫәмә тыҡтым. Бына һиңә мә, шыйыҡ мейе! Иғтибарҙы йәлеп иткәндәй, ул-был ваҡиғаларҙы теркәп барыу өсөн тотҡан блокнотым да, уның эсендәге ҡәләме лә онотолоп ҡалған, хәйерһеҙ. Кейемде алмаштырғайным бит. Үкенестән тубығыма һуғып ҡуйҙым. Тик эш уҙған, кире ҡайтып булмай, алыҫ. Үҙем шулай уйлаһам да, күңелдең ҡайһылыр мөйөшөндә хатта йәшертен ҡыуаныс тойғоһо ҡуҙғалып ҡуйҙы һымаҡ: ҡағыҙға текәлеп ултырғансы, уның ҡарауы, туйғансы күҙәтәсәкмен дә баһа! Күргәндәрҙе аҙаҡ иҫкә төшөрөүе ауыр булмаҫ. Арҡамды төпһәгә терәп, үләнгә ултырҙым.

Йәнәшәләге осо һынған туҡыш ҡарағас төбөндә тиктормаҫ тумыртҡа туҡылдағаны ишетелә. Бар тырышлығын һалып бер урынды суҡый-суҡый ҙа ул, ҡапыл ғына һикереп, ситкә, икенсе урынға күсә. Унда күпмелер соҡсонғандан аҙаҡ өҫкәрәк күтәрелә биреп, йәнә суҡырға тотона. Ахырҙа, тәүге урынына кире әйләнеп ҡайта. Ҡоштоң шулай, һис яңылышмайынса өсмөйөш яһап әйләнеүе сираттан бер нисә тапҡыр ҡабатланғандан һуң, ҡыҙыҡһыныуымды еңә алмайынса, урынымдан тороп, уға яҡынлаша башланым. Тәбиғәттең бер йәтеш һәм кире ҡаҡҡыһыҙ ҡануны бар: ҡыр йәнлеген ҡурҡытмай-өркөтмәй генә мөмкин тиклем яҡыныраҡ киләм тиһәң, уға тура ҡарама һәм тура барма. Ҡыҫҡаһы, күрмәмешкә һалыш.

Күҙ ҡыры менән генә күҙәтә-күҙәтә, спираль буйынса ҡарағасҡа яҡынлашам. Мин ағас тирәләп әйләнгән ыңғайға тумыртҡа ла олон буйлап әйләнә. Ул да мине һис күҙҙән ысҡындырмай, ныҡ күҙәтә, шилма! Хәйер, шунһыҙ булмайҙыр ҙа, ҡырағай тәбиғәт ҡанундары ҡаты, саҡ ҡына һаҡһыҙ ҡыландыңмы... Шуныһы ҡыҙыҡ, суғыртмаҡлы олон буйлап һикерәнләгән ыңғайға тумыртҡа баяғы урындарҙы суҡып алырға ла өлгөрә. Шул тиклем нимә тапҡандыр инде?

Бына беҙҙе айырған ара ун аҙымлап ҡына ҡалды. "Урман докторының" үҙенсә матур ғына сыбар ҡаурыйҙары, сем ҡыҙыл күркәм "түбәтәйе", хатта аптырау тулы төймәсек ҡара күҙҙәре хәҙер ап-асыҡ күренә. Мин уның шул тиклем тырышыуының серенә төшөнә лә башланым, буғай. Тумыртҡа дәү ҡарағас олоно суғыртмаҡтары араһына йәтешләп кенә тубырсыҡтар ҡыҫтырып ҡуйған да, ғәжәп көйлө сират менән шуларҙы сира икән. Өс ярыҡта -өс тубырсыҡ. Ә ни эшләп, һис яңылышмайса, сиратлап суҡый? Быныһын әлегә аңлатырлыҡ түгел.

Мин аңшайып торған арала эшлекле ҡошсоҡ бер тубырсыҡты урынынан алып ырғытты ла, йәһәт кенә табып, икенсеһен урынлаштырҙы. Шулай ҙа суҡыу сиратын боҙманы. Хатта йәшертен асыу менән ныҡышыбыраҡ суҡырға тотондо.

"Балалары сыҡҡан осор бит, - тип фекер йөрөттөм мин, - ашарға ем күп кәрәк. Шуға күрә өтәләнеп-өтәләнә тумыртҡа, етеп килгән кешегә лә иғтибар итмәй. Тирә-йүндә ҡоларға әҙер серек ҡайын тулып тора, уның ҡортон сүпләүе күпкә еңелерәк, ниңә шуның менән булышмаҫҡа?" Бында ниндәйҙер хикмәт бар кеүек. Аҙаҡ белдем, ҡарағас орлоҡтары тәмлерәк тә, туҡлыҡлыраҡ та икән. Йәғни, калория тигән нәмәһе күберәк. Уны ашаған ҡошсоҡтар тиҙерәк үҫә, төрлө сирҙәргә бирешә һалып бармай. Өҫтәүенә, ризыҡ аралаштырыу ҙа кәрәктер. Сөнки бер төрлөһө ялҡытып китә. Белмәгәне юҡ икән "докторҙың".

Ошо мәл аяҡ аҫтымда сарт итеп ҡыу ботаҡ һынды. Тертләгән тумыртҡа пырылдап осоп китте. Осоп барған көйөнә бер-икене саңҡылдап ҡуйҙы. Ризаһыҙлыҡ белдереүе ошо ине шикелле. Мин уның үҙ иткән ҡарағасы янына килдем. Бына яртылаш сирылып ҡабарған тубырсыҡтар. Уларҙы ҡулыма алдым да, ҡойолорға әҙер ҡанатлы орлоҡтарҙы усыма ҡаҡтым. Ҡабып ҡарайым. Әскелтем генә икән, үҙенсәлекле сайыр тәме килә. Кемдең ҡарағас һағыҙы сәйнәгәне бар, улар шунда уҡ аңлар. Баҡһаң, ҡарағас орлоғон тиккә генә яратмай икән аҡыллы баш тумыртҡа.

Уның тубырсыҡ "эшкәртеү станогы" ҡулай ғына ине. Үҙемде тумыртҡа урынына ҡуйып, мин дә шундайын эҙләп ҡарайым. Меңәрләгән суғыртмаҡ араһынан берәүҙе лә таба алманым. Күпмелер торғандан һуң, ниһайәт, башыма барып етте: әлеге уйымдарҙы тумыртҡа үҙе яһамаймы икән? Үҙе яһай шул! Ана, уңайлы станоктарҙың сит-бото, хатта, йышып ҡуйылғанмы ни! Берәй оҫта үткер бысаҡ менән юнып тигеҙләгән тиерһең. Юҡ, улай-былай ғына оҫтаң да был тиклем матур, теүәл итеп эшкәртә алмаҫ ине, моғайын. Ә тумыртҡаның бит бысағы ла, ҡасауы ла, башҡа махсус ҡорамалы ла юҡ. Бар ҡоралы суҡыш ҡына!

Тубырсыҡтарҙы урындарына ҡыҫтырҙым да, ситкә киттем. Артабан ни эшләр икән был? Йүнсел ҡош әллә шатлығынан, әллә асыуын белдереп, яңғырауыҡлы саңҡ.. саңҡ... ҡысҡырып, ҡарт ҡайын олонында бер-аҙ урањғыланды ла, ҡарағасҡа кире осоп килде. Теге мин тотҡан яртылаш буш тубырсыҡтарҙың өсөһөн дә киҫкен хәрәкәттәр менән алып ырғытты ла, урындарына, бер үҙенә генә оҡшағандарын һайлап, яңыларын беркетте. Күренеп тора, тумыртҡа нимәгәлер ныҡ асыулы ине. Ул ҡабалан-ҡарһалан элекке кәсебенә тотондо. Мин тағы уйға ҡалдым: "Ҡайҙалыр, урман төпкөлөндәге ағас ҡыуышында, ҡоро мүк түшәлгән йылы, ышыҡ ояларындағы балаларын "аяҡҡа баҫтырыу", дөрөҫөрәге, ҡанаттарына күтәреү өсөн күпме тубырсыҡ эшкәртергә, күпме орлоҡ йыйырға кәрәк. Ә мин уға ҡамасау яһап йөрөйөм. Шунан асыуланмай нисек итәһең".

Эйе, ҡайҙалыр уны, ас булмаһа ла, ғүмерҙә туймаҫ оңҡот себештәре көтә, уның ваҡыты тар, уға ашығырға кәрәк. Көҙ етеп килә. Ҡара, ана, бала бағам, тип нисек өйөрөлә тумырҡа, ҡайһылай етеҙ эшләй! Эшләгән арала ян-яғына ҡаранып алырға ла онотмай: берәй хәүеф-хәтәр янамаймы, йәнәһе. Йүнсел дә, ипле лә ҡош икән, бөтәһенә өлгөрә. Минең баштан ҡыҙыҡлы ғына уй-теләк үтә: "Кешеләрҙең барыһы ла шул тумыртҡа ише булһа икән..."

**(Дауамы бар).**

ЙОЛА СЦЕНАРИЙЫ

# БЕСӘНГӘ ТӨШӨҮ



## Беренсе күренеш

*Сәхнә биҙәлеше - тәбиғәт ҡосағы кеүек. Төйөнсөктәр, салғылар тотҡан өмәселәр йырлап инә.*

**Хужа:** Көн салт аяҙ. Ҡоштар һайраша. Үләндең бешкән мәле. Башҡорт ауылдарында борондан һаҡланып килгән йолаларҙың береһе "Бесән өмәһе". Элек, беләһегеҙ, туғантыумаса өмәләп бер-береһенә бесән эшен башлашып ебәрер булған, бергәләп йолаһын атҡарып, теләктәр теләп, күмәкләп бесәнгә төшкәндәр. Шуға ла **"Бесән эше - дәррәү эше"** тип әйткәндәр. Бына беҙ ҙә Аллаға тапшырып, бесән өмәһенә сыҡтыҡ.

**Өмәселәр йырлай:**
Йәйҙәр етте, киң яландар
Гөл-сәскәгә күмелде.
Гөл-сәскәгә күмелде,
Зәйнәбем, Зәйнәбем,
Гөл-сәскәгә күмелде,
Зәйнәбем, Зәйнәбем!
Бесән өстө күңелле,
Елкендерә күңелде.
Елкендерә күңелде,
Зәйнәбем, Зәйнәбем!
Елкендерә күңелде,
Зәйнәбем, Зәйнәбем.
Зәйнәп, ҡайҙа бараһың,
Зәйнәп, ҡайҙа бараһың,
Нурбикәгә бесәнгә,
Зәйнәбем, Зәйнәбем.
Нурбикәгә өмәгә,
Зәйнәбем, Зәйнәбем.

*Ҡатындар төйөнсөктәрен ситкә ҡуя, салғыларын алып эшкә әҙерләнә.*

**Хужа:** Һаумы, Рәз ташым! Һаумы, Сандыҡҙәгем! Һаумыһығыҙ, зөмрәт үләндәрем! Һаумы, ҡыуышым! Ни хәлдәһең? (Өмәсе иргә.) Йәле, ҡорҙаш, бына һиңә йомортҡаның ағы, ә миңә - һарыһы. Һарыһы- ул көн аяҙына, көн сыуағына булһын!

*Йомортҡаны ваҡлап үләнгә һибә.*

**Өмәсе ир:** Ағы инде үләнгә, үләндәге бөжәктәргә булһын!

**Ҡатын:** Ә ҡабығы ергә, ер ҡабына ятһын! Бисмиллаһи-рәхмани-рәхим! Аллаһү-әкбәр!

**Хужа:** Әйҙәгеҙ әле, туғандар, салғыларҙы янып алайыҡ. Май кеүек сабып үтһен.

*Бөтәһе лә салғы яный.*

**1-се ҡатын:**
Бесәндектә үлән бешкән,
Инде саба баштайыҡ.
**Ҡатындар:**
Баштайыҡ шул, баштайыҡ.
**2-се ҡатын:**
Таң һарыһы үтеп киткән.
Инде саба баштайыҡ
**Бөтәһе:**
Баштайыҡ шул, баштайыҡ.

*(Бөтәһе рәт-рәт тороп теҙелә).*

**3-сө ҡатын:**
Еңел ҡулдан, еңел аяҡтан -
Ике һуҡыр күрмәһен!
Берәү ике күрмәһен!
Күргән уңға юраһын!
Шыйтылдаһын салғыһы.
**Ҡатындар:** Шулай шул. Уң аяҡтан! Эш уңынан!

*Бесән саба башлайҙар. Ҡаҙансы инәй менән Самауырсы инәй инә.*

**Ҡаҙансы:** Өмә ашы тауыҡтан.
**Самауырсы:** Бесән булһын мулыҡтан!
**Ҡатындар:** Шулай шул.

*Ҡаҙансы һәм Самауырсы сәхнә алдына килә.*

**Ҡаҙансы:** Бисмиллалап бесәнсегә тауыҡ һалайыҡ.
**Самауырсы:** Мәтрүшкәләп һәм еләктәп сәйҙәр ҡуяйыҡ.
**Ҡатындар:** Шулай шул.
**Хужа:** Бер һыуһынға етмәҫ салғы. Мә, ҡорҙаш, тапап бирсе!

*Ир кеше салғы тапарға ята.*

**Хужа:** Алдан баштап үҙем төшәм. Минән үтеп киткәндәрҙең үксәһен сабып киҫәм.

*Сабырға төшәләр, бергә йырлайҙар.*

**Бөтәһе:**
Бесәндеккә төштөк әле,
Әйҙә, саба баштайыҡ,
Выжт-выжт, выжт-выжт,
Әйҙә, саба баштайыҡ.
Ең һыҙғанып берҙәм генә,
Әйҙә, эштәп таштайыҡ.
Выжт-выжт, выжт-выжт,
Әйҙә, эштәп таштайыҡ!

*Ир кеше бер баҡуй әйләнеп сыҡҡас, ҡулына гармун ала, ҡатындар "Бесәнселәр" бейеүен башҡара. Бейеү бөткәс, бесән тирәләй йырлап әйләнәләр.*

**Ҡатындар:**
Өмәләрҙән йырлап ҡайтҡан,
Бесәнселәр түгелме?
Һай-һай, һай-һай,
Бесәнселәр түгелме?
Бергә-бергә эшләүҙәре,
Күтәрә шул күңелде.
Һай-һай, һай-һай,
Күтәрә шул күңелде.
Самауырың ҡайнағанмы?
Бесәнселәрең ҡайтты,
Тауығың бешкәнме, еңгә?
Ҡарыныбыҙ асыҡты!
**Ҡаҙансы:** Әйҙүк, әйҙүк! Ашҡа рәхим итегеҙ!

*Ҡаҙансы сүмес менән сәүәтәгә һуғып ашҡа саҡыра, уға Самауырсы ҡушыла.*

## Икенсе күренеш

*Бесәнселәр ашҡа ултыра. "Самауыр бейеүе" башлана.*

**Самауырсы:**
Урманда сәй тәмле була
Шифалы үлән менән.
Йәнгә сихәттәрен бирә,
Эсһән дуҫтарың менән.
Самауырҙы тиҙ ҡайната
Ҡайын ағас күмере;
Сәй ҡайнатҡан еңгәләрҙең
Оҙон булһын ғүмере.
Бейе, әйҙә, бейе, әйҙә,
Бейегәнең күрһендәр.
Бейегәнең күрһендәр ҙә
Матур баҫа, тиһендәр.

**Хужа:** Тамъян ырыуының иң бай кешеһе булған минең бабам. Бына ошо Сандыҡҙәктә меңәрләгән йылҡыһын, һыйыр-һарығын саңдауҙа тотҡан ул. Быуындан-быуынға күсә килгән ата-бабам бесәндегендә үлән быйыл да уңған. Ана, ҡайһылай ята ҡабарып.

*"Сандыҡҙәк" йырын башлап ебәрә, йәйлап уға йәш ҡатын ҡушыла. Ҡатындар табындан тора, төйөнсөктәрен тотоп алғы планға килә, алъяпҡыстарын сисеп тубыҡланалар. Баштарындағы яулыҡтарын сисеп, яҙып ябыналар, төргәктәренән һаҡалдарын алып кейәләр. Йыр бөтөүгә аяғөстө баҫалар, ҡулдарын күкрәк тирәһендә тоталар. Милли оранға әҙерлек.*

**Хужа:** Һай, яратам да инде ошо ерҙәрҙе, бесәндегемде, Сандыҡҙәгемде! Ошо хозур ерҙәребеҙгә хужа булырға теләүселәр күбәйгәндән-күбәйә бит. Әгәр ҙә ошо ерҙәребеҙҙе сит ҡулдарҙан һаҡлап алып ҡалмаһаҡ, киләсәк быуындарға ни ҡалыр һуң?

**Ҡатын:** Ил инәләре! Еребеҙҙе бирмәйек, һаҡлайыҡ!
**Бөтәһе:** Беҙ быға юл ҡуймайбыҙ!
**Ҡатын:** Телебеҙҙе, милләтебеҙҙе, мәҙәниәтебеҙҙе юғалтмайыҡ!
**Бөтәһе:** Беҙ быға юл ҡуймайбыҙ!
**Ирҙәр** *(әйтеш башлай)*:
Бер тигәс тә, ни яҡшы?
Берҙәм булған ил яҡшы!
Ике тигәс тә ни яҡшы?
Иле булған ир яҡшы!
Өс тигәс тә ни яҡшы?
Өләшә бар ул яҡшы!
Дүрт тигәс тә ни яҡшы?
Дәүләте бар ил яҡшы!

**Бергә:** Һа-а-а-а-а-а-а-й!
Атам кейәү булған ер!
Әсәм килен булған ер!
Кендегемде киҫкән ер!
Тыуған илем, тыуған ер!

**Ҡатындар** *(әйтеште дауам итә)*:
Бер тигәс тә ни яман?
Берҙәм булмаҫ ил яман!
Ике тигәс тә ни яман?
Иле булмаҫ ил яман!
Өс тигәс тә ни яман?
Дәүләте юҡ ил яман!
Һа-а-а-а-а-а-а-а-й!

**Бергә:** Өләшелгән тыуған ер,
Өнһөҙләнгән тыуған тел,
Килмешәктәр тулған ил,
Ау! Тыуған ил, тыуған ер!

**Ирҙәр:** Ни яҡшы ла, ни яман?
Аңламаһаң, шул яман.
Ни яҡшы ла, ни яман?
Күрә алмаһаң, шул яман.

**Бөтәһе:** Ни яҡшы ла, ни яман?
Ни яҡшы ла, ни яман!?
Һа-а-а-а-а-а-а-а-й!..
Өләшелгән тыуған ер,
Өнһөҙләнгән тыуған тел,
Килмешәктәр тулған ил,
Ау, туған тел, тыуған ил!
Атам кейәү булған ер!
Әсәм килен булған ер!
Кендегемде киҫкән ер!
Һа-а-а-а-а-а-а й!
Тыуған илем, тыуған ер!..

*(Ҡатнашыусылар аяҡка баҫа, матур көй яңғырай.)*

**Сәгирә ҒӘЛИУЛЛИНА.**
**Белорет районы Шығай ауылы.**
**Баҫмаға Сәрүәр СУРИНА әҙерләне.**

ФӘҺЕМЕ БАР КИТАП



# НӘФСЕ. ЙӨРӘК. РУХ.

## Йөрәк

**12.** Йәшәйеште аңлау тик йөрәккә хас сифат. Йөрәген тоймаған кеше йәшәйеште лә аңлай алмай, ул бары аңлағанға һалыша ғына

**13.** Рухилыҡҡа өлгәшеүсе йөрәк. "Тоғроларҙың йөрәге - рух. Ундай йөрәккә нәфсе килеп инә икән, рух ҡорған артына йәшерәнә", тигән Мансур Ибн Аммар.

**14.** Аллаһы Тәғәлә дуҫының йөрәге - Илаһи серлелек өлкәһе. "Йәшәйеште һәм донъяны яратҡан кешенең йөрәгендә Аллаһы Тәғәлә үҙ серҙәрен һаҡламай, улар ундай кешегә һәр саҡ асыҡ була", тигән Джунайд.

**15.** Йөрәкте һаҡлау. Йөрәк ике юл менән һаҡлана: ысынбарлыҡ юлы менән һәм Аллаһы Тәғәлә тарафынан.

**16.** Йөрәк юл күрһәтә. "Тик йөрәк кенә теләктәргә һәм нәфсегә юлды яба ала, ул һинең башлығың һәм уҡытыусың. Һине тауышың теле түгел, йөрәгең теле саҡырып торорға тейеш. Ундай саҡта кешенең теле тукталырға, йөрәгә генә телгә килергә тейеш, тик киреһенсә түгел", тигән Әбү Бәкер Үәсити.

**15.** Йөрәкте һаҡлау. Йөрәк ике юл менән һаҡлана: ысынбарлыҡ юлы һәм Аллаһы Тәғәлә ярҙамы менән.

**16.** Йөрәк юл күрһәтә. "Тик йөрәк кенә теләктәргә һәм нәфсегә юлды яба ала, ул һинең башлығың һәм уҡытыусың. Һине тауышың түгел, йөрәк тауышың саҡырып торорға тейеш. Ундай саҡта кешенең теле тукталырға, йөрәгә телгә килергә тейеш, тик киреһенсә түгел", тигән Әбү Бәкер Үәсити.

**17.** Йөрәктең өгөт-нәсихәт уҡыусыһы. "Һәр нәмәнең үҙ өгөт-нәсихәт уҡыусыһы була, йөрәктеке - оялыу", тигән Әбү Али Рудбари.

**18.** Йөрәктең ҡотолоу хәле. "Хеҙмәт итеү - ул йөрәктең ҡотолоу хәле", тигән Шибли.

**19.** Йөрәктең рухи ысынбарлығы. "Йөрәктең өс рухи ысынбарлығы бар: Аллаһы Тәғәләлә юғалыу, уның фатихаһын алыу һәм унда йәшәү", тигән Әбү Хәсән Харакани.

**20.** "Аллаһы Тәғәләне танығандың йөрәге яҡтырып янып тора", тигән Баязит.

**21.** Йөрәк туктауһыҙ хәрәкәттә, бер хәлдән икенсеһенә әйләнә тора. Һәр әйләнеш һайын ул яңы белемгә эйә була, белем иһә яңы ысынбарлыҡ тыуҙыра, ә һәр бер ысынбарлыҡ Аллаһы Тәғәләгә юл һала.

**22.** Йөрәктә меҫкенлек донъяһына алып бара торған теләктәр юҡ.

**23.** Йөрәктең һауығыуы. "Йөрәк өсөн дүрт һауығыу юлы бар: Ҡөрьән уҡыу һәм уның тураһында фекер йөрөтөү, ашҡаҙанды буш тотоу, яҡшы кәйефле булыу һәм таңдан намаҙ уҡыу, изге кешеләр менән аралашыу", тигән Ибраһим Һауас.

**24.** Һөйгәнең ҡулындағы йөрәк. Хараканиҙан йөрәгенең хәле хаҡында һорағандар, ул: "Ҡырҡ йыл буйы йөрәгем минән ситтә йәшәне", - тип яуаплаған.

**25.** Суфыйҙың йөрәге Аллаһы Тәғәлә ҡулында. "Аллаһы Тәғәлә суфыйға йөрәк биргәс, ул уны шундуҡ Биреүсегә кире ҡайтара. Аллаһы Тәғәлә ҡулындағы йөрәккә нәфсе лә, Иблес тә ҡағыла алмай", тигән Рабиға.

**26.** Суфыйҙың йөрәге - Мөхәббәт йәшәгән йорт. Әгәр ҙә йөрәк булмаһа, Мөхәббәт йортон ҡайҙа һалыр ине икән? Әгәр ҙә Мөхәббәт булмаһа, йөрәктең ни кәрәге булыр ине икән?

**27.** Йөрәктең сафлығы. "Аллаһы Тәғәләгә ҡарата яҡшы мөғәмәләлә булғанда ғына йөрәк таҙара, ә тән Аллаһы Тәғәләнең дуҫтарына хеҙмәт иткәндә сафлана", тигән Әбү Хайр Аҡта.

**(Дауамы бар).**

УЙЛЫҒА - УЙ

# ӘХЛАҠТЫ, ИНСАФЛЫҠТЫ...

## рекламаларға кәрәк



Элекке күршем менән һөйләшеү күңелемә тынғылыҡ бирмәй. Күптән осрашҡаныбыҙ юҡ ине. Хәл-әхүәл һорашып, тротуар уртаһында апаруҡ ваҡыт торҙоҡ. Ҡыҙы мәктәпкә барғас, бер-бер артлы ғына ике ул табып, ирен ҡыуандырғанын, өлкәненең быйыл 15-е тулғанын, кесеһенең бишенсене тамамлауын белдем.

- Икеһенең дә уҡыуы яҡшы ғына. Тик ҙурыһының тәртибе борсой, - тине ул. - Үҙенән өс йәшкә өлкән ҡыҙға мөкиббән булды ла ҡуйҙы. Атаһының әйткәнен ҡолағына ла элмәй.

Танышымды ҡыҙҙың йәше, йәғни улынан оло булыуы ғына хафаға һалмаған, әлбиттә. Ай буйы бергә булған йәштәр. Палатка алып, икәүҙән-икәү йылға буйына ял итергә йөрөгәндәр. Ҡыҙҙа аулаҡ булһа, улы уларҙа ҡунып та ҡалған. Тыңлата алмаған әсә, аптырағас, ҡыҙ ауырға ҡалып йәки улы ауырыу йоҡтороп ҡуймаһын тип, һаҡланыу өсөн кеҫәһенә "ҡап"тар һала башлаған. Шулай итеп, "ололар" темаһына етди һөйләшеү урынына проблеманы еңел генә хәл иткән һәм, һаҡланыу сараһын үҙе тәҡдим итеп, яңы 15-ен тултырған улының енси тормош менән йәшәүенә фатиха биргән...

Заманы шулай бит, тип, ҡайһы берәүҙәр әсәнең ҡылығын хуплар ҙа, сөнки бөгөн беҙ енси тәрбиә аҡһаған ҡурҡыныс ваҡытта, икенсе төрлө әйткәндә, "сексуаль революция" сәскә атҡан, әхлаҡһыҙлыҡҡа, боҙоҡлоҡҡа юл асылған дәүерҙә йәшәйбеҙ. Бер енесле ғаилә ҡороуҙар, гей-парадтар - былар бөтәһе лә шул революцияның емештәре икәнен бер кем дә инҡар итмәйҙер.

Мәғлүм булыуынса, бөгөн демография мәсьәләһе - илдең мөһим иҗтимағи-сәйәси проблемаларының береһе. Халыҡ һаны кәмеүе статистика белгестәрен генә түгел, ә сәйәсмәндәрҙе лә борсоуға һала. Тыуым артһын өсөн төрлө законлар ҡабул ителә, программалар буйомға ашырыла. Икенсе һәм унан һуң тыуған балаларға әсәлек капиталы, өс балалы ғаиләләргә бушлай ер участкалары бирелеүе, пособиелар, түләүҙәр күләме төрә артыуы - шуға дәлил. Шулай булыуға ҡарамаҫтан, демографик көрсөк дауам итә. Тимәк, мәсьәлә ғаиләләрҙең матди хәлендә генә түгел.

Ғаилә ҡороуҙың да төрлө формалары барлыҡҡа килде: рәсми һәм рәсми булмаған. Икенсеһе "граждандар никаһы" тип атала уның. Башҡортса әйткәндә, "бергә торалар". Была шуларҙың күбеһе байтаҡ йылдар ир менән ҡатын булып йәшәһәләр ҙә бала табырға уйламай.

Яңыраҡ туҡталышта ирекһеҙҙән шундай һөйләшеүгә шаһит булғайным. Бер ханым икенсеһенән, улың өйләнмәнеме әле, тип һорағайны:

- Өсөнсө йыл берәү менән йәшәй. Әммә кәләш алам, тип һүҙ ҡуҙғатҡаны юҡ. Уҡып бөтәйем, бер аҙ аҡса эшләп алайым, ти. Әлеге ҡыҙға өйләнерме-юҡмы, белмәйем, сөнки тегеләй ҡараһаң да, былай ҡараһаң да улыма тап килмәй. Алдағыһын ишәк ҡайғыртһын, әлегә улымдың тамағы туҡ, өҫтө таҙа булыуына күңелем тыныс. Ҡайҙа икән, кем менән йөрөй икән, тип тә борсолмайым. Шулай ҙа ҡыҙы йөккә уҙып ҡуймаһын, һаҡланыу сараһын күрегеҙ, тип тылҡып торам инде, - ти.

Улының да, уның менән йәшәгән ҡыҙҙың да хистәренә төкөрөп ҡараған был ҡатынға әңгәмәсеһенең дә башҡа әйтер һүҙе булманы шикелле, автобус көтөп, байтаҡ торорға тура килһә лә, башҡа һүҙ ҡушманы. Минең иһә был тәкәббер ҡатынға һөйөклө улын теләмәгән бала тыуыуҙан һаҡлай алһа ла, уның теге ҡыҙ менән ҡыҙылыҡ ҡылғанда биоялан дары бәйләнешкә инеп, үҙ-ара мәғлүмәт-энергия алышыу процесы киселеүен, унан бер ниндәй һаҡланыу сараһы ла ҡотҡара алмаҫын әйткем килгәйне. Үҙен һәм үҙенең балаһын ғына яратҡан мин-минлеге көслө ҡатын быны барыбер аңламаҫ, тип, өндәшмәнем.

Ҡайһы бер ғалимдар таныҙға теләмәһә лә, телегония фәнен инҡар итеп булмай. Был термин ниндәй ҙә булһа ырыу билдәләрен быуындан-быуынға тапшырыу тигәнде аңлата. Һәм үрҙә атап кителгән ике осраҡта ла йәштәрҙең киләсәгенә бер ни тикләм хәүеф янауы ихтимал. Ошо темаға бер мәҡәлә уҡығайным. Бер ҡыҙ Африканан уҡырға килгән студентҡа ғашиҡ була. Ҡара тәнле бөҙрә сәсле был егетте үҙенең мәңгелек йәре тип уйлап, уның менән енси бәйләнешкә инә. Тик уларға бергә булыу бәхете теймәй. Тиҙҙән һөйгәне ҡояшлы иленә ҡайтып китә. Ваҡыт үтә. Ҡыҙ кейәүгә сыға, балалары тыуа. Ҡатындың йәшлек мөхәббәте тураһында сер улы үҫеп, ейәне тыуғас ҡына сиселә. Килененең ҡулында ыҫмала һымаҡ ҡап-ҡара малайҙы күреп, артына йығылып китә яҙа ул: гонаһһыҙ сабый уның йәшлек мөхәббәтенә оҡшаған була... Киленәнә ҡаты ҡағылыуын күреп, улына йәш саҡтағы мауығыуы тураһында асыҡтан-асыҡ һөйләп биреүҙән башҡа сараһы ҡалмай уның...

Балаға уҙыуҙан, ауырыуҙарҙан һаҡлаһа ла, бер ниндәй сара ла ир менән ҡатындың генетик йәһәттән мәғлүмәт алышыуынан ҡотҡара алмауына асыҡ миҫал был. Беренсе енси партнерҙың йоғонтоһо тыуасаҡ баланың тышҡы билдәһендә генә түгел, ә психикаһында, ҡанында ла сағылыуы ихтимал.

Һуңғы осорҙа киң мәғлүмәт сараларында енси мөнәсәбәт киң рекламалана. Иғтибар менән ҡараһаң, хушбуй йәки кофены күрһәткәндә лә ярылып ята ул. Иҫләйһегеҙҙер, үҙәк каналдарҙың береһендә бергилке ошондай реклама була торғайны: хуш еҫ бөркөп, эске кулдәктән генә ҡыҙ үтеп киткәйне, бер ирҙең шартлап төймәһе ысҡынып китә... Ҡапыл ғына нимәне рекламалауҙарын аңғармайһың да, уның ҡарауы, нимәгә ишаралағандарын шунда уҡ аңлайһың.

Байтаҡ йылдар элек ВИЧ-инфекция таралыуын иҫкәртеүгә арналған сараларҙың береһендә белгестәр Рәсәйҙә енси ауырыуҙарҙан һаҡланыу ысулдарының рекламаланмауы тураһында борсолоу белдерҙе. Миненсә, был бөтөнләй кәрәкмәй, сөнки ул үҙе уҡ туранан-тура ирекле мөнәсәбәткә, ирекле мөхәббәткә ымлай. Әхлаҡлылыҡты, сафлыҡты рекламаларға кәрәк бөгөн! Шул ваҡытта ғына элекке һымаҡ ныҡлы ғаиләләр барлыҡҡа килер, уларҙа өсәр-бишәр бала тыуыр, илебеҙҙә юғары әхлаҡлы кешеләр артыр, иҡтисад нығыныр.

Тарихта шундай факт билдәле: Бөйөк Ватан һуғышының иң ҡыҙған мәлендә СССР-ҙан Германияға ҡыуып алып кителгән ҡыҙҙарҙы тикшергән немец врачы Гитлерға шулай тип мөрәжәғәт итә: 16-нан 20 йәшкә тиклемге ҡыҙҙарҙың 90 проценты саф булған юғары әхлаҡлы халыҡты еңеү мөмкин түгел! Һәм, белеүегеҙсә, табиптың юраған юш килде. Тик Бөйөк Еңеү яулаған халҡыбыҙ енси революцияға ҡаршы торолоҡ көс табырмы?

**Лена АБДРАХМАНОВА.**

УҢЫШ ҠАҘАН



# ҒҮМЕРҘӘР ЗАЯ ҮТМӘҺЕН

## 29-сы идея
## Тоҡандырыу шәме

Һиңә автомобилеңдәге шәмдәрҙе алыштырырға тура килгәне бармы? Был бик ябай. Һин гаражға килһең дә, машинаңдың капотын асып, эйеләһең, электр сымын ысҡындыраһың, шәмде гайка асҡысы менән бороп алаһың да яңыһын ҡуяһың, электр сымын тоташтыраһың - биш минуттан машинаңа ултырып сығып та китәһең. Тоҡандырыу шәмдәрен алмаштырыу бик еңел, шулаймы? Ләкин, әйтәйек, һин гаражға килеп инәһең дә механиктан тоҡандырыу шәмен алмаштырыуҙы һорайһың, ә ул шунда уҡ автомобилеңдең уң яҡтағы алғы тәгәрмәсен ала башлай. Ихтимал, һин, был аҡылдан яҙған ахыры, тип уйлайһың. Ҡыҙып китеп, һиңә тәгәрмәсте түгел, ә ни бары тоҡандырыу шәмен генә алмаштырырға кәрәк тип, тағы ҡабатлап әйтәһең.

Ошо араларҙа миңә дуҫым инеп сыҡҡайны. Уның яңы спорт автомобиле бар, һәм ул тоҡандырыу шәмен алмаштырыу өсөн уң яҡтағы алғы тәгәрмәсте ысҡындырып алырға кәрәклеге хаҡында аңлатҡайны. Һәм был ысынлап та шулай булып сыҡты. Ошондай машина хужаһының тәүге тапҡыр механикка килеп, тоҡандырыу шәмен алыштырыуын һорағас, механик тыныс ҡына машинаһының уң яҡтағы алғы тәгәрмәсен ала башлағанда уның реакцияһын күҙ алдына килтерә алаһыңмы? Ихтимал, мин әйткәнсә, машина хужаһы ҡыҙып китер, моғайын. Әммә, дуҫым әйтеүенсә, тәгәрмәсте ысҡындырып алыуға ике минутлап ҡына ваҡыт киткән, ә уны алғас, тоҡандырыу шәмдәрен анһат ҡына тартып алып, алмаштырып ҡуйғандар.

Был беҙҙең барыбыҙға ла һабаҡ. Беҙ ҡайһы бер эшмәкәрлекте алғы тәгәрмәсте һүтеү кеүек күрәбеҙ һәм тормошобоҙ ни өсөн тап шулай булыуына ғәжәпләнәбеҙ. Беҙ проблемаларҙы хәл итәбеҙ, әммә хәл итеү беҙгә бөтөнләй аңлашылмаған формала башлана. Беҙ мәсьәләләрҙең сиселеше, кемдер капотты күтәреп, тоҡандырыу шәмен алғандағы кеүек, тормошобоҙға ғәҙәти юл менән килеп керер тип көтәбеҙ, ләкин ҡайһы берҙә ул бөтөнләй икенсе төрлө хәл ителә.

Беҙ, ысынында иһә, эште алмаштырыуға мохтажбыҙ, ә үҙебеҙ ғаилә ығы-зығыһынан сығыу юлын эҙләй башлайбыҙ. Ысынында үҙ эшмәкәрлегебеҙҙе һәм фекерләүебеҙҙе алмаштырыуға мохтаж булған сағыбыҙҙа сәләмәтлегебеҙ менән шөғөлләнә башлайбыҙ. Тоҡандырыу шәмдәре һәм алғы тәгәрмәс тураһында тарихтың бөтә асылы шунда: беҙ проблемаларыбыҙҙы хәл итеү ысулы йәки беҙҙең тормошобоҙға яҡшылыҡтың ниндәй юл менән килеп инеүе хаҡында фекер йөрөтөргә тейеш түгелбеҙ.

Ғаләм - ул бик ҙур һәм ҡатмарлы система. Беҙ бер ваҡытта ла ғаләмдәге, тимәк, тормошобоҙҙағы ла, Бөйөк Аҡыл юлдарының үҙ-ара бәйләнеш серенә төшөнә алмаясаҡбыҙ. Беҙ тик: "Бик яҡшы, Тормоштоң мине яҡлауын ҡабул итәм. Мин тормоштағы бөтә яҡшылыҡты, ҡайҙан килеүенә ҡарамаҫтан, ҡабул итәм һәм һуңғы һөҙөмтәне көтәм", - тип кенә әйтә алабыҙ.

Бөйөк тормош Хәҡиҡәтенең ҡыҫҡаса сағылышы түбәндәгесә: проблемаларың һин белгән ысул менән хәл ителер, тип көтмә. Иң яҡшыһы - үҙ идеяларыңды ситкәрәк ҡуйып тороп, Бөйөк Аҡыл рухына асылыу. Был боҙолған шәмде алыу өсөн тормошоңдоң алғы тәгәрмәсен һүтеүҙе аңлата ла инде, уның ҡарауы, һөҙөмтә көтөлгәндәгенән күпкә яҡшыраҡ буласаҡ.

Үҙеңдең Эске Оҙатыусыңа ышан, ҡарарҙың төрлө рәүештә килеүенә әҙерлән - шул саҡта проблемаларың еңел, бер ниндәй көсөргәнешһеҙ хәл ителер.

**Роберт ЭНТОНИ.**
**(Дауамы бар).**



## 13 ИЮЛЯ
## ПОНЕДЕЛЬНИК
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
5.00, 9.15 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 12.00, 3.00 Новости.
9.50 Модный приговор. [6+]
10.50 Жить здорово! [16+]
12.10, 0.30 Время покажет. [16+]
15.00 Новости (с субтитрами).
15.15 Давай поженимся! [16+]
16.00, 3.25 Мужское / Женское. [16+]
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.40 На самом деле. [16+]
19.40 Пусть говорят. [16+]
21.00 Время.
21.30 Т/с Премьера. "Андреевский флаг". [16+]
23.30 Д/ф Премьера. "Красное и черное". К 175-летию Русского географического общества. [12+]
2.40, 3.05 Наедине со всеми. [16+]

### РОССИЯ 1
5.00 "Утро России".
9.00, 14.30, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 "Доброе утро, республика!"
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 17.00, 20.00 Вести.
11.30 Судьба человека с Борисом Корчевниковым. [12+]
12.40, 18.40 "60 минут". [12+]
14.55, 1.10 Т/с "Тайны следствия-11". [12+]
17.15 "Андрей Малахов. Прямой эфир". [16+]
21.20 Т/с "Ангелина". [12+]
3.00 Т/с "Семейный детектив". [12+]
4.39 Перерыв в вещании.

### БСТ
**7.00 Профилактика на канале с 07.00 до 14.00.**
**14.00 Итоги недели (на рус. яз.).**
**14.45 Специальный репортаж. [12+]**
**15.00, 17.45, 20.30 Интервью. [12+]**
**15.15 Әлләсе... [6+]**
**16.00, 20.00, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.).**
**16.15 "Гора новостей".**
**16.30 Т/с "Сируси". [12+]**
**17.15 Ради добра. [6+]**
**17.30 "Пофутболим?" [12+]**
**18.00, 5.00 "Бай баҡса". [12+]**
**18.30, 22.30, 1.45 Новости (на баш. яз.).**
**19.00 Вечерний телецентр.**
**19.45 "Сәңгелдәк". [0+]**
**20.15 Дорожный патруль. [16+]**
**20.45 Инцидент-репортаж. [12+]**
**21.00 Неизвестный Башкортостан. [12+]**
**21.15 Полезные новости. [12+]**
**22.00 Тайм-аут. [12+]**
**23.00 "Теге өсәү!" [12+]**
**23.30 Спектакль "Мою жену зовут Морис". [12+]**
**2.15 Бәхетнамә. [12+]**
**3.00 Спектакль "Вечерняя трапеза". [12+]**
**5.30 Счастливый час. [12+]**

## 14 ИЮЛЯ
## ВТОРНИК
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
5.00, 9.15 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 12.00, 3.00 Новости.
9.50 Модный приговор. [6+]
10.50 Жить здорово! [16+]
12.10, 0.35 Время покажет. [16+]
15.00 Новости (с субтитрами).
15.15 Давай поженимся! [16+]
16.00, 3.25 Мужское / Женское. [16+]
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.40 На самом деле. [16+]
19.40 Пусть говорят. [16+]
21.00 Время.
21.30 Т/с Премьера. "Андреевский флаг". [16+]
23.30 Д/ф Премьера. "Николай Пржевальский. Экспедиция длиною в жизнь". К 175-летию Русского географического общества. [12+]
2.40, 3.05 Наедине со всеми. [16+]

### РОССИЯ 1
5.00 "Утро России".
9.00, 14.30, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 "Доброе утро, республика!"
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 17.00, 20.00 Вести.
11.30 Судьба человека с Борисом Корчевниковым. [12+]
12.40, 18.40 "60 минут". [12+]
14.55, 1.10 Т/с "Тайны следствия-11". [12+]
17.15 "Андрей Малахов. Прямой эфир". [16+]
21.20 Т/с "Ангелина". [12+]
3.00 Т/с "Семейный детектив". [12+]
4.39 Перерыв в вещании.

### БСТ
**7.00 "Сәләм".**
**9.00, 11.00, 16.00, 20.00, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.).**
**9.15 Сәләм, Республика! [12+]**
**10.00, 16.30 Т/с "Сируси". [12+]**
**11.15 Республика LIVE #дома.[12+]**
**11.45 Дорожный патруль. [16+]**
**12.00 Счастливый час.**
**13.00, 18.30, 22.30, 1.00 Новости (на баш. яз.).**
**13.30 Бәхетнамә. [12+]**
**14.30 "Дорога к храму". [0+]**
**15.00 Брифинг Министерства здравоохранения РБ по коронавирусу.**
**16.15 "Гора новостей".**
**17.15 Үткән ғүмер. [12+]**
**17.45, 20.30 Интервью. [12+]**
**18.00 Тайм-аут. [12+]**
**19.00 Вечерний телецентр.**
**19.45 "Сәңгелдәк". [0+]**
**20.15 "Криминальный спектр". [16+]**
**20.45 Мусорная реформа. [12+]**
**21.00 "Времечко". [12+]**
**22.00 Детей много не бывает. [12+]**
**23.00 "ВасСәләм!" [12+]**
**23.30 Спектакль "Озеро моей души". [12+]**
**1.30 Бәхетнамә. [12+]**
**2.15 Спектакль "Не улетайте, журавли!" [12+]**
**3.45 "Сердце Евразии-2012". Репортаж. [12+]**
**4.15 "Сердце Евразии-2012". Фестиваль современного искусства народов России. [12+]**
**5.30 Счастливый час. [12+]**

## 15 ИЮЛЯ
## СРЕДА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
5.00, 9.15 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 12.00, 3.00 Новости.
9.50 Модный приговор. [6+]
10.50 Жить здорово! [16+]
12.10, 0.30 Время покажет. [16+]
15.00 Новости (с субтитрами).
15.15 Давай поженимся! [16+]
16.00, 3.25 Мужское / Женское. [16+]
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.40 На самом деле. [16+]
19.40 Пусть говорят. [16+]
21.00 Время.
21.30 Т/с Премьера. "Андреевский флаг". [16+]
23.30 Д/ф "Василий Ливанов. Кавалер и джентльмен". [12+]
2.40, 3.05 Наедине со всеми. [16+]

### РОССИЯ 1
5.00 "Утро России".
9.00, 14.30, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 "Доброе утро, республика!"
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 17.00, 20.00 Вести.
11.30 Судьба человека с Борисом Корчевниковым. [12+]
12.40, 18.40 "60 минут". [12+]
14.55, 1.10 Т/с "Тайны следствия-11". [12+]
17.15 "Андрей Малахов. Прямой эфир". [16+]
21.20 Т/с "Ангелина". [12+]
3.00 Т/с "Семейный детектив". [12+]
4.39 Перерыв в вещании.

### БСТ
**7.00 "Сәләм".**
**9.00, 11.00, 16.00, 20.00, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.).**
**9.15 Сәләм, Республика! [12+]**
**10.00, 16.30 Т/с "Сируси". [12+]**
**11.15 100 имен Башкортостана. [12+]**
**11.45 "Криминальный спектр". [16+]**
**12.00 Счастливый час.**
**13.00, 18.30, 22.30, 1.15 Новости (на баш. яз.).**
**13.30 Бәхетнамә. [12+]**
**14.30 "Аль-Фатиха". [0+]**
**15.00, 17.45, 20.30 Интервью. [12+]**
**15.15 "Апчхи". [0+]**
**15.30 "Сулпылар". [0+]**
**16.15 "Гора новостей".**
**17.15 Үткән ғүмер. [12+]**
**18.00 Автограф. [12+]**
**19.00 Вечерний телецентр.**
**19.45 "Сәңгелдәк". [0+]**
**20.15 Инцидент-репортаж. [12+]**
**20.45 "Честно говоря". [12+]**
**22.00 Историческая среда. [12+]**
**23.00 Күстәнәс. [12+]**
**23.30 Спектакль "Белые ночи Акмуллы". [12+]**
**1.45 Спектакль "Озеро моей души". [12+]**
**3.15 "Йөрәк һүҙе". [12+]**
**3.30 "Сердце Евразии-2012". Фестиваль современного искусства народов России. [12+]**
**5.30 Счастливый час. [12+]**

## 16 ИЮЛЯ
## ЧЕТВЕРГ
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
5.00, 9.15 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 12.00, 3.00 Новости.
9.50 Модный приговор. [6+]
10.50 Жить здорово! [16+]
12.10, 0.20 Время покажет. [16+]
15.00 Новости (с субтитрами).
15.15 Давай поженимся! [16+]
16.00, 3.25 Мужское / Женское. [16+]
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.40 На самом деле. [16+]
19.40 Пусть говорят. [16+]
21.00 Время.
21.30 Т/с Премьера. "Андреевский флаг". [16+]
23.30 Премьера. "Гол на миллион". [18+]
2.40, 3.05 Наедине со всеми. [16+]

### РОССИЯ 1
5.00 "Утро России".
9.00, 14.30, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 "Доброе утро, республика!"
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 17.00, 20.00 Вести.
11.30 Судьба человека с Борисом Корчевниковым. [12+]
12.40, 18.40 "60 минут". [12+]
14.55, 1.10 Т/с "Тайны следствия-11". [12+]
17.15 "Андрей Малахов. Прямой эфир". [16+]
21.20 Т/с "Ангелина". [12+]
3.00 Т/с "Семейный детектив". [12+]
4.39 Перерыв в вещании.

### БСТ
**7.00 "Сәләм".**
**9.00, 11.00, 16.00, 20.00, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.).**
**9.15 Сәләм, Республика! [12+]**
**10.00, 16.30 Т/с "Сируси". [12+]**
**11.15 "Честно говоря". [12+]**
**12.00 Счастливый час.**
**13.00, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз.).**
**13.30, 2.15 Бәхетнамә. [12+]**
**14.30 "Бай баҡса". [12+]**
**15.00 Брифинг Министерства здравоохранения РБ по коронавирусу. [12+]**
**16.15 "Гора новостей".**
**17.15, 23.00 Автограф. [12+]**
**17.45, 20.30 Интервью. [12+]**
**18.00 "Бай". [12+]**
**19.00 Вечерний телецентр.**
**19.45 "Сәңгелдәк". [0+]**
**20.15 "Криминальный спектр".[16+]**
**20.45 История одного села. [12+]**
**21.00 "Времечко". [12+]**
**22.00 Республика LIVE #дома.[12+]**
**23.30 Спектакль "Любовь под вязами". [12+]**
**3.00 Спектакль "Пролетая над гнездом кукушки". [12+]**
**5.30 Счастливый час. [12+]**

## 17 ИЮЛЯ
## ПЯТНИЦА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
5.00, 9.15 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 12.00 Новости.
9.50, 2.30 Модный приговор. [6+]
10.50 Жить здорово! [16+]
12.10 Время покажет. [16+]
15.00 Новости (с субтитрами).
15.15, 3.15 Давай поженимся! [16+]
16.00, 4.00 Мужское / Женское. [16+]
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.40 На самом деле. [16+]
19.40 Поле чудес. [16+]
21.00 Время.
21.30 "Фабрика звезд". Лучшее. [12+]
23.20 Х/ф Премьера. "Обмен принцессами". [16+]
1.10 Наедине со всеми. [16+]

### РОССИЯ 1
5.00 "Утро России".
9.00, 14.30, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 "Доброе утро, республика!"
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 17.00, 20.00 Вести.
11.30 Судьба человека с Борисом Корчевниковым. [12+]
12.40, 18.40 "60 минут". [12+]
14.55 Т/с "Тайны следствия-11". [12+]
17.15 "Андрей Малахов. Прямой эфир". [16+]
21.20 Т/с "Ангелина". [12+]
0.15 Торжественная церемония открытия XXIX Международного фестиваля "Славянский базар в Витебске".
2.00 Х/ф "Ключи от счастья". [12+]

### БСТ
**7.00 "Сәләм".**
**9.00, 11.00, 16.00, 20.00, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.).**
**9.15 Сәләм, Республика! [12+]**
**10.00, 16.30 Т/с "Сируси". [12+]**
**11.15, 18.00 "Йома". [0+]**
**11.45 "Криминальный спектр". [16+]**
**12.00 Республика LIVE #дома[12+]**
**12.30, 5.00 Башҡорттар. [6+]**
**13.00, 18.30, 22.30, 2.15 Новости (на баш. яз.).**
**13.30, 4.30 Үткән ғүмер. [12+]**
**14.00 "Йөрәк һүҙе". [12+]**
**14.15 "Красная кнопка". [16+]**
**15.00, 17.45, 20.30 Интервью. [12+]**
**15.15 "Алтын тирмә". [0+]**
**16.15 "Ҡош юлы. Балалар". [6+]**
**17.15 Моя планета Башкортостан. [12+]**
**19.00 "Башҡорт йыры-2020". Телевизионный конкурс среди профессиональных исполнителей башкирской песни. [12+]**
**19.45 "Сәңгелдәк". [0+]**
**20.15 Инцидент-репортаж. [12+]**
**20.45 История одного села. [12+]**
**21.00 Башҡорттар. [12+]**
**22.00 "ВасСәләм!" [16+]**
**23.00 Караоке по-башкирски. [12+]**
**23.30 Спектакль "Найдите мне папашу". [12+]**
**1.30 Уфа. Живое. [12+]**
**2.45 Спектакль "Шәүрәкәй". [12+]**
**5.30 "Наука 102". [12+]**
**6.00 Историческая среда. [12+]**

## 18 ИЮЛЯ
## СУББОТА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
6.00 Телеканал "Доброе утро. Суббота".
9.00 Играй, гармонь любимая! [12+]
9.45 Слово пастыря. [0+]
10.00 Новости.
10.15 Д/ф "Михаил Танич. "На тебе сошелся клином белый свет..." [12+]
11.15, 12.15 Видели видео? [6+]
12.00 Новости (с субтитрами).
13.50 Премьера. "На дачу!" с Наташей Барбье. [6+]
15.00 "Михаил Танич. "Не забывай". [16+]
16.50 "Кто хочет стать миллионером?" с Дмитрием Дибровым. [12+]
18.00, 21.20 Сегодня вечером. [16+]
21.00 Время.
22.50 Х/ф Премьера. "За бортом". [16+]
0.55 Наедине со всеми. [16+]
2.25 Модный приговор. [6+]
3.10 Давай поженимся! [16+]
3.50 Мужское / Женское. [16+]

### РОССИЯ 1
5.00 "Утро России. Суббота".
8.00 Местное время. Вести-Башкортостан.
8.20 Местное время. Суббота.
8.35 По секрету всему свету.
9.00 "Тест". Всероссийский потребительский проект. [12+]
9.25 Пятеро на одного.
10.10 Сто к одному.
11.00, 20.00 Вести.
11.30 100ЯНОВ. [12+]
12.30 Доктор Мясников. [12+]
13.40 Х/ф "Папа для Софии". [12+]
18.00 "Привет, Андрей!" [12+]
20.50 Х/ф "Ты только будь со мною рядом". [12+]
1.00 Х/ф "Во саду ли, в огороде". [12+]

### БСТ
**7.00 "Доброе утро!" Концерт. [12+]**
**8.00, 18.30 Новости (на баш. яз.).**
**8.15 "Аль-Фатиха". [12+]**
**8.45 М/ф "Мультфильмы". [0+]**
**9.15 Посмотрим... [6+]**
**10.00 "Физра". [6+]**
**10.15 Преград. Net. [6+]**
**10.30 "Яйляу". [0+]**
**11.00 "Апчхи". [0+]**
**11.15 "Сыйырсыҡ". [0+]**
**11.30 Детей много не бывает. [6+]**
**12.00 Күстәнәс. [12+]**
**12.30 Үткән ғүмер. [12+]**
**13.00 "Йөрәк һүҙе". [12+]**
**13.15, 20.15 Земляки. [12+]**
**13.30 Хазина о Хазине. [12+]**
**14.00 "Дарю песню". [12+]**
**16.00 Колесо времени. [12+]**
**17.00 "Все песни о прекрасном". Концерт. [12+]**
**17.30 100 сезон Башдрамы. [12+]**
**19.00 Вопрос+Ответ=Портрет. [6+]**
**19.45 "Сәңгелдәк". [0+]**
**20.00 Ради добра. [6+]**
**20.30 "Байыҡ-2020". Республиканский конкурс исполнителей башкирских танцев. [12+]**
**21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.).**
**22.00 Караоке по-башкирски. [12+]**
**22.30 Новости недели (на баш. яз.).**
**23.15 Спектакль "Индийская насмешница". [12+]**
**1.00 Итоги недели (на баш. яз.).**
**1.45 Спектакль "Похищение стариков". [12+]**
**3.30 "Башҡорт йыры-2020". Телевизионный конкурс среди профессиональных исполнителей башкирской песни. [12+]**
**4.15 "Млечный путь". [12+]**
**6.00 "Наука 102". [12+]**

## 19 ИЮЛЯ
## ВОСКРЕСЕНЬЕ
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
5.40, 6.10 Т/с "Тонкий лед". [16+]
6.00, 10.00 Новости.
7.45 Часовой. [12+]
8.15 Здоровье. [16+]
9.20 "Непутевые заметки" с Дмитрием Крыловым. [12+]
10.10 Жизнь других. [12+]
11.10, 12.15 Видели видео? [6+]
12.00 Новости (с субтитрами).
13.50 Премьера. "На дачу!" с Ларисой Гузеевой. [6+]
15.00 Моя мама готовит лучше! [0+]
16.00 Большие гонки. [12+]
17.25 Русский ниндзя. [12+]
19.15 Три аккорда. [16+]
21.00 Время.
22.00 Премьера. "Dance Революция". Гранд-финал. [12+]
23.45 Д/ф Премьера. "План "Б". [12+]
0.30 Наедине со всеми. [16+]
1.55 Модный приговор. [6+]
2.40 Давай поженимся! [16+]
3.20 Мужское / Женское. [16+]

### РОССИЯ 1
4.10 Х/ф "Букет". [12+]
5.50, 1.55 Х/ф "Отель для Золушки". [12+]
8.00 Местное время. Воскресенье.
8.35 Устами младенца.
9.20 Когда все дома с Тимуром Кизяковым.
10.10 Сто к одному.
11.00, 20.00 Вести.
11.30 Х/ф "Мать и Мачеха". [12+]
15.50 Х/ф "Кто я". [12+]
21.20 "Воскресный вечер с Владимиром Соловьёвым". [12+]
1.00 Д/ф "Убийство Романовых. Факты и мифы". [12+]
3.55 Перерыв в вещании.

### БСТ
**7.00 "Доброе утро!" Концерт. [12+]**
**8.00 Новости (на баш. яз.).**
**8.15 "Йома". [0+]**
**8.45 "Бай". [12+]**
**9.15 Моя вершина. [12+]**
**9.30 М/ф "Мультфильмы". [0+]**
**10.00 "Бейе". [0+]**
**10.15 "АйТекә!" [6+]**
**10.30 "Сулпылар". [0+]**
**11.00 "Книга сказок". [0+]**
**11.15 "Ал да гөл". [6+]**
**11.30 "Ҡош юлы. Балалар". [6+]**
**11.45 Берешмә. Профи. [6+]**
**12.30 Итоги недели (на баш. яз.).**
**13.15 "Алтын тирмә". [0+]**
**14.00 "Дарю песню". [12+]**
**15.00 Башҡорттар. [6+]**
**15.30 Д/ф "Мы - одна семья".[12+]**
**16.00 "Дорога к храму". [0+]**
**16.30, 5.30 Историческая среда. [12+]**
**17.00 "Мы - кавалеристы". Концерт Сибайского концертно-театрального объединения. [12+]**
**18.45 Автограф. [12+]**
**19.15 Дела и люди. [12+]**
**19.45 Әлләсе... [6+]**
**20.30 Теге өсәү. [12+]**
**21.00, 22.30 Республика LIVE #дома. [12+]**
**21.30, 6.00 Итоги недели (на рус. яз.).**
**22.15, 6.45 Специальный репортаж. [12+]**
**23.00 "Красная кнопка". [16+]**
**23.45 Спектакль "Чужой ребенок". [12+]**
**2.00 Государственный Кубанский академический казачий хор. [12+]**
**3.00 Д/ф "Война нас не считала за детей". [12+]**
**4.00 "Наука 102". [12+]**
**4.30 "Млечный путь". [12+]**

*✓ Еңел эшкә - ауыр эшкә тотонған кеүек, ауыр эшкә еңел эшкә тотонған кеүек тотонма. Тәүге осраҡта ышанысың - битарафлыҡҡа, икенсеһендә үҙ-үҙеңә ышанмауың ҡыйыуһыҙлыҡҡа әйләнмәһен өсөн. (Бальтасар Грасиан).*



*БАШ ЭШЛӘТМӘК*

# ЕР ӨҪТӨНДӘ БИК КҮП ҠАЛАЛАРҘАН ЯҠЫНЫРАҠ ӨФӨМ ҠОЯШҠА




**Йәмилә ШӘРӘФЕТДИНОВА төҙөнө.**

**27-се һандағы сканворд яуаптары.**

**Горизонталь буйынса:** Ҡолаҡ. Агроном. Ҡағыҙ. Ихата. Аҫҡар. Крейсер. Камелот. Арҡан. Еңмеш. Әҙибә. Йод. Нәжми. Илле. Оҫол. Ризыҡ. Кавал. Окоп. Окинава. Ареал. Аксаков. Усаҡлыҡ.

**Вертикаль буйынса:** Кеҫәртке. Исмәғилев. Ләлә. Оло. Азат. Какаду. Актер. Ҡороҡ. Йөлөн. Ашҡаяҡ. Ғәйнетдинов. Какао. Ҡумыҙ. Ваҡ. Ара. Нерпа. Рәшә. Аҙым. Рун. Ишҡол.

# НАМАҘ ВАҠЫТТАРЫ

***1441 һижри йыл.***

| Июль (Зөлҡәғиҙә) | Иртәнге намаҙ | Ҡояш ҡалҡа | Өйлә намаҙы | Икенде намаҙы | Аҡшам намаҙы | Йәстү намаҙы |
|---|---|---|---|---|---|---|
| 13 (22) дүшәмбе | 3:29 | 4:59 | 13:30 | 20:14 | 21:44 | 23:14 |
| 14 (23) шишәмбе | 3:30 | 5:00 | 13:30 | 20:13 | 21:43 | 23:13 |
| 15 (24) шаршамбы | 3:31 | 5:01 | 13:30 | 20:12 | 21:42 | 23:12 |
| 16 (25) кесе йома | 3:33 | 5:03 | 13:30 | 20:10 | 21:40 | 23:10 |
| 17 (26) йома | 3:34 | 5:04 | 13:30 | 20:09 | 21:39 | 23:09 |
| 18 (27) шәмбе | 3:36 | 5:06 | 13:30 | 20:08 | 21:38 | 23:08 |
| 19 (28) йәкшәмбе | 3:37 | 5:07 | 13:30 | 20:06 | 21:36 | 23:06 |

*"Башҡортса дини календарь"ҙан алынды.*

*ИШЕТТЕГЕҘМЕ ӘЛЕ?*

# МӘКТӘП КЕЙЕМЕ

Башҡортостандың еңел сәнғәт ассоциацияһы һәм Өфө дәүләт нефть техник университеты балаларҙың теләген дә, техник талаптарҙы ла иҫәпкә алған мәктәп формаһы коллекцияһын әҙерләгән. Ошондай комплекттың хаҡы 4 мең һумдан артмай. Башҡортостан Республикаһы мәғариф һәм фән министрының беренсе урынбаҫары Илдар Мәүлетбирҙин һүҙҙәренсә, күпселек мәктәптәр теге йәки был дәрәжәлә мәктәп формаһын ҡабул иткән дә инде. Айырым муниципалитеттарҙа берҙәм форма индереү миҫалдары бар. Республикаӊың еңел сәнғәт ассоциацияһы рәйесе Зәлфирә Ғәзизова һүҙҙәренсә, Ассоциация вәкилдәре районлрға бара, халыҡҡа форманың өлгөләрен күрһәтә: бындай сараларға мөнәсәбәттәр ыңғай. "Был - бик һиҙгер тема, бында арттырып ебәрмәү мөһим, - тип белдерҙе Башҡортостан Башлығы. - Атаәсәләргә баҫым яһарға ярамай. Был сифатлы һәм матур форма булыуын аңлатырға кәрәк. Идея бик һәйбәт, мин уны хуплайым. Әйҙәгеҙ, экспериментты 2024 йылға тиклем оҙайтайыҡ, минә уның барышы тураһында хәбәр итеп тороғоҙ, ә һуңынан ҡарарбыҙ".

*БЕЛМӘҺӘҢ - БЕЛ!*



# КОЛБАСА ҠАРТАЙТА

**Ҡайһы бер аҙыҡ-түлек кешене ваҡытынан алда тиҙ ҡартайтыуы бар һәм уларҙы рациондан алып ташларға кәрәк.**

Был турала Федераль тикшеренеүҙәр үҙәгенең "Һаулыҡ һәм спорт туҡланыуы" консультация-диагностика үҙәге диетологы Тамара Прунцева тулыраҡ мәғлүмәт еткерә. Мәҫәлән, буяу, тәмләткес, консервант, ҡуйыртҡыс матдәләре булған өҫтәмәләр менән артыҡ эшкәртелгән аҙыҡтар айырыуса зыянлы, тип билдәләй диетолог. Был исемлеккә сосиска, колбаса һәм магазин ярымфабрикаттары, ҡамыр аштары, газировкалар инә. Балансһыҙ туҡланыу хромосомаларҙың органиҙмдың ҡартайыуы өсөн яуаплы остарын - теломерҙарҙы ҡыҫҡарта. Прунцева рационға икмәк, ярмалар, бойҙайҙың ҡаты сорттарынан макарондар индерергә, тәүлегенә 400 грамм йәшелсә-емеш ашарға кәңәш итә. Шулай уҡ аҡһым миҡдарын да самаларға кәрәк.

# ҮПКӘЛӘРГӘ ЯРҘАМ

**Үпкәлә һәм тын алыу юлдарында ҡаҡырыҡ махсус эшкәртелеп сығарылған лайла. Тәмәке тартыу, насар экологик шарттар, ҡайһы бер сирҙәр үпкәлә ҡаҡырыҡ йыйылыуына сәбәпсе була ала.**

Артыҡ лайланы дарыуҙар ғына түгел, ҡайһы бер ябай аҙыҡтар ҙа организмдан сығарырға ярҙам итә. Улар араһында алма иң һөҙөмтәлеһе. Уның фенолды берләшмәләре һәм флавоноидтары тын алыу юлдары шешеүен баҫа. Ғалимдар һуңғы тикшеренеүҙәр һөҙөмтәһендә көн һайын бер стакан алма һуты эсеү тын ҡыҫылыуҙан арындырыуын асыҡлаған.

Омега-3 кислоталарына бай майлы балыҡ та бик файҙалы, ул хроник обструктив үпкә сирен дауаларға ярҙам итә. Бындай балыҡтар исемлегенә скумбрия, сельдь, бағыр, сардиналар инә.

Йәшел сәй ҙә бик шифалы, сөнки унда антиоксиданттар күп һәм улар үпкәнең шешеүен яҡшы баҫа, уңалта.

Тын алыу юлдары сәләмәтлеге өсөн рационда сәтләүектәр һәм орлоҡтар, зәйтүн майы булырға тейеш. Бынан тыш, брокколи, имбир, чили боросо, эшкәртелмәгән бойҙайҙан етештерелгән аҙыҡтар ҡулланырға кәрәк.

Флавоноидтарға бай һарымһаҡ организмды токсин һәм канцерогендарҙан таҙартыусыһ глутатион матдәһен бүлеп сығарыуҙы тиҙләтә. Табиптар әйтеүенсә, аҙнаһына 3-4 теш һарымһаҡ ашау бик ҡулайлы.

Кардиолог һәм терапевт Светлана Зубаилова үпкә шеше сирен кисергәндән һуң аҡһым, витамин һәм минералдарға бай ризыҡтарҙы ашау мотлаҡ, тип кәңәш итә.

# КӨНБАҒЫШ МАЙЫНАН...

**Таҙартылған көнбағыш майы яман шеш ауырыуҙары барлыҡҡа килеүе ҡурҡынысын арттыра. Был турала Lenta.ru хирург-онколог Иван Карасевҡа һылтанма биреп хәбәр итә.**

Белгес май таҙартылғанда бензин йәки гексан кеүек химик матдәләр ҡулланылыуын һыҙыҡ өҫтөнә ала. Уларҙың ҡалдыҡтары ашҡа төшә. Бынан тыш, ризыҡты ҡурған саҡта майҙың составы тулыһынса үҙгәрә һәм канцероген матдәләр барлыҡҡа килеп, аҙыҡ менән организмға үтә. Ә таҙартылған майҙағы трансмайҙар организмда йыйылып, төрлө ауырыуҙар барлыҡҡа килеүенә сәбәпсе була. Табип ғаиләлә антиоксиданттарға бай зәйтүн майына өҫтөнлөк биреүҙәре тураһында ла белдерә.

ШАҒИР ҺҮҘЕ

# АҘАН ӘЙТЕР ИР-АТ ЮҠ АУЫЛДА,

## Ҡатын-ҡыҙға былар тыйылған…

### Себергә хат

*Ни күрһәм дә - үҙ еремдә,*
*Миктәһәм, кәрәкһәм дә…*
***Буранбай Исҡужин***

Ир-егеттәр төйәк итә тыуған ерен,
Ә мал-тыуар төйәк итә туйған ерен.
Башҡорт һарҡындыһы менән тулған Себер
Халыҡ, тиеп, әсенмәйҙәр береһе-бер.

Бар милләт эләгеп-ҡолап ил бөтәйтә,
Был истәктәр "аҡса" тиеп,
Бил бөксәйтә.
Ә беҙ белеп торабыҙ бит: байтағыбыҙ
"Үлергә" тип атайсалға ҡайтаһығыҙ.

Тик халыҡҡа, тыуған ергә, йә, әйтегеҙ,
Кәрәк булырмы һуң тере мәйетегеҙ?..
...Йөрәй бирегеҙ, оҡшаған Себерегеҙ.
Тик быҒаулы һөлдә тапһағыҙ, берегеҙ,
Алып ҡайтығыҙ...
Ул - бәлки, Буранбайҙыр...

**Рәйес ТҮЛӘК.**

### Һылыу, килендәр…

Ҡәбер ҡаҙыусыға эш тубыҡтан,
Табут оҫтаһына - муйындан.
Йыл эсендә күпме ауылдарҙа
Нисә егет ергә һыйынған.

Һылыуҙарым,
Йәп-йәш киленсәктәр
Ҡалай көтәр икән донъяны?
Эй Раббыбыҙ! Ирҙәр ҡырылып ята,
Яңғыҙ бисәнең бит күңеле ҡайта,
Ҡатын-ҡыҙың бирешеп ҡуймаһын.

Бармы аҡһаҡалдар йәтимдәрҙең
Күңелен күтәрәм тип һүҙ әйтер?
Ат егергә әсәһе өйрәтер ҙә,
Балта эшенә, трактор йүнәтергә,
Мал салырға кемдәр өйрәтер?

- Атайыма әйтәм! -
Тип һөрәнләп,
Кемгә һыйынып күңеле кителгән?
Ир-егеттәр нишләп сабырлыҡтан,
Ер өҫтөнөң ҡәҙерен белеүҙәрҙән,
Уйсанлыҡтан мәхрүм ителгән?

Ҡәбер ҡаҙыусыға эш тубыҡтан,
Табут оҫтаһына - муйындан.
Аҙан әйтер ир-ат юҡ ауылда,
Ҡатын-ҡыҙға былар тыйылған...

Әммә тыйылмаған һары таңдан
Ҡара тәнгә саҡлым көсәнеү,
Утын ярыу, тиҙәк таҙартыуҙар,
Яратыуға зарығып таң атыуҙар.
Ялан-ялан сабыу бесәнен.

Һылыуҙарым,
Йәп-йәш киленсәктәр,
Милләт хәсрәттәрен күтәреп,
Йәйлап ирегән шәм шикелле һарҡып,
Замананың күсәгенән шаңҡып,
Ургынаһын сәйнәй үрттәлеп.

**Тамара ҒӘНИЕВА.**

### Референдум

Барлағандай беҙҙең арабыҙҙы,
Йыйнағандай бөгөн бер тупҡа:
- Һин башҡортмо? - тиеп һорау бирҙе
Башҡорт теле һәр бер башҡортҡа.

Ул өндәште һәр бер ир-егеткә,
Ул төбәлде һәр бер ҡатынға.
Яуап көттө саф күктәрҙән бағып,
Баҫып торған килеш урҡында.

Ул ҡараны атай күҙҙәренә!
Ул уҡтады һәр бер әсәгә!
Әйтерһең дә, бөгөн Үлем менән
Телем һүҙе бер үк үлсәүҙә.

Бер ғәскәргә әллә туплауымы?
Йыйнауымы әллә бер ҡорға?
Һәр башҡорттоң йөрәк ҡуҙҙарынан
Башҡорт теле тора балҡырға!

Бына-бына тоҡанырға тора,
Таралырға тора ул ялҡын.
Башҡорт теле халҡын һөйгән кеүек,
Һәр милләттәш уны ярат һын!

Эшен ташлап һәр кем ҡәләм алып,
Теркәп ҡуйһын милли асылын -
Башҡорт булып ергә тыуғанбыҙ беҙ!
Башҡорт теле ҡалмаҫ баҫылып!

Уйын йыйнап һәр кем яҙып ҡуйһын
Саф ниәтен ап-аҡ ҡағыҙға -
Бөгөн башҡорт теле йәшәһен тип
Ата-баба ҡанын ағыҙған!

Барлағандай тоғро һалдаттарын,
Рухи ҡеүәт бөгөн ҡор башы.
Был быуатта ҡабат балҡып сыҡһын
Телебеҙҙең нурлы ҡояшы!

Телһеҙ ҡалыу илһеҙ ҡалыуға тиң.
Телһеҙ ҡалған халыҡ - мең етем!
Тоғролоҡҡа һынау тотҡан мәлдә
Башҡорт теле туплай милләтен!

**Лариса АБДУЛЛИНА**

### Башҡорт иле

Ҡайҙа - аҙан, һыуҙа - һаҙан,
Усаҡтарҙа ҡайнай ҡаҙан -
Шунда - башҡорт.
Йөҙө - нурлы, иле - муллы,
Табынында бисмиллалы
Һыйлы аш-ҡот.
Иманым тип, ил-ғәмем, тип
Ҡанын ҡойған, йәнен ҡыйған -
Аҙаны шул,
Йәйрәп ятҡан тау-далаһын
Инһәп аҡҡан йылғаларҙың
Һаҙаны мул.
Ни мосафир изге уйҙан
Тупһабыҙҙан аша уҙһа -
Ҡаҙан әҙер,
Бабаларҙан шул рәүештә
Йәшәргә тип, эшләргә тип
Ҡалған нәҙер.

Донъяларҙа беҙ юғалған
Ҡәүем түгел, әүен түгел -
Кәмһенмәйбеҙ,
Сит малына, байлығына,
Әллә кемдең ер-һыуына
Ымһынмайбыҙ.

Шөкөр, тибеҙ: тулы - ҡаҙан,
Һыуҙа - һаҙан, моңло - аҙан,
Ныҡлы биле;
Иман сәсһен, дуҫ күбәйтһен,
Торған ерен ожмах итһен
Башҡорт иле!

**Гүзәл СИТДИҠОВА.**

### Хаҡ тарих

Ихтилалдар булған ҡанлы ерҙә
Беҙ терелер көслә тамырбыҙ.
Уҙғандарҙың күҙҙәренә баҡһаҡ,
Хаҡ тарихтың үҙен танырбыҙ.

Башҡорттар беҙ! Ыҡтан Иртышҡаса
Йылҡыларын ҡыуған халыҡ та.
Аҫабалар - минең ҡандаштарым,
Кемдәр ҡаршы ошо хаҡлыҡҡа?

Ут күршеләр йотоп бөтәм тиеп
Нисә быуат инде яҫҡына.
"Без башкортлар" тигән ҡандашынан
Тик маңҡорттар ғына ятһына.

Сынғыҙхандан ҡалған оранлыбыҙ,
Бар милләтте раҫлар тамғабыҙ.
Уралтауҙан диңгеҙ сиккән саҡтан
Беҙ башҡорттар булып ҡалғанбыҙ!

Байлар, Бүләр, Ҡырғыҙ,
Ҡыпсаҡ, Меңле,
Бөрйән, Ҡатай, Табын, Әйләләр...
Һәр ырыуы ғәзиз милләтемдең
Башҡорт тарихына бәйләләр.

Беҙ бер тамыр, гөрләп үҫер тамыр,
Йотоуҙары беҙҙе бик ауыр.
Асылдарын һаҡлар аҫабаның
Ырыуына мәңге Ҡот яуыр.

**Фәнил БҮЛӘКОВ.**

СӘНҒӘТ КӨНДӘЛЕГЕ

# СИБАЙҘАР…

## Шайморатовты сәхнәгә сығара

**А. Мөбәрәков исемендәге Сибай башҡорт драма театры Флорид Бүләковтың "Шайморатов генерал" героик драмаһы буйынса репетициялар уҙғара. Спектакль 112-се Башҡорт кавалерия дивизияһы командиры, Рәсәй Геройы, генерал-майор Миңлеғәли Шайморатов иҫтәлегенә арналған.**

Спектаклде Туймазы театрының баш режиссеры Илнур Муллабаев сәхнәләштерә, ҡуйыусы рәссамы - Рәсәйҙең һәм Ҡалмыҡ Республикаһының атҡаҙанған сәнғәт эшмәкәре Валерий Яшкулов. Ә бына профессиональ режиссер, хореограф Ярослав Францев спектаклдең балетмейстеры булһа, Өфө ҡалаһынан йырҙар ижад итеүсе Илсаф Вәдүтов - композиторы. "Барыбыҙға ла Шайморатов, тәү сиратта, шәхес буларaҡ бик ҡыҙыҡлы. Беҙ уның полктарҙы атаҡаға ебәргән ҡомдив икәнен яҡшы беләбеҙ, ә кеше буларaҡ ул ниндәй булған? Был да бик әһәмиәтле. Спектаклебеҙ аша үҙ версиябыҙҙы күрһәтергә теләйбеҙ", - тип "Сибай-ТВ" телекомпанияһына интервью бирә актер Вадим Ғилманов.

Спектаклдең премьераһы 7-8 июлгә планлаштырылған. Әммә тамаша залы, коронавирус пандемияһына бәйле, буш буласаҡ. Проект "Берҙәм Рәсәй" партияһының "Бәләкәй ҡалалар театры" проекты сиктәрендә тормошҡа ашырыла.

АҠЫЛ-ҠАҘНА



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# ЕРЕ БАРҘЫҢ…

## еме бар

Бала уңған ҡатындың бер ҡулын бәйләй, уңмаған ҡатындың ике ҡулын да бәйләй.

**(Башҡорт халыҡ мәҡәле).**

Көнсөллөктөң байрамы булмай.

**(Фрэнсис Бэкон).**

Кеше башҡалар уны күҙәтә икәнде белгәндә генә үҙен күҙәтә башлай.

**(Маркиз Галифакс).**

Еңел эшкә - ауыр эшкә тотонған кеүек, ауыр эшкә еңел эшкә тотонған кеүек тотонма. Тәүге осраҡта ышанысың - битарафлыҡҡа, икенсеһендә үҙ-үҙеңә ышанмауың ҡыйыуһыҙлыҡҡа әйләнмәһен өсөн.

**(Бальтасар Грасиан).**

Тормош тойғолар менән йәшәүсе өсөн - трагедия, аҡыл менән йәшәүсегә - комедия.

**(Жан Лабрюйер).**

Башҡаларҙың серен сисергә ярат һаҡ та, үҙебеҙҙең серҙе белдерергә яратмайбыҙ.

**(Франсуа де Ларошфуко).**

Өйөңдә эт тотаһың икән, тимәк, эт һиңә түгел, һин эткә хеҙмәт итәһең.

**(Мишель Монтень).**

Кеше йышыраҡ аҙаҡ маҡтанып һөйләү өсөн белем алырға тырыша.

**(Блез Паскаль).**

**Шулай итеп, тағы бер риүәйәт: "Бер мулла вәғәз уҡырға тип мәсеткә килгән. Ләкин мәсеттә бер йәш ат ҡараусынан башҡа берәү ҙә юҡ, ти. Мулла эстән генә уйлай икән: "Мин вәғәз уҡырға тейешменме, юҡмы?". Был хаҡта ул ат ҡараусынан һорарға булған: "Һинән башҡа бында берәү ҙә юҡ, мин вәғәз уҡырға тейешменме, юҡмы?" Ат ҡараусы былай яуап биргән: "Мин ябай кеше. Был мәсьәләлә бер ни ҙә аңламайым. Ә шулай ҙа мин үҙем ат һарайына килеп, бөтөн аттарҙың да ҡасып бөткәнен, әммә берәүһенең генә тороп ҡалғанын күрһәм дә уға барыбер ашарға бирәм".**

**Мулла был һүҙҙәрҙе күңеленә яҡын алып, үҙенең вәғәзен һөйләй башлаған. Ике сәғәт буйы туктамай һөйләгән ул. Күңелендә шундай еңеллек тойған. Үҙ сығышына ҡарата ниндәйҙер йылы һүҙ ишеткеһе килеп, ат ҡараусыһынан: "Вәғәзем оҡшанымы һиңә? - тип һорай икән. Ат ҡараусы уға шулай тип яуап биргән: "Мин ябай кеше һәм быларҙың барыһын да аңлап етмәйем, тип әйттем инде. Ләкин ат һарайына килеп, бар аттарҙың да ҡасып бөткәнен, берәүһенең генә ҡалғанын күрһәм дә уға ашарға бирәм. Ләкин мин уға башҡа аттарға тәғәйенләнгән бар аҙыҡты ла биреп бөтөрмәйем…"**

1582218911006

“Киске Өфө” гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**
Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы №ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

Баш мөхәррир:
**Гөлфиә ЯНБАЕВА.**
**Мөхәрририәт:**
Сәриә ҒАРИПОВА,
Сәрүәр СУРИНА,
Зәйтүнә ӘЙЛЕ,
Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА,
Миләүшә ҠАҺАРМАНОВА,
Артур БАТЫРШИН.

Редакция һәм нәшер итеүсе адресы:
**450005, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
E-mail: **kiskeufa@mail.ru**
«Печатник» ЯСЙ типографияһында баҫылды (450591, Башҡортостан Республикаһы, Өфө районы, Чесноковка ауылы, Воровский урамы, 32).

**Телефондар:**
**Баш мөхәррир** 253-25-44
**Хәбәрселәр** 252-39-99, 246-03-24
**Матбуғат таратыу** 246-03-23

**Ҡул ҡуйыу ваҡыты -**
10 июль 17 сәғәт 00 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44, 246-03-23** телефондары буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.

«Киске Өфө»нөң индексы – **ПР905**

Тиражы - 3007
Заказ - 546/07